ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30-5 декабрь-ғинуар (аҡъюлай-һыуығай) 2023

№51 (1093)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ!**
*Яңы йыл менән ихласлап ҡотлайбыҙ һеҙҙе! Ҡотлаусыларҙың Ихласлығы, Йөрәк нуры, Һөйөүе һәм Хөрмәте күңелдәрегеҙҙе яҡтыртһын, донъяларығыҙҙы биҙәһен. Яңы йыл кисендә көткән бар мөғжизәләр - Бәхет ҡошо ла, Сәләмәтлек тигән ҡорос арғымаҡ та, Мөхәббәт тигән серле тойғо-хис тә, Уңыш ғали йәнәптәре лә, асмандарға аштырыр Хыял-ҡанат та - барыһы ла ҡаршы алып торһон һеҙҙе 2024 йыл тупһаһында. Бергә булайыҡ!*
*"Киске Өфө"ләр.*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ғаилә йолаһы булһын!**

6

**Боронғо Башҡортостан**
Икенсе кисәк. Урта быуаттар.

7

**Эшҡыуар яҙмалары,**
йәки Нимәнән ҡурҡырға ярамай?

8-10

**Этно-ауылға...**

14

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

ӘЙҘӘГЕҘ... ҠОТЛАЙБЫҘ!

# УҠЫЙЫҠ!

**Әйҙәләргә, аҡыл-кәңәш бирергә, фекерләшергә яратабыҙ инде беҙ. Һәм һәр Яңы йыл алдынан ошо изге әйҙәләүҙәрҙе тағы, тағы ҡабатлайбыҙ. Сөнки аҡ ҡағыҙға яҙылғандар барыбер күңелгә лә, хәтергә лә, аңға ла уйыла, онотолмай, тигәнгә инанғанбыҙ.**

Ысынлап та, әйҙәгеҙ, фекер йөрөтәйек әле: мәғлүмәт сығанаҡтарын ниндәй маҡсат менән файҙалана кеше? Улар, беренсенән, бөгөнгө ябай булмаған заманда баҙап ҡалған кешеләрҙең "Артабан ни эшләргә?" тигән һорауына, ғөмүмән, донъяла үҙ урынын, үҙ эшен, үҙ ашын, үҙ маҡсатын, үҙ шөғөлөн табырға ярҙам итер мең төрлө башҡа һорауҙарына - яуап, төрлө шарттарҙа үҙеңде нисек тоторға, нисек итеп юғалып ҡалмаҫҡа, эске торошондо нисек итеп дөрөҫ көйләргә өйрәтеүсе кәңәштәр бирә, тибеҙ. Унан һуң, теге йәки был һорауына алған яуапты, белемде эшкә екһен өсөн кешенең иң тәүҙә донъяға үҙ ҡарашы, тәүәккәллеге, фиҙаҡәрлеге, аңлауы ла булырға тейеш бит. Тимәк, мәғлүмәт сығанағының бурысы - уның аңын уятыу, аңлатыу, маҡсат ҡуйырға, һығымталар яһарға, уйланырға өйрәтеү. Шуға ла "Киске Өфө"нөң дә даими рәүештә үҙ уҡыусыларына: "Әйҙәгеҙ, гәзитебеҙҙе уҡып, бергәләп уйланайыҡ, донъяуи һорауҙарға бергәләп яуап эҙләйек, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, аҡыл тирәйек, кәңәш-төңәш итәйек. Рухланайыҡ, сәмләнәйек!" - тип өндәшеүеңдә бер ниндәй хилафлыҡ та юҡтыр, шулай бит?

**(Дауамы 2-се биттә).**




ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

## *Һеҙҙә Яңы йыл каникулдарын, Президент Владимир Путин әйткәнсә, ғаилә менән бергә, уртаҡ шөғөл табып, күргәҙмә-театрҙарға йөрөп, спорт менән шөғөлләнеп үткәрергә мөмкинлектәр бармы?*

***Зиннур БОҪҠОНОВ, Бөрйән районы Әбделмәмбәт урта белем биреү мәктәбенең физкультура уҡытыусыһы, Рәсәйҙең почетлы тәрбиә һәм белем биреү хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы:*** Беҙҙең балалар өсөн Яңы йыл каникулдары ҡәҙимге көндәрҙән әллә ни айырылмай, тип әйтер инем, сөнки балалар уҡыу ваҡытымы, ялмы тип ҡарап тормай, һәр ваҡыт спорт залдарында йә иһә саңғы юлдарында. Ғөмүмән, ауылыбыҙ спорт төйәге булараҡ билдәләлек алған. Ҡыш осоро балаларҙы ҡалаға театр, күргәҙмәләргә йөрөтөү төрлө проблемалар менән бәйле, был өлкә менән улар телевидение, гаджеттарҙан да танышып бара ала, ә бына уларҙы сәләмәт һәм сыныҡҡан кешеләр итеп үҫтереү өсөн урында, уларҙың йәшәгән һәм уҡыған ерендә генә өлгәшергә була. Ҡышҡы каникулды санасаңғыһыҙ күҙ алдына килтереп булмай, шуға ла күп йыллыҡ традицияға һалынған сараларыбыҙҙы һаҡларға тырышабыҙ. Каникулда айырыуса беҙҙең саңғы трассаһы тынып тормаясаҡ. Элекке йылдарҙан айырмалы рәүештә, хәҙер беҙҙең трасса яҡтыртылған, йәғни көндөҙ генә түгел, төндә лә йөрөргә була, сөнки ҡыш эңер иртә төшә, ә йоҡо алдынан саф һауала саңғыла йөрөп инергә теләүселәр байтаҡ ҡына.

Әлеге ваҡытта боҙ майҙансығы эшләнә, тимәк, каникулда балалар һәм хатта өлкәндәр ҙә төн еткәнсе хоккей уйнаясаҡ. Быларҙан тыш, яңы асылған ғәмәли атыу тиры ла ал-ял белмәй эшләп килә. Әйткәндәй, бындай тирҙар республикала әле бишәү генә. Әлеге ваҡытта унда пистолеттан практик атыу, спорт винтовкаһынан атыусы полиатлонистар әҙерләнә. Каникулдың икенсе көнөндә үк беҙҙә традицион 3х3 баскетбол буйынса район беренселеге үтәсәк. Уның икенсе көнө асыҡ район турниры - өҫтәл теннисы буйынса ярыш башланасаҡ.

Ҡышҡы каникул осорона ҡарата махсус төҙөлгән көсөргәнешле һәм тығыҙ план буйынса эшләйбеҙ. Артабан план буйынса тәүге саңғы ярыштары сират көтә. Унда ла бөтөн район халҡы ҡатнаша ала. Каникул ваҡытында тағы ла республикаға яҡшы билдәле тюбинг трассаһы ла эшләйәсәк. Мәктәптең спорт залы ла расписаниеға ярашлы эшләй. Һис арттырыуһыҙ әйтәм: залыбыҙҙың бер сәғәткә генә лә буш торғаны юҡ. Шул арҡала хатта беҙҙең көрәшселәребеҙ икенсе ҡатта шөғөлләнергә мәжбүр. Ә уларҙың араһында Рәсәй чемпиондары, донъя беренселеге призерҙары бар. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең ауыл был осор бал ҡорто ояһын хәтерләтә, ә мәктәп, әйтерһең дә, ҙур бер умарта кеүек. Ҡорттар бал йыйған һымаҡ, беҙҙең балалар ҙа һаулыҡ, шатлыҡ, көс запасы туплай.

12+

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Һеҙҙә Яңы йыл каникулдарын, Президент Владимир Путин әйткәнсә, ғаилә менән бергә, уртаҡ шөғөл табып, күргәҙмә-театрҙарға йөрөп, спорт менән шөғөлләнеп уткәрергә мөмкинлектәр бармы?

***Тимур МОСТАФИН, Өфө ҡалаһының 30-сы дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусыһы:*** Яңы йыл каникулдарын түҙемһеҙләнеп көтәбеҙ. Яңы йыл кисен, ғәҙәттә, ғаиләбеҙ менән бергә үткәрәбеҙ: атайым, әсәйем, ағайым, мин һәм 5-се класта уҡыусы һеңлем. Ағайым БДУ студенты, дуҫтары күп, уны кисәгә саҡыралар, ләкин ул Яңы йылды өйҙә беҙҙең менән ҡаршыламайынса дуҫтары янына сығып китмәй. Ғаиләбеҙ йолаһы шундай: атайыма эш буйынса йә командировкала ҡайҙа ғына булырға тура килмәһен, Яңы йыл кисен беҙҙең менән ҡаршыларға ҡайтып етә. Яңы йыл каникулдары балалар өсөн генә түгел, өлкәндәр өсөн дә ял итеү осоро, шуныһы бик уңайлы. Ниһайәт, беҙ атайым менән туйғансы шахмат уйнайбыҙ. Мин бер нисә йыл балалар шахмат клубында шөғөлләндем, атайым иһә разрядлы шахматсы. Әсәйем әйтмешләй, ғаиләлә атайым менән икебеҙгә генә "шахмат ене" ҡағылған, бер башлаһаҡ, өс-дүрт сәғәт уйнап ултыра алабыҙ. Артабан да уйнар инек, тик әсәйем менән һеңлем беҙҙе ай-вайыбыҙға ҡарамай, тышҡа, саф һауа һуларға алып сығып китәләр.

Беҙҙең мәктәптең асыҡ һауала бик шәп спорт комплексы бар, бер йыл элек кенә иҫке спорт майҙанын өр-яңынан заманса проект буйынса төҙөп ҡуйҙылар. Хәҙер Сипайловоның яҡынтирә йорттарынан, үҙ ихаталарында уйын майҙансығы булһа ла, ошонда, беҙҙең комплексҡа киләләр, сөнки бында уңайлы, иркен, матур. Майҙан уртаһында ҙур ғына футбол майҙаны, ул тимер сеткалы енел ҡойма менән уратып алынған. Шунда иптәштәрем менән йәй буйына футбол уйнайбыҙ; ҡыш көндәре лә, айырыуса каникулдарҙа был майҙан гөрләп тора - ҡыш ул хоккей ҡумтаһына әйләнә. Ошонда уҡ спорт майҙанын уратып йүгереү юлдары һалынған, физкультура һәм төрлө күнегеүҙәр менән шөғөлләнеү өсөн стационар тренажерҙар, теннис өҫтәле кеүек спорт ҡоролмалары менән йыһазландырылған майҙан да бар. Әле ҡыш етеп, һыуыткас, әйтеүемсә, футбол майҙанына һыу һиптереп туңдыралар һәм беҙ унда рәхәтләнеп хоккей уйнайбыҙ. Бында балалар ғына түгел, өлкәндәр ҙә шөғөлләнә ала. Һауа һуларға сыҡҡас та беҙ тура ошонда киләбеҙ. Атайым тренажерҙа шөғөлләнә, әсәйем йүгереү һуҡмағынан атлай, һеңлем бәүелсәктә бәүелә йә әхирәттәре менән уйнай. Ҡыҫкаһы, ял итеү өсөн беҙгә ҡайҙалыр алыҫҡа барып йөрөргә лә кәрәкмәй. Шулай ҙа ҡала экрандарына ҡыҙыҡлы берәй фильм сыҡһа, кинотеатрға сәфәр ҡылабыҙ, художестволы күргәҙмәләргә лә барып сығырға тырышабыҙ, сөнки һеңлем һүрәт төшөрөү менән мауыға һәм художниктар ижады менән ҡыҙыҡһына. Йыш ҡына Ҡашҡаҙан күле янына йә булмаһа, йәшәгән йортобоҙ янындағы Ҡариҙел буйы дамбаһына йөрөргә сығабыҙ. Буш ваҡыттарҙа ял итергә, һаулыҡты нығытырға бер ниндәй түләүһеҙ үҙ ихатабыҙҙа ла бына тигән итеп шөғөлләнә алабыҙ.

## БЫЛ АЙҘА...

# ҺЫУЫҒАЙ ҒИБӘҘӘТТӘН БАШЛАНЫР

**Яңы йылдың тәүге айы - ҡыштың уртаһы ғинуар, нумерологтар әйтмешләй, яңырыу мәле генә түгел, ә беҙҙең мөмкинлектәр һәм ниәттәребеҙҙең яңы кимәлгә йүнәлеш алыуы ла. Беренсе һанлы был ай яңы проекттарҙы башлап ебәреү, карьера баҫҡысынан күтәрелеү, күптәнге уй-хыялдарҙы бойомға ашырыуға тотоноу өсөн уңайлы осор иҫәпләнә. Һәм, ғөмүмән, яңы, 2024 йыл символы булған йәшел Аждаһа тыныс һәм яй ҡуҙғалыусандарҙы ла әүҙем ғәмәлдәргә илһамландыра, кеше аңын ыңғай үҙгәрештәргә әйҙәй, сөнки йыл хужаһы ҡеүәтле, ҡанатлы, үҙһүҙле һәм маҡсатына өлгәшеүсән сифаттары менән айырылып тора.**

Парапсихолог Юлия Никольская: "Үҙгәреш елдәре ғинуарҙа уҡ үҙен һиҙҙерә башлаясаҡ. Яңы йыл башынан уҡ яҡындарығыҙ менән яҡшы мөнәсәбәттәр булдырығыҙ, йортоғоҙҙа мөхәббәт, үҙ-ара ышаныс тойғоһо хакимлыҡ итһен, шул сакта күңелегеҙҙе эске бер тыныслыҡ биләр һәм, ғөмүмән, ниндәй генә хәлдәрҙә лә үҙегеҙҙе тыныс торға тырышығыҙ, был һеҙгә Аждаһаның көтөлмәгән "ҡылыҡ-фиғелдәренә" әҙер булырға ярҙам итер", - тине. Иң мөһиме - тыныслыҡ, тип ҡабатлай экстрасенс. Әйе, был юҫыҡта күрәҙәсе һүҙен ҡеүәтләргә генә кәрәктер, сөнки һәр кемдең тормош мәғәнәһе, күңел тыныслығы ғаилә хәлдәре менән генә сикләнмәй, ә бигерәгендә лә ул йорт-илдә тыныс булыуына, уның тышҡы сәйәсәтенә, башҡа илдәрҙең дуҫтарса мөнәсәбәтенә бәйле.

Әйткәндәй, "Ҡасан тыныслыҡ буласаҡ?" тигән һорау бирҙеләр Рәсәй Президенты Владимир Путинға уның 14 декабрҙә үткән матбуғат конференцияһында. "Тыныслыҡ Махсус хәрби операцияла Рәсәй үҙенең маҡсаттарына ирешкәс буласаҡ. Маҡсаттар үҙгәрешһеҙ ҡала", - тип яуапланы ил етәксеһе. Был хәбәрсе һорауына ғына түгел, Бөтөн донъя тыныслыҡ көнөнә **(1)** ҡарата ла яуап булды, сөнки бөтөн тип әйтерлек халыҡ-ара хәлдәр һәм ил-ара мөнәсәбәттәр тап ошо Украина конфликты тирәләй әйләнә. Был датаның икенсе атамаһы - Тыныслыҡ хаҡына Бөтөн донъя ғибәҙәт ҡылыу көнө. Күп конфессиялы республикабыҙ халҡы ошо көндә генә түгел, даими рәүештә, намаҙҙағылар - намаҙҙары һайын, Хаҡ Тәғәләгә тыныслыҡ һорап ялбара, МХО-лағы уландарға именлек юрап, уларҙың иҫән-һау ҡайтыуҙарын теләп кенә тора. Ягуир әсәләре, ҡатындары, яҡындарының, шулай уҡ Ер йөҙөндә именлек урынлашыуын һәм ҡан ҡойоштө теләмәгән һәр кешенең ялбарыуғибәҙәте мөһим, әлбиттә, тик шулай ҙа бының менән генә эш бөтмәйҙер. Ижтимағи ойошмалар, абруйлы сәйәсмәндәр һәм башҡа эшмәкәрҙәр Ер йөҙөндә тыныслыҡ хаҡына үҙ һүҙҙәрен, талаптарын әйтә алмай икән, бөтөн донъяның күренекле дин әһелдәре үҙ намыҫына алһын ине был изге бурысты. Бының өсөн иһә төрлө конфессиялар ойошмаларының ижтимағи әүҙемлеге, берҙәмлеге, үҙ һүҙҙәрен урын-еренә еткерә белеүҙәре, был юлда ныҡышмаллыҡ һәм абруй ҙа кәрәк шул. Тыныслыҡ хаҡына ғи-

## ӘЙҘӘГЕҘ!

# УҠЫЙЫҠ!



(Башы 1-се биттә).

Эйе, беҙ әленән-әле: "Әйҙәгеҙ, уҡыйыҡ!" - тигән саҡырыуҙар ташлайбыҙ. Шулай ҙа мөһим бурыс атҡарабыҙ һымаҡ: тормошобоҙҙан, төрлө осрашыуҙарҙан, тарих төпкөлөнән, тәрән аҡыллы кешеләрҙән иң мөһим һүҙҙәр, фекерҙәр, факттарҙы һайлап ҡына, тиреп кенә алып, һандан-һанға уҡыусыларыбыҙға еткерәбеҙ. Беҙ ташҡа баҫҡан был һүҙҙәр ысынбарлыҡҡа, донъяға күҙҙәрҙе асһын, аңды уятһын, рухты күтәрһен, сәмләндерен, илһамландырып, ҡуҡҡа күтәреп ебәрһен халҡыбыҙҙы, тибеҙ. Тик... кәрәкле мәғлүмәттәргә ҡолаҡтар ҙа, күңел дә ябыҡ шул әле күптәрҙә. Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланып, уның һөҙөмтәләрен ҡулға алған һайын аптырауҙан ултыра төшәлә лә, күңелдә милләттәштәрҙең битарафлығы өсөн әсенеү тойғоһо биләп ала. Ҡайны берәүҙәр, күрәһең, китап-гәзит уҡымағандарҙың ете юл сатында ярҙамһыҙ ҡалған әҙәм менән бер икәнен белмәйҙер ҙә...

Ә шулай ҙа гәзитебеҙҙе ҡалдырмай уҡып барыусыларға үҙебеҙҙең ихтирамыбыҙҙы еткерәбеҙ. Гәзит уҡыған кеше - яҡшы кеше, тигән инаныу ҡанға һеңгән бит. Ошо ҡағиҙә беҙҙе алдатмаһын ине. Гәзит уҡып, китап уҡып, ундағы бар яҡшылыҡтарҙы һеңдереп, матбуғат баҫмаһынан айырыла алмай, уның һүҙенә һыуһап йәшәлһен ине.

Беҙ уҡыусыларыбыҙға үҙебеҙҙең һөйөүебеҙҙе, үҙебеҙҙең ғәмде еткерәбеҙ. "Киске Өфө" бер нәмәгә лә битараф түгел! Һеҙҙең көнитмешегеҙгә лә, йорт-ерегеҙҙәге унайлыҡтарға ла, балаларығыҙҙың кем булып үҫеүенә, ниндәй телдә һөйләшеүенә лә, үҙ-ара мөнәсәбәттәрегеҙгә лә - бер генә тема ла уның иғтибарынан ситтә ҡалмай. Һеҙҙең дә битараф булмауығыҙҙы, беҙҙең һөйләшеүҙәрҙә иң әүҙем ҡатнашыусы булыуығыҙҙы теләйбеҙ.

Уҡыусыларыбыҙға үҙебеҙҙең сәмде еткерәбеҙ. Милли телдәге матбуғат баҫмаһының һаны - милләттең иҫәбе тураһында ғына түгел, ә уның рухы, аң кимәле тураһында ла аңғарта. Уәт, шулай, йәмәғәт! Аңлы булайыҡ, сәмле, ғәмле, мөхәббәтле булайыҡ! Ә беҙ һеҙгә бөтөн ошо матурҙарҙан-матур ҡиммәттәрҙе үҙләштерергә ярҙам итергә тигән ниәтебеҙҙә ҡалабыҙ. Бергә булайыҡ!

**Әйткәндәй, беҙ уҡыусыларыбыҙға ғына түгел, даими авторҙарыбыҙға ла рәхмәтлебеҙ. Бигерәк тә гәзиттең үҙ кешеһенә әйләнгән, уҡыусыларҙың иң яратҡан ҡәләм оҫтаһы тигән баһаһына лайыҡ Ғәлиә Кәлимуллина, Хәлил Һөйөндөков, Әғләм Шәрипов кеүек әүҙем ҡәләмдәштәргә рәхмәтлебеҙ. Әйҙәгеҙ, ошондай авторҙар сафын тағы ишәйтәйек: "Киске Өфө" фекерле авторҙарға һәр саҡ асыҡ, рәхим итегеҙ. Яңы йыл менән ҡотлап, уҡыусыларыбыҙға иңиң изге теләктәребеҙҙе оҙатып ҡалабыҙ.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА,**

**"Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Дәүләт Йыйылышына йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһендә килә һе йылды Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр тураһында хәстәрлек йылы тип билдәләргә тәҡдим итте. Республиканың Хеҙмәт министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, әлеге ваҡытта Башҡортостанда 250 мендән ашыу инвалид йәшәй, уларҙың 93 меңгә яҡыны - хеҙмәт йәшендә.

✓Өфөлә Владимир Путинға ярҙам итеү йәһәтенән төбәк һайлау штабы асылды. Штабҡа ғалимдар, депутаттар, әүҙем кешеләр һәм төрлө ойошмалар ингән. Маҡсаты - Владимир Путиндың кандидатураһына ҡултамғалар йыйыуҙа ярҙам итеү. Билдәләнеүенсә, Владимир Путин - илебеҙҙәге берҙән-бер көслө лидер, халыҡты үҙенең артынан әйҙәүсе ҡыйыу шәхес. Рәсәйҙәр уға ышана.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ирекмәндәр батальондары һәм Махсус хәрби операция биләмәһендә хеҙмәт иткән ягуирҙарға дәүләт наградалары тапшырҙы. Рәсәй Геройы, полковник Денис Чернявин, РФ Оборона министрлығының Үҙәк хәрби округы 12-се айырым гвардия инженер бригадаһы командиры урынбаҫары Фәрит Абдразаҡов - генерал Шайморатов ордены, "Башҡортостан" полкының Ғөбәйҙуллин исемендәге мотоуҡсылар батальоны командиры Фәрит Миңранов Шайморатов генерал миҙалы менән бүләкләнде.

✓Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы ағзалары сираттағы ултырышта Илона Макаренконың комиссия рәйесе вәкәләттәрен ваҡытынан алда һалыу тураһында үтенесен ҡәнәғәтләндерҙе, тип хәбәр итәлә республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы сайтында. Республика һайлау системаһының утыҙ йыллыҡ тарихында Илона Макаренко төбәк Үҙәк һайлау комиссияһын етәкләгән тәүге ҡатын-ҡыҙ булды.

✓Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин социаль селтәрҙә яҡынлашып килгән ҡышҡы каникул хаҡында иҫкә төшөрҙө. "Уҡыу йылының икенсе сирекке бөтөп килә. Уҡыусыларҙың ҡышҡы каникулы 30 декабрҙә башлана һәм 2024 йылдың 8 ғинуарына тиклем дауам итә", -тине ул.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың Туймазы районына эш сәфәре "Велес" мебель фабрикаһынан башланды. Был - арзан һәм сифатлы корпуслы мебель үҫтереүгә йүнәлтелгән заманса компания. Заводтың продукцияһы Рәсәйҙең 13 төбәгенә оҙатыла.

*✓ Ял итә белмәгәнмен, ғаилә менән бергә бер ҡайҙа ла бармағанмын, балаларым шатлығын күрмәгәнмен, бергә шатланмағанмын. Аҡса, карьера тураһында ғына уйланғанмын.*



бәҙәт көнөнөң маҡсаты - халыҡ-ара именлек өсөн йәмғиәтте берләштереү, һуғыштарҙы туҡтатыу, унда бер ғәйепһеҙ сабыйҙарҙың, тыныс халыҡтың күпләп ҡырылыуына юл ҡуймау талабы. Тик бөгөнгө агрессив хәрби блоктар һәм уларҙың башлыҡтары бындай көн барлығын ишеткәне лә юҡтыр, моғайын...

Был айҙағы яңы йыл каникулдарын **(1-8)** мөмкин тиклем файҙалы итеп үткәреү хаҡында йыл да һүҙ булмайынса ҡалмай, сөнки күптәр өсөн ул диванда ятып телевизор ҡарау йәки телефонға текләп ултырып үтеп китергә мөмкин. Матбуғат конференцияһында Владимир Путин был мәсьәләне лә ҡуҙғатты: "...күберәк яҡындарыңа, ғаиләнә иғтибар итергә кәрәк. Берәй уртаҡ эш табып, бергәләп шөғөлләнеү, күргәҙмәләргә, театрға йөрөү, мотлаҡ спорт менән шөғөлләнеү, әүҙем тормош менән йәшәү мөһим",- тине ул. Ошо уңайҙан Балалар киноһы көнө **(8)** каникулдағы балалар ялына бик урынлы тап килә, ләкин бөгөн кинотеатрҙар йәш тамашасыға ниндәй фильмдар тәҡдим итә һәм, ғөмүмән, һәр кемдең ҡулында гаджет булғанда, өҫтәүенә, йөгошло сирҙәр осоронда кинотеатрға йөрөймө халыҡ? Ә ҡала экрандарында нигеҙҙә сит ил картиналары, уларҙың да күпселеге триллер һәм "ужастик"тар - бала күңелен үҫтерерлек бер ниндәй идея-тематик кимәл юҡ. Балалар өсөн быйыл прокатҡа сыҡҡан картиналар ҙа бар киноафишаларҙа, тик уларға онлайн форматта күрһәтелеүсе "Пацан һүҙе" сериалының кеүек шау-шыулы реклама булмағанлыҡтан, ахыры, йөрөүсе һирәк.

Унын ҡарауы, яңыртып төҙөлгәндән һуң таныуһыҙ булып үҙгәргән Өфө ҡурсаҡ театры эшләй башланы. Тимәк, баш ҡала балаларына ғына түгел, ә районларҙан килеүсе йәш тамашасыларға ла уның ишектәре асыҡ. М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры ла репертуарын уҡыусы балалар өсөн яраҡлаштырып төҙөгән. Ә инде ҡышҡы спорт төрҙәре менән шөғөлләнеү өсөн Өфөлә мөмкинлектәр бик күп: һәр мәктәп янында тиерлек хоккей майҙаны, торлаҡ йорттар ихаталарында спорт һәм уйын майҙансыҡтары, баш ҡала парктары тирәләй саңғы юлдары көтә уларҙы.

Был айҙа тағы ла ошондай иҫтәлекле көндәр билдәләнә: Яңы йыл байрамы; Бөтөн донъя тыныслыҡ көндәре **(1)**; "Вечерняя Уфа" ижтимағи-сәйәси гәзиттең сыға башлауына - 55 йыл **(1)**, Раштыуа байрамы **(7)**, Балалар киноһы **(8)**, Ҡурсаулыҡтар һәм милли парктар, Бөтөн донъя "Рәхмәт" көндәре **(11)**, Рәғәиб кисе **(12)**, Рәсәй матбуғаты **(13)**, Ҡышлаусы ҡоштар, Википедияның тыуған көндәре **(15)**, Балаларҙың уйлап табыу, Ижад һәм илһам көндәре **(17)**, Бөтөн донъя Ҡар бабай **(18)**, Бөтөн донъя ҡар, Спорттың ҡышҡы төрҙәре көндәре **(21)**, Ҡулдан яҙыу (почерк) **(23)**, Рәсәй студенттары, Татьяна көндәре **(25)**, Ленинград блокадаһын өҙөүгә - 80 йыл **(1944)**, Халыҡ-ара интернетһыҙ көн **(28 - айҙың һуңғы йәкшәмбеһендә)**, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу көнө **(30)**.

**Һыуығайҙа тыуғандар:**

**1**- күренекле хирург, медицина фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Венер Сәхәүетдиновтың тыуыуына - 85 йыл** (1939-2019).

**3** - Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, журналист, сатира оҫтаһы, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты, "Дуҫлыҡ" ордены кавалеры **Марсель Сәлимовҡа - 75 йәш** (1949).

**4** - яҙыусы, Көнсығыш белгесе, тарихсы, педагог-мәғрифәтсе, дин һәм йәмәғәт эшмәкәре **Ризаитдин Фәхретдиновтың тыуыуына - 165 йыл** (1859-1936).

**5** - Башҡортостандың һәм Татарстандың - халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, "Дуҫлыҡ" ордены (Татарстан) кавалеры **Сәүиә Сираевағa - 90 йәш** (1934).

**15** - актер, режиссер, сценарист, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Әмир Абдразаҡовтың тыуыуына - 90 йыл** (1934-2008).

**22** - ғалим-геолог, геология-минералогия фәндәре кандидаты, техник фәндәр докторы, академик, Башҡортостандың атҡаҙанған нефтсеһе **Эрнст Юлбарисовҡа - 85 йәш** (1939).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Һеҙҙә Яңы йыл каникулдарын, Президент Владимир Путин әйткәнсә, ғаилә менән бергә, уртаҡ шөғөл табып, күргәҙмәтеатрҙарға йөрөп, спорт менән шөғөлләнеп үткәрергә мөмкинлектәр бармы?

***Ләйсән ДӘҮЛӘТКИЛДИНА, Баймаҡ районы Ишбирҙе мәктәбе директоры:*** Ауылыбыҙҙа мәктәп туғыҙ йыллыҡ, беҙгә күрше Йылым, Бөрйән-Йылға, Крепостной-Йылайырҙан йөрөп уҡыйҙар, улар өсөн мәктәптең интернаты бар. Мәктәптә барлығы 70 бала уҡый. Уҡыусыларыбыҙ тырыш, әүҙемдәр, белем алырға ынтылып торалар. Ә шулай ҙа улар, бөтә балалар кеүек үк, Яңы йыл каникулдарын көтөп алалар, тик ял ваҡыттарында уларҙың урамда маҡсатһыҙ рәүештә аҙып-туҙып, тәртип боҙоп йөрөгәндәре юҡ, сөнки уларҙың яратҡан шөғөлдәре бар. Мәҫәлән, класс менән йыйылышып, тәбиғәткә сығабыҙ, сана-саңғы шыуабыҙ. Кескәйҙәр шыршы ҡуйылған боҙ ҡаласыҡта рәхәтләнеп уйнайҙар. Хәйер, уйнап ҡына ҡалмайҙар, һәр класс ошонда боҙҙан төрлө һындар эшләү буйынса конкурста ярыша, енеүселәр бүләкләнә. Үкенескә, балалар араһында саңғы спортын популярлаштыра алмайбыҙ әлегә, күбеһенсә улар физкультура дәрестәрендә генә йөрөп килә. Махсус йыһазландырылған каток юҡ.

Уның ҡарауы, йыйылышып, балаларҙы ойошҡан рәүештә Баймаҡҡа бассейнға, кинотеатрға, катокка алып барыу мөмкинлеге бар, автобусыбыҙ һәр саҡ әҙер тора. Әйтеп китеүемсә, мәктәптә шашка, волейбол, көрәш буйынса түңәрәктәр эшләй. Күп тапҡырҙар шашка буйынса район чемпионы булып танылған мәрхүм Урал Моратов призына шашка ярыштары беҙҙә айырыуса популяр. Көрәш буйынса иһә беҙҙең балалар автобус менән аҙнаһына бер тапҡыр Юлыҡ мәктәбенә йөрөп, тренер Илфат Дәүләтбаев етәкселегендә шөғөлләнә.

Яңыраҡ ҡына, декабрь баштарында, беҙҙә ҡыуаныслы ваҡиға булды: "Урал" спортһауыҡтырыу үҙәге асылды. Ике ай эсендә файҙаланылмай ултырған иҫке бинаны ремонтлап, уны яңыртып ҡороп, бына тиғән өр-яңы спорт үҙәге эшләп ултыртып ҡуйҙы ауылыбыҙҙың оҫта егеттәре. Уның эсе спорт ҡорамалдары менән йыһазландырылды: тренажерҙар ҡайтарылды, бильярд һәм теннис өҫтәлдәре ҡуйылды, бында шулай уҡ ултырып шахмат-шашка уйнарға ла була. Барлыҡ эштәр һәм сығымдар ауыл хакимиәте башлығы Динар Иҙелбаев етәкселегендә һәм уның үҙ иҫәбенә башҡарылды, афарин! Был үҙәк хәҙер ауылдаштарҙың, айырыуса балаларҙың яратҡан урынына әүерелде.

## ӘЙҘӘГЕҘ!

# СӘЛӘМӘТ ТОРМОШ БАШЛАЙЫҠ!

**Күптәр һаулығын юғалтҡас ҡына уның ҡәҙерен аңлай. Мин үҙем дә - шундайҙарҙың береһе.**

Ҡырҡ йәшкә хәтлем ауырыуҙың ни икәнлеген белмәнем. Ошо йәшкә тиклем булған сәләмәтлегем, әлбиттә, яҡшы генлы, яҡшы ғәҙәтле атай-әсәйемдең миңә биргән иң ҙур бүләге. Ҡартайғансы шулай булыр тип нык яңылышҡанмын. Дүртенсе тиҫтәм тулыу менән ҡапыл ғына һаулығыма зарлана башланым: йә бер ерем, йә икенсе ерем үҙен һиҙҙерә башланы. Баш ауыртыуҙарын, быуындар һыҙлауын дарыухананан алған препарат менән баҫам да, ал-ял белмәй эшләйем. Арыуҙы ла белмәй инем шикелле мин.

Әммә бер көн иртән аяғыма баҫа алманым. Күрер күҙгә бер ниндәй үҙгәреш һиҙелмәй, шеш тә юҡ, тик түшәктән тора алманым да ҡуйҙым. Врач саҡыртҡайным, дауаханаға һалдылар - ауыр эштән, артыҡ ауырлыҡтан умыртҡа һөйәгең зарарланған, тинеләр. Оҙаҡ дауаландым, күп уҡыным һәм шундай һығымтаға килдем: барыһына ла үҙем ғәйепле булғанмын, атай-әсәйем бүләген - һаулығымды һаҡламағанмын.

Иң беренсе, дөрөҫ туҡланмағанмын. Иртән бутҡа ашайһы урынға магазиндағы төрлө банкаларҙағы ҡушылмалар, майонездар менән бутерброд, тиҙ әҙерләнә торған ризыҡтар ашағанмын. Төшкө, киске ризыҡтар ҙа күбеһе ярымфабрикаттан, консерванан торған.

Икенсенән, физкультура менән дуҫ булмағанмын. Араҡы эсмәһәм дә, тәмәке тартҡанмын. Һыу эсмәгәнмен, емешеләк ашамағанмын.

Өсөнсөнән, һәр ваҡыт башымды баҫып, эш тураһында ғына уйлағанмын. Асыуланғанмын, рәнйегәнмен, рәнйеткәнмен. Күңелһеҙ уйҙар менән тулғанмын, көнләшкәнмен, ярләшкәнмен.

Эсмәһәм дә, һулға йөрөмәһәм дә, емергес көскә эйә булған зарарлы ғәҙәттәргә эйә булғанмын. Ниндәй ҙә булһа проблема борсоһа, улар тураһында уртаға һалып һөйләшмәгәнмен, асыҡларға һәм шул уҡ ваҡытта тыныслыҡ һаҡларға тырышмағанмын.

Ял итә белмәгәнмен, ғаилә менән бергә бер ҡайҙа ла бармағанмын, балаларым шатлығын күрмәгәнмен, бергә шатланмағанмын. Уларға ҡушылып көлмәгәнмен, һөйөнмәгәнмен, киреһенсә, улар көлһә, асыуым килгән. Аҡса, карьера тураһында ғына уйланғанмын.

Билһеҙ ҡалып, дауаханаға эләкмәһәм, былар хаҡында белмәгән дә булыр инем. Шуға күрә сиремдә рәхмәт менән ҡабул иттем һәм уны еңдем. Хәҙер һаҡланып йөрөйөм, йәғни физик культура менән шөғөлләнәм, таҙа һыу эсәм, тәмәкене ташланым, йәшелсә, емеш-еләк, иртән бутҡа ашайым, бер кемгә лә асыуланмаҫҡа тырышам, үсекмәйем, ғаиләм менән ял итәм, улар менән бергә көләм, шатланам. Ә шулай ҙа иң мөһиме - көнләшмәйем, иммунитетты ҡаҡшатыусы күңелһеҙ уйҙарға бирелмәйем. Әйҙәгеҙ, бына ошондай сәләмәт тормош менән йәшәйек!

**Борис КӘЛИМОВ.**

**Күмертау ҡалаһы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2023 йылда Башҡортостандың 100-ҙән 500-гә тиклем халҡы булған 237 ауылы юғары тиҙлектәге интернет менән ҡуллана башланы. Барлығы 60 меңдән ашыу кеше хәҙер сифатлы бәйләнеш менән тәьмин ителгән. Уларҙың рәтендә туристар араһында билдәлелек яулаған Белорет районының Отнурок ауылы ла бар. 2024 йылда тағы ла 50 ауылға интернет үтәсәк. Федераль программа иһә 2030 йылға тиклем эшләйәсәк.

✓Синоптиктар яңы йыл төнөнә һәм ғинуар байрамдарына һауа торошо тураһындағы күҙаллауҙарын тәҡдим итте. Республикала әле өҫтөнлөк иткән йылы циклон һөҙөмтәһендә аномаль һыуыҡтарға алмашҡа йылы килде һәм ошондай һауа торошо байрамға тиклем шулай булаҫаҡ. Яңы йыл төнөндә һауа температураһы минус 15-тән түбән төшмәйәсәк, тип фаразлана. Ғинуарҙың тәүге тәүлектәрендә лә йылы буласаҡ.

✓Башҡортостанда уҙып барған йылдың 11 айы йомғаҡтарында ипотека буйынса килешеүҙәр һаны 46 процентҡа артҡан, тип хәбәр итә Росреестрҙың Башҡортостан идаралығы. Ведомствола 126 меңдән ашыу яҙма теркәлгән. 2022 йылда иһә был күрһәткес 86 меңдән ашыу тәшкил иткән. Билдәләнеүенсә, 90 проценттан ашыу осраҡта ипотека һанлы форматта теркәлә, был Рәсәй буйынса уртаса күрһәткестән 85,4 процентҡа күберәк.

✓Инвалид бала тәрбиәләгән ата-әсәләргә эшкә сыҡҡанда түләүҙәр һаҡлана. 2024 йылдың 1 ғинуарынан 10 000 һум күләмендә компенсация алыуҙың яңы ҡағыҙәләре ғәмәлгә индерелә. Ул инвалид бала йәки бала саҡтан беренсе төркөм инвалидын тәрбиәләгәндәр өсөн ҡаралған. Элек бындай түләү эшләмәгән ата-әсәләргә генә тәғәйенләнә ине. 2024 йылдан иһә өләшләтә мәшғүлдәргә лә түләнә. Документтар Дәүләт хеҙмәттәрендә онлайн йәки Соцфондта, Күп функциялы үҙәктә ҡабул ителә.

✓Субсидиялар һәм социаль ярҙам - аҡсалата алырға мөмкин булған дәүләт ярҙамы. Мәҫәлән, торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәргә түләү өсөн. 2023 йылдың 9 айында Башҡортостанда 70 мең ғаиләгә торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәргә түләү өсөн 1,2 миллиард һумлыҡ субсидия бирелгән. Бер ғаиләгә айына уртаса 1870 һум тура килә. Республикала 591,5 мең кеше социаль ярҙам менән файҙаланған. Шуларҙың 252,9 меңе - Рәсәй Федерацияһы һәм 338,6 меңе - Башҡортостан йөкләмәләре буйынса.

ҠЫҪҠАСА

# АУЫЛҒА ЯРҘАМ...

**Башҡортостан Башлығы Дәүләт Йыйылышына Мөрәжәғәтнамәһендә республикабыҙ аграрийҙарына ярҙам күрһәтеү өсөн берҙәм ауыл хужалығы һалымы буйынса нуль ставкаһын өс йылға оҙайтырға тәҡдим итте.** "Былтыр 500-ҙән ашыу ауыл хужалығы предприятиеһы һәм фермер хужалығы ошо льгота менән файҙаланды. Аграрийҙар 165 миллион һумдан ашыу аҡсаһын экономияланы, уны яғыулыҡ-майлау материалдары һәм техника һатып алыу өсөн тотондо. Икенсеһе - киләһе йылдан ауыл хужалығы кооперативтары өсөн килем килтереүсе проекттарҙы бойомға ашырыу программаһын тергеҙәбеҙ, шул иҫәптән милли колоритлы фермер продукцияһы брендтарын танытыу өсөн. Өсөнсөһө - "Башҡортостан" ҡошсолоҡ фабрикаһында бөтә ҡош-ҡортто юҡ итеүгә килтергән хәлдә иҫәпкә алып, 2030 йылға тиклем ҡошсолоҡто үҫтереү республика программаһын әҙерләргә кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

✓**Сәғит Агиш урамында яңы ҡар иретеү пункты эшләй.** Өфөнөң тиҙ үҫеүе һәм ҡар полигондарының йыраҡта урынлашыуы һөҙөмтәһендә ҡар базалары барлыҡ ҡарҙы ҡабул итеп өлгөрмәй ине. Шуға баш ҡаланың үҙендә ҡар иретеү ҡоролмаһы төҙөү мәсьәләһе ҡалҡып сыҡты ла инде. Был пункт ҡарҙы сығарыу эшен тиҙләтеү мөмкинлеге бирәсәк. Был территорияны һайлағанда унда инженер селтәрҙәренең, шул иҫәптән канализацияны насос станцияһы булыуы, транспорт туҡтау өсөн уңайлы икәне иҫәпкә алынған. Унда, тәү сиратта, Ленин, Совет, Киров райондарынан сығарылған ҡар иретеләсәк. Пункт тәүлегенә 1200 кубометр ҡар иретеү мөмкинлегенә эйә. Канализация торбалары йылыһын ҡулланып эшләүсе камераларҙа ирегән ҡар артабан ҡаланың канализация коллекторына ағыҙыла.

✓**Башҡортостандың Социаль фондында 1 ғинуарҙан кемдәрҙең пенсияны артыуы хаҡында һөйләнеләр.** Ведомствола белдереүҙәренсә, яңы йыл индексацияһы эшләмәгән граждандарҙың страховка пенсияларына ҡағыла. Түләүҙәр 7,5 процентҡа арта. Шулай уҡ билдәләнгән түләү арта, 1 ғинуарҙан ул 8134 һум була. Страховка пенсияһының дөйөм суммаһына инган шәхси пенсия коэффициенты хаҡы ла 133,05 һумға тиклем күтәрелә. Граждандарға уңайлы булһын өсөн индексация автоматик рәүештә башҡарыла, Соцфондҡа мөрәжәғәт итеү кәрәкмәй. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, страховка пенсияһы ҡартлыҡ, инвалидлыҡ буйынса йәки ҡараусыһын юғалтҡан осраҡта тәғәйенләнә.

✓**"Фатирҙар донъяһы" аналитиктары мәғлүмәттәре буйынса, Өфөлә ғинуар - ноябрь айҙары йомғаҡтары буйынса беренсел һәм икенсел базарҙағы фатир хаҡы араһында айырма 15,7 процент тәшкил иткән.** Башҡортостандың баш ҡалаһында яңы фатирҙың уртаса хаҡы - 6,86 миллион, икенсел торлаҡ иһә 5,93 миллион һум тора. Торлаҡтың квадрат метрына килгәндә, айырма тағы ла күберәк - 24 процент (яңыларында 139,5 мең һум булһа, икенсел торлаҡта 112,5 мең һум). Фатирҙың уртаса хаҡы буйынса Өфө Новосибирскиға (5,81 млн һум) һәм Һамарға (6,18 млн һум) яҡынлаҡ. Яңы фатирҙың хаҡы буйынса - Төмәнгә һәм Омскиға (6,81 млн һум) һәм Белгородҡа (6,83 млн һум). Өфөнөң беренсел "квадрат"тың уртаса хаҡын - Екатеринбург (139,3 мең һум), ә икенсел торлаҡтың Красноярск (112,2 мең һум) менән сағыштырырға мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЮБИЛЕЙҘЫ ҠАРШЫЛАП...

**Республиканың баш ҡалаһында барыһы ла өлгөлө булырға тейеш - Башҡортостан Башлығы Дәүләт Йыйылышына Мөрәжәғәтнамәһендә шулай тип билдәләне.**

"Киләһе йылда баш ҡаланың 450 йыллығы билдәләнә. Яратҡан Өфөбеҙҙә төҙекләндереүгә айырым иғтибар бүлербеҙ. Әйткәнемсә, ҙур спорт объекттары, яңыртылған поликлиникалар, "Көнсығыш сығыу юлы", "Салют" балалар һәм үсмерҙәр өсөн реабилитация үҙәге, Балалар онкологияһы һәм гематологияһы үҙәге, яңыртылған Ҡурсаҡ театры ҡалабыҙға шәп бүләк булыр тип уйлайбыҙ. Өфөнөң юбилейы сиктәрендә Рәсәй һәм сит ил ҡунаҡтары ҡатнашлығында бик күп фестивалдәр, форумдар, концерттар, конкурстар һәм күргәҙмәләр ойоштороласаҡ. Республиканың баш ҡалаһында юлдар, ихаталар, социаль объекттар, иҫтәлекле урындар, парктар һәм башҡалар өлгөлө булырға тейеш, тип күп тапҡыр әйткәнем булды. Был бит Башҡортостандың йөҙө", - тине Радий Хәбиров.

2024 йыл республикабыҙҙа спорт һөйөүселәр өсөн дә әһәмиәтле булыр, тине төбәк етәксеһе. Киләһе йылда Өфөнөң 450 йыллығы уңайынан көрәш, фехтование, ишкәкле слалом үҙәктәре асыла. Өфөлә илдең "Рәсәй - спорт державаһы" төп спорт форумы үткәрелә. "Беҙ президент Владимир Путинға ошондай ҡарары өсөн рәхмәтлебеҙ. Был - оло мәртәбә һәм спортсыларыбыҙҙың ҡаҙаныштарын таныу", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# ТҮЛӘРҘӘРМЕ?

**Башҡортостандың Арбитраж судына "Графское" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте тарафынан тирә-яҡ мөхиткә килтерелгән зыянды ҡаплау тураһында дәғүә ебәрелде.**

Ул 823 852 185 һум түләргә тейеш, тип хәбәр итәлә Тәбиғәттән файҙаланыу өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Көньяҡ Урал төбәк-ара идаралығының телеграм-каналында. 2023 йылдың йәйендә компанияға зыянды үҙ ирке менән ҡапларға тәҡдим ителә, әммә ул быны эшләүҙән баш тарта. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, алтын сығарыу компанияһы эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә 32 мең квадрат метрҙан ашыу уңдырышлы тупраҡ ҡатламы тулыһынса юҡ ителгән. Тәбиғәтте һаҡлау ҡануниәтен боҙоуҙар енәйәт эше ҡуҙғатыуға һәм "Графское" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең лицензияһын туҡтатыуға сәбәп була. Бынан алда "Башинформ" республикала ер аҫтын вәхшиҙәрсә эшкәртеүҙе булдырмау буйынса системалы эш алып барылыуы хаҡында һөйләнә. Уны 2021 йылда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән ойошторолған ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса республика ведомство-ара комиссияһы көйләй. Был ваҡыт эсендә комиссия 355 ғәмәлдәге һәм 96 ташландыҡ файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу урынын асыҡлай, хоҡуҡ боҙоусы компанияларҙы лицензияһынан мәхрүм итә. Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу өлкәһендә тәртип урынлаштырыу киң таралған файҙалы ҡаҙылмалар сығарыуға һалым йыйыуҙы арттырырға мөмкинлек бирә. 2022 йыл йомғаҡтары буйынса был күрһәткес 47 процентҡа артҡан, ә бюджеттың өҫтәмә килеме 250 миллион һумдан ашыу тәшкил иткән. 2023 йылдың ноябрендә Учалы районында "Альтинвест" һәм "Гасадд" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттәренә законды тупаҫ боҙғаны өсөн енәйәт эше ҡуҙғатылды.

# ҠОШ ИТЕНӘ...

**Билдәле булыуынса, быйыл 9 августа "Башҡортостан" ҡошсолоҡ фабрикаһында "ҡош киҙеүе"нә хас билдәләр менән ҡоштарҙың үлеүе теркәлгәйне һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө районында карантин индереү тураһында указға ҡул ҡуйғайны.**

Ул документта Авдон ауылындағы "Башҡортостан" ҡошсолоҡ фабрикаһы ҡоштарҙың юғары патогенлы киҙеүенең эпизоотик үҙәге тип танылыуы һыҙыҡ өҫтөнә алынды. 5 км радиусҡағы бөтә тораҡ пункттар: Авдон, Жуково, Сергеевка һәм Уптино ауылдары, "Гарнизон", "Дубрава", "Отдых", "Солнечный-3", “Рябинушка” һәм "Эталон" коммерция булмаған баҡсасылыҡ ширҡәттәре рәсми рәүештә хәүефле зоналар тип танылды. 10 км радиусҡағы тораҡ пункттар, шул иҫәптән Өфөнөң Дим районы күҙәтеү зонаһына инде. Күптән түгел Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө районы биләмәһенән ҡоштарҙың юғары патогенлы киҙеүе буйынса карантинды ябыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. "2023 йылдың 4 декабренән Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы муниципаль районы, Авдон ауылы адресы буйынса урынлашҡан "Башҡортостан" ҡошсолоҡ фабрикаһы" акционерҙар йәмғиәте биләмәһенән сикләү сараларын (карантин) ғәмәлдән сығарырға", - тиелә төбәк етәксеһе указында.

Әйткәндәй, ошо уҡ темаға: Россельхознадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығында Словакиянан һәм Канаданан Рәсәй территорияһына тере ҡош, йомортҡа, ҡош ите һәм ҡош ите аҙыҡтарын индереү тыйылыуы тураһында хәбәр иттеләр. "Башинформ" агентлығы асыҡлауынса, сикләүҙәр Словакияның Трнава крайында һәм Канаданың Квебек провинцияһында ҡоштарҙың юғары патоген грипп вирусы менән инфекция буйынса эпизоотик хәлдең насарайыуы менән бәйле. Бынан тыш, был тыйыуҙар ҡош, мал аҙығы өҫтәмәләренә, шулай уҡ ҡоштарҙы аҫрау, һуйыу һәм бүлеү өсөн ҡулланылған ҡорамалдарға ҡағыла. Рәсәй Федерацияһы биләмәһендә был илдәрҙән тере ҡоштар ҡайтарыу ҙа тыйыла.

# ТӨРКИӘ МЕНӘН...

**Төркиә эшҡыуарҙары Өфөгә сәфәре барышында Башҡортостанда ҡайын шпоны етештереүҙе ойоштороу башланғысы менән сығыш яһаны, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте.**

Ҡунаҡтарға экспортҡа йүнәлтелгән предприятиеларға ярҙам саралары, шул иҫәптән сит илгә тауар ташыу буйынса сығымдарҙың бер өлөшөн ҡаплау өсөн субсидиялар, сит илдәрҙә бизнес-миссияларҙа һәм күргәҙмәләрҙә ҡатнашыуға булышлыҡ итеү, халыҡ-ара электрон сауҙа майҙансыҡтарында тауарҙарҙы таныту тураһында һөйләнеләр. Төркиә эшҡыуарҙары республиканың инвестиция ҡеүәте һәм "Алға" махсус иҡтисади зонаһы мөмкинлектәре менән таныштырҙылар. Төркиә бизнесының Башҡортостан менән хеҙмәттәшлекка ҡыҙыҡһыныуы арта. Әйткәндәй, 2023 йылдың ғинуар-октябрендә Башҡортостандың Төркиә менән үҙ-ара тауар әйләнеше 2022 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 107,9 процентҡа артҡан. Экспорттың - 115,6 процент, ә импорттың 56 процент үҫеше билдәләнә. Шул уҡ ваҡытта дөйөм тауар әйләнеше күләменең яҡынса 90 процентын Башҡортостандан килтерелгән тауарҙар тәшкил итә. Төркиә республика контрагенттары араһында (төбәктең дөйөм тауар әйләнеше күләменән 13% өлөш менән) икенсе урынды биләй.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң "Дим" мәҙәниәт һәм ял паркындағы вагон-музей Ҡыш бабай “йортона” әүерелде. Ҡыш бабай резиденцияһы киске сәғәт 5-тән 7-гә ҡәҙәр эшләй. 30 декабрҙә - иртәнге 12-нән көндөҙгө 2-гә тиклем.

✓22 декабрҙә Өфөлә күптән көтөлгән ваҡиға булды. Зинин юл үткәргесендә хәрәкәт асылды. Һәр яҡҡа икешәр һыҙат тура килә. Хәтерегеҙгә төшөрәйек, уҙған ял көндәрендә күп тонналы йөк машиналары ярҙамында юл үткәргес һынау үтте. Объект тимер юл аша сыға торған урындан 200 метр алыҫлыҡта урынлашҡан. Уның оҙонлоғо - 106 метр. Төп юлдыҡы 1850 метр. Хәҙер Зинин, Нуғай, Аҡбирҙе, Ҡарамалы, Шипов, Блохин, Охлебинин ауылдары халҡына юл йөрөүе еңелләшә, сөнки тимер юл аша сыға торған ерҙә тығындар йыш була ине.

✓Өфө ҡалаһы поликлиникалары яңы йыл каникулдарында иртәнге 8-ҙән киске 5-кә тиклем эшләйәсәк. Травмпункттар шулай уҡ гәҙәти режимда халыҡты ҡабул итә, өлкәндәр 5-се (Цюрупа ур., 84), 8-се (Горький ур., 47), 21-се (Урман юлы ур., 3), Дим районы дауаханаларына (Хәкимкәт ур., 19), ә балалар РБКД-ға (Кувыкин ур., 98) һәм 17-се дауаханаға (Азатлыҡ ур., 29) тәүлек әйләнәһенә мөрәжәғәт итә ала. Күҙ ауырыуҙары институты травмпункты ла гәҙәттәгеса эшләй.

✓Ленин исемендәге майҙанда асылған Ҡыш бабай резиденцияһы 30 декабргә тиклем көндөҙгө 4-тән киске 8-гә тиклем, Яңы йыл төнөндә төнгө 12-нән 2-гә тиклем балаларҙы ҡабул итә. Ҡышҡы каникулдарҙа Өфө Ҡыш бабайы үҙенең йортон көндөҙгө 12-нән асасаҡ. 9 ғинуарҙан иһә резиденция элекке графикка күсә. Уны ябыу тантанаһы 14 ғинуарҙа сәғәт 2-лә була.

✓Өфөнөң көньяҡ өлөшөндә киләһе йылдарҙа трамвай селтәре яңыртыласаҡ. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров билдәләүенсә, бында яҡынса 40 километрға яҡын юл төҙәләсәк һәм ремонтланасаҡ. Шулай уҡ 60 яңы трамвай һатып алыу ҙа күҙаллана. "Беҙ транспорт реформаһын дауам итәсәкбеҙ. 5 йыл эсендә 1388 автобус һатып алынды, 2024 йылда тағы ла 230 яңы автобус көтәбеҙ", - тине ул Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарына Мөрәжәғәтнамәһендә.

**✓ Йәшәү режимын боҙған сит ил граждандарын асыҡлауға йүнәлтелгән иҫкәртеү саралары халыҡ күп йыйылған урындарҙа үтте. 40-тан ашыу сит ил гражданы тикшерелде, 14-енә ҡарата материалдар төҙөлдө.**



ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# ӨЙӨҢДӘГЕН...

## күршеңдән һора

**Былтыр билдәле сәбәптәр менән Рәсәй Президенты Владимир Путиндың йыл да үткәрелә торған ҙур матбуғат конференцияһы булмағайны. 2022 йылдың 22 декабре кис Госсовет ултырышынан һуң шулай ҙа Президент журналистар янына сығып, бер сәғәттәй уларҙың һорауҙарына яуаптар биргәйне. Быйыл иһә Владимир Путин йолаға тоғро ҡалды һәм тура бәйләнеш үҙенең элеккесә тулы йөкмәткеле форматында үтте. Был, әлбиттә, махсус операция барышында ла, илдәге социаль-иҡтисади хәлдәрҙең дә ыңғай йүнәлеш алыуы менән бәйле, тип ҡарарға кәрәктер.**

Рәсәй лидерының матбуғат конференциялары һәр ваҡытта ла сит ил журналистары һәм эксперттарының иғтибар үҙәгендә тора, ә бына быйылғы тура бәйләнешкә улар айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу менән килде һәм материалдарында тура бәйләнештең "оптимистик рухта үтеүе, Украина конфликтында еңеүгә ышаныс өҫтөнлөк итеүе" хаҡында хәбәр иттеләр һәм донъя лидерҙарының береһенең дә В.Путин кеүек үҙ иле граждандары һәм матбуғат менән ошондай даими, сәғәттәр буйына, асыҡтан-асыҡ һөйләшеү үткәрмәүенә үкенес белдерҙеләр. Көнбайыш иһә үҙ сиратында Рәсәй етәксеһе сығышын анализлап, Украина өсөн хәүефле күҙаллауҙар айҡанлы хафаға ҡалды. Американың **The Washington Post** гәзите хәбәр итеүенсә, Рәсәй Президенты махсус операция маҡсаттарына өлгәшеүгә ныҡлы ипән тота. **The New York Times** күҙәтеүсеһе Путиндың бөгөнгө көндә өҫтөнлөклө позицияла булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. "Украина президенты Вашингтондан буш ҡул менән әйләнеп ҡайтты... Путин Көнбайыш яғынан да Украинаға ярҙамдың көндән-көн кәмей барыуы хаҡында әйтте. Ысынлап та, Украина өсөн был "халява"ның тиҙҙән юҡҡа сығыуы бар", - тип яҙҙы был баҫма. Британия ла ҡайғыға ҡалды: "Путиндың планы" арҡаһында Киевтың проблемалары арта ғына бара", тип борсолалар унда. **Daily Express** баҫмаһы Британия авиацияһы маршалы Шон Беллдың һүҙҙәрен килтерә: "Көнбайыштың Украина конфликтынан ялҡып китеүен, шул уҡ ваҡытта АҠШ-та Киевҡа ҡорал ебәреүҙең конгресс арҡаһында тотҡарланыуын Путин командаһы унышлы файҙаланды", - ти маршал. Уның күҙаллауынса, АҠШ-тағы президент һайлауҙары ла Украинала хәлдәрҙең артабан мөшкөлләнеүенә килтерәсәк. "Әгәр Вашингтонда хакимиәт алмашһына, ул саҡта ни булыр?" - тип хәүефләнә Шон Белл.

Өҫтәүенә, Украина армияһы һалдаттары һуғышырға теләмәй, фронтҡа уларҙы ирекһеҙләп, автомат тоҫҡауы аҫтында ебәрәләр. Херсон өлкәһе губернаторы Владимир Сальдо әйтмешләй, Украина властары мобилизация түгел, ә "могилизация" үткәрә. Ысынлап та, ошо фронтҡа эләккән граждандар һуғышырға теләмәй ҙә, һуғыша белмәй ҙә, бында уларҙы йүнләп өйрәтмәйҙәр ҙә. Ир-егеттәрҙе спорт залдарында, дискотекаларҙа тотоп алалар, хәҙер хатта студенттарҙы ла йыя башлағандар. Эш шуға тиклем барып еткән: меҫкен рухаэнҙарҙы повестка таратырға мәжбүр итәләр. Иң мөшкөлө тағы ла шул: Украина армияһы Рәсәйҙең планлаштырыу һәм төҙәтеү модуле менән йыһазландырылған авиабомбаларына ҡаршы нисек көрәшергә лә белмәй. Украина телеканалына биргән интервьюһында Верховный раданың хәүефһеҙлек, оборона һәм разведка буйынса комитеты секретары полковник Роман Костенко әйтеүенсә, "Рәсәйҙең планлаштырыусы бомбаларына ҡаршы беҙҙең сара юҡ. Был бомбалар 500 килограмдан алып, өс тоннаға тиклем тарта, беҙ уларҙы юҡ итә алмайбыҙ..."

Сит ил күҙәтеүселәре билдәләүенсә, Рәсәй иҡтисады аяуһыҙ санкциялар ҡыҫымына бирешмәне. "Ул аяғында баҫып тороу ғына түгел, Украина конфликтына тиклемге кимәлдән дә юғарыраҡ күтәрелеүгә өлгәште", - тип таныырға мәжбүр улар. Өҫтәүенә, Көнбайыш тарафынан сикләүҙәргә ҡарамаҫтан, Владимир Путин халыҡ-ара аренаға ҡайтты, тип яҙа Франция журналистары. Германияның **Spiegel** баҫмаһы иһә тышҡы сәйәсәт мәсьәләләрендә, айырыуса Вашингтон менән мөнәсәбәттәрҙә Путиндың ҡәтғилегенә иғтибар итә. Был йыһәттән Владимир Путин Америка һәм Евроберләшмә илдәренә мөнәсәбәтен ошо тура бәйләнеш аша ла асыҡ һәм ҡәтғи рәүештә белдерҙе. Франция президенты Макрон менән мөнәсәбәттәр хаҡында Путиндың: "Рәсәйҙе һеҙ ҡыҙыҡһындырмайһығыҙ, әгәр һеҙҙе Рәсәй ҡыҙыҡһындырмай икән", - тигән яуабы шуға күрә лә француз хәбәрсеһенә генә тоҫҡалған яуап түгел ине. Көнбайышҡа ҡарата был ишара Рәсәйҙең үҙаллы көс үҙәге булып тороуын, әммә ике яҡлы мөнәсәбәттәр күҙәтелгән хәлдә, Рәсәйҙең сит илдәр менән аралашыу һәм аңлашыуға саҡ әҙер булыуын аңлатты.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ИҪКӘРТЕҮ КӘРӘК!

**Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө буйынса идаралығы хеҙмәткәрҙәре мигранттарҙың РФ ҡануниәтен үтәүен тикшереү буйынса иҫкәртеү рейдтары үткәрҙе.**

Билдәләнеүенсә, йыл башынан алып полиция материалдары буйынса 600-ҙән ашыу сит ил гражданын Рәсәй Федерацияһынан ҡыуыу тураһында ҡарар ҡабул ителгән. "Йәшәү режимын боҙған сит ил граждандарын асыҡлауға йүнәлтелгән иҫкәртеү саралары халыҡ күп йыйылған урындарҙа үтте. Миграция ҡануниәтен тикшереү барышында 40-тан ашыу сит ил гражданы тикшерелде, 14-енә ҡарата режимды боҙғаны өсөн материалдар төҙөлдө һәм судҡа ебәрелде. Бындай саралар Өфөлә дауам итәсәк", - тип хәбәр иттеләр идаралыҡтан. Сираттағы рейдтың сәбәбе мигранттар араһында Рәсәй Федерацияһы закондарын боҙоусылар һаны артыуына бәйле. Мәҫәлән, сит ил граждандары Аксаков урамындағы ашығыс ярҙам подстанцияһында һуғыш ойоштора. Ә бер нисә көн элек суд 28 һәм 30 йәшлек ике сит ил кешеһен ҡулға ала. Улар, һаҡсы "Ирәмәл" сауҙа-күңел асыу комплексында урынлашҡан Meet Point төнгө клубына индермәгәс, бензин алып килеп, учреждениеға инә торған урынына ут тоҡандыра. 25 сентябрҙә Баҡса урамындағы сауҙа базаһында травматик пистолеттар һәм балта ҡулланып һуғышалар. Октябрь башында сит ил кешеһе төндә БДМУ ятаҡтарының береһендә һуғыш ойоштора. Ҡыҙыу ҡунаҡты иҙәнгә йығып, саҡ тынысландыралар. Полиция хеҙмәткәрҙәре ирҙе ҡулға ала. Ул Рәсәйҙә легаль булмаған рәүештә йәшәгән 37 йәшлек сит ил кешеһе булып сыға. Өфөлә бергә йәшәгән ҡатынына үлтереү менән янаған мигрант полиция хеҙмәткәренә һуҡҡан. Ул сит ил граждандарын ваҡытлыса тотоу үҙәгенә урынлаштырыла. Закон менән билдәләнгән яуаплылыҡҡа тарттырғандан һуң, уны депортациялау мәсьәләһе хәл ителәсәк.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## МОСТАФИНА ФАТИМА ХӘМИТ ҠЫҘЫ

Ф.Х. Мостафина - башҡорт ғалимәһе, педагогы, совет осороноң партия һәм дәүләт эшмәкәре. Ул 1913 йылдың 26 декабрендә Һамар губернаһы Николаевск өйәҙенең Диңгеҙбай ауылында тыуған. 1921 йылда аслыҡ башланғас, ғаилә Урта Азияға китә. Ире вафат булғас, Ғәзизә Мостафина ҡыҙы Фатима менән улы Әнүәрҙе Ҡаҙағстандың Төркөстан ҡалаһының балалар приютына бирә. 1926 йылда, Башҡортостанға ҡайтыу менән, Ғәзизә балаларын Өфөләге В.И. Ленин исемендәге башҡорт балалар йортона урынлаштыра, улар етем башҡорт балалары өсөн II баҫҡыс өлкә мәктәбендә уҡый. Фатима Мостафина мәктәпте Стәрлетамаҡ ҡалаһында тамамлай, 1933 йылда К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының химия-биология факультетында юғары белем алып сыға. Өс йыл Белорет район-ара совет-партия мәктәбендә, рабфакта һәм педагогия техникумында уҡытыусы булып эшләй.

1936 йылдан башлап ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә комитетында эшләй, 1938 - 1942 йылдарҙа Өфө мәктәпкәсә йәштәге педагогия училищеһында уҡыта. 1942 - 1944 йылдарҙа - Өфөлә ВЛКСМ-дың Молотов район комитетының 1-се секретары, һуңынан комсомол өлкә комитетының беренсе секретары вазифаһын башҡара. 1947 йылда ул Мәскәүҙәге КПСС Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы Ижтимағи фәндәр академияһы аспирантураһына уҡырға инә һәм 1950 йылда философия фәндәре кандидаты ғилми дәрәжәһенә диссертация яҡлай. 1951 - 1955 йылдарҙа КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының фән һәм уҡыу йорттары бүлеге мөдире, 1955 - 1971 йылдарҙа Башҡорт АССР-ның мәғариф министры. Фатима Мостафина Рәсәй тарихында мәғариф министры вазифаһында 16 йылдан артыҡ эшләгән берҙәнбер министр.

РСФСР-ҙың 5-се саҡырылыш Юғары Советы Президиумы ағзаһы, Башҡорт АССР-ның 4-се, 6-сы һәм 7-се саҡырылыш Юғары Советы депутаты. РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы алдынғыһы (1957). РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы (1960), СССР-ҙың мәғариф алдынғыһы (1968). Ленин (1960) һәм ике Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1966, 1971) ордендары кавалеры. Халыҡ мәғарифын үҫтереүҙәге ҡаҙаныштары өсөн Н.К. Крупская миҙалы менән билдәләнгән. Өфө ҡалаһының 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы Ф.Х. Мостафина исемен йөрөтә.

**(Дауамы. Башы 48-се һанда).**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Йөрәк

❖Йөрәк тапҡыры ауыртһа, ҡан баҫымы юғары булһа, 1 ҡалаҡ ябай барбарис сәскәһенә 300 мл һыу ҡойоп, ҡайнатырға һәм тағы ла 10 минут утта тотоп, шунан 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр 2-шәр балғалаҡ эсергә.

50 грамм кураға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 3-4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә, көн һайын ярты стакан эсергә.

### Армыт

❖Простатит булғанда 1 стакан киптерелгән һәм ваҡланған армытты (груша) 0,5 литр һыуҙа йомшарғансы бешерергә, 4 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1/4-1/2 стакан эсергә. Яҡшы һөҙөмтәһе бер нисә көндән үк беленә. Ә армыт компотын оҙаҡ ваҡыт эсеү тулыһынса һауығырға булышлыҡ итә. Әммә эс ҡатыуға килтерә, ашҡаҙан сирҙәре осрағында армыт зыянлы. Шулай уҡ дауаланыуҙа армытҡа хас хуш еҫле емештәр генә файҙалы булыуын күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк.

### Ҡан баҫымы

❖Ҡыҙыл сөгөлдөр һутына яртылаш бал ҡушырға һәм көнөнә 7 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖3 ҡалаҡ тары ярмаһын йыуырға, киптерергә һәм килелә онтап, көн дауамында ашарға. Һыу ҡушып эсергә ярамай. Бер нисә көндән ҡан баҫымы нормалләшә. 3-4 аҙна шулай дауаланыу оҙаҡҡа ҡан баҫымын "тынысландыра". Тары онон алдан етерлек итеп әҙерләп ҡуймау хәйерле, шифаһы кәмей. Әйткәндәй, тары ярмаһын сәй кеүек бешереп эсеү ҙә шундай уҡ һөҙөмтә бирә.

### Сирень

❖2 ҡалаҡ яңы сирень сәскәһенә (йәки 1 ҡалаҡ киптерелгәненә) 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшөн ҡойоп, ашағандан һуң эсергә. Төнәтмәне ике көнлөк итеп әҙерләргә, һыуыткыста һаҡларға. Эсерҙән алда бер аҙ эсеһыу өҫтәргә кәрәк. Был импотенцияинан яҡшы дауа.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һоро өйрәк**
**(Серая утка)**



Һуна өйрәктән вағыраҡ. Ата өйрәктең төҫө һоро, тулҡынлы һүрәте менән айырылып тора. Тәпәйҙәре һары, суҡышы һоро. Инә ҡош та ата ҡошҡа оҡшаш, тик төҫө күрәнерәк. Инә һуна өйрәктән аҡһыд ҡорһағы, ә башҡа инә өйрәктәрҙән ҡойроғоноң аҫты һәм өҫтө ҡара булыуы менән айырыла. Ата һоро өйрәк ҡарға кеүек ҡысҡыра, инә ҡоштар иһә ҡапыл-ҡапыл быжғылдай. Осоп барғанда ла тауышланалар, әгәр ҙә һоро өйрәктәр тупланып осоп бара икән, уларҙың үҙ-ара ныҡ ҡысҡырмай ғына "һөйләшеп" барыуын күҙәтергә була.

Үткән быуатта Урал алды районда-рында йыш осрата инек. Әлеге мәлдә Урал тауҙарынан көнбайыштараҡ урынлашҡан күлдәрҙә оя ҡора, әммә һаны буйынса ныҡ кәмегән.

Апрелдең тәүге ун көнлөгөндә парҙарға бүленеп, йә тупланып осоп ҡайталар. Айҙың 24-тәренә килеп бөтәләр. Һуна өйрәк менән сағыштырғанда, һоро өйрәктең һаны өс тапҡырға кәмерәк.

Йылға-күлдәрҙең эргәһендәге яландарҙы үҙ итә. Ҡуйы үлән уларҙы һаҡлай ҙа. Май аҙаҡтарынан июнь аҙағына тиклем йомортҡа һала, 6-11 булғас, 27 көн тирәһе баҫып ултыралар. Уртаса 6-10 себеш сыға.

Һоро өйрәктең дошманы булып көмөш аҡсарлаҡтар, һоро ҡарғалар тора: улар йомортҡаларҙы һәм бәпкәләрҙе урлай. Йыл һайын ошо рәүешле һоро өйрәк бәпкәләренең 20 проценты һәләк була.

Йәшеллек менән туҡлана, һыу үҫемлектәрен ярата, шулай уҡ баҫыуҙағы йәш ашлыҡты ла үҙ итә. Һирәк булһа ла, моллюскыларҙы ла ашай.

Инә ҡош йомортҡа һалып бөткәндән һуң, ата ҡоштар бергә тупланып, йөнөн ҡойоу өсөн Урал йылғаһының түбәнге ағымдарына, йәки Волга буйына осоп китә. Йомортҡа һалмаған инә ҡоштар ҙа улар менән бара. Бәпкәләр 40-45 көнлөк булғас, ҡанаттары нығынып, оса башлай.

Көҙөн йылы яҡҡа китеүҙәре сентябрь урталарына тура килә. 6-14-шәр булып бергә тупланып осалар, шуға ла уларҙың китеүе әллә ни һиҙелмәй ҙә ҡала. Ҡышлаусы ҡоштар ҙа була. Һунарсыларҙың яратҡан ҡошо.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҠЫШ БАБАЙ МЕНӘН...

**Ҡыш бабайҙың барлығына ышанаһығыҙмы? Бала саҡта уның тоғонан алған иң тәмле күстәнәс нимә була торғайны? Унан ниндәй мөғжизә көтәһегеҙ? Бөтә булған шундай ҡыҙыҡлы һорауҙарҙы ун һигеҙ йыл буйы Ҡыш бабай булып "эшләгән" оло йөрәкле, изге күңелле кешегә бирәбеҙ. Ул - Баймаҡ районының Ҡаратал мәктәбе директоры, ауыл старостаһы, ғөмүмән, "стажлы" Ҡыш бабай Рим Сөләймән улы ЙӘНБИРҘИН.**

# ЫШАНА ИНЕК...

**Ҡыш бабай булып "эшләүе" ауырмы?**

- Ауыр түгел, ә ҡыҙыҡ. Хәҙер иһә ысын Ҡыш бабайға әйләнеп бөткәнмендер инде. Бәләкәй балалар менән эшләүе еңел. Улар менән балаларса булырға кәрәк. Ниндәйҙер мөғжизә көткән кеүек, улар һинең күҙеңә генә ҡарап тора. Ә бына ҙурыраҡ балалар Ҡыш бабайҙың барлығына ышанмай, шунлыҡтан, байрам кәйефе бүләк итеү өсөн тырышырға кәрәк. Ә инде ололар менән бергә уйнап-йырларға мөмкин. Дөрөҫөн әйткәндә, байрам барышында нисектер үҙем дә бала саҡҡа әйләнеп ҡайтҡан һымаҡ тәьҫораттар кисерәм. Халыҡҡа аҙ генә булһа ла шатлыҡ-ҡыуаныс бүләк итә алғаныма һөйөнәм. Урамда үтеп барғанда балалар менән тауҙан да шыуған саҡтар була. Ул ваҡытта мине уҡытыусы, директор тип түгел, ә ысын Ҡыш бабай итеп ҡабул итәләр. Мин икәнде белһәләр ҙә танымаған булып ҡыланалар инде.

**Үҙегеҙ Ҡыш бабайға ышана торғайнығыҙмы?**

- 7-8-се кластарға тиклем ышанғанмындыр, буғай. Ғөмүмән, беҙ бит уны ысын Ҡыш бабай итеп ҡабул итә торғайнығ. Ул беҙҙең өсөн авторитет булды. Шиғыр һөйләп, уның тоғонан тәмлекәс алыу үҙе бер ҡыуаныс була торғайны.

**Яңы йыл байрамына кем булып кейенә торғайнығыҙ?**

- Атайым хәрби диңгеҙ флотында хеҙмәт иткәнлектән, уның моряк формаһы бар ине. Шуға ла йыл һайын шул әҙер форманы кейеп, моряк була торғайным.

**Һеҙҙең Ҡыш бабай кем була торғайны, иҫләйһегеҙме?**

- Мәктәп директорыбыҙ Миңлегәле Йәндәүләтов. Беҙ тәүҙә уны ысын Ҡыш бабай тип ҡабул итә торғайныҡ. Үҫә барғас ҡына уның ысын түгеллеге аңланыҡ. Уның шундай оҫта итеп ролен башҡарыуы әле лә күҙ алдымда. Дөрөҫөн әйткәндә, тәүге тәжрибәне, бәлки, шул ваҡытта алғанмындыр.

**Һеҙҙең замандың Ҡыш бабайы менән бөгөнгөһөндә айырма бармы?**

- Ҡыш бабайҙың бурысы бер ваҡытта ла үҙгәргәне юҡ. Тышҡы йөҙөнән башҡа. Элегерәк Ҡыш бабай ысын әкиәт донъяһынан килгән кеүек була торғайны. Кейеме лә шулай булды. Боронғо открытка, һүрәттәрҙе генә алып ҡарағыҙ. Уның үҙенән бер мөғжизә бөркөлә торғайны. Ә замана Ҡыш бабайының туны иһә затлыраҡ. Ләкин уларға ҡарата балаларҙың мөнәсәбәте үҙгәрҙе. Ҡыш бабайҙың ысын түгел икәнлеген дә беләләр, тәмле-татлы менән тулы тоҡҡа ла алданмайҙар. Сөнки өйҙәрендә тағы ла тәмлерәктәре тулып ята.

**Ҡыш бабай бөтә хыялдарҙы ла тормошҡа ашыра аламы?**

- Юҡ, әлбиттә. Әгәр ундай тылсымға эйә булған булһа, был донъя әкиәткә әйләнер ине. Ә шулай ҙа ҡайһы саҡта шундай мөғжизәле хәлдәр килеп тыуғылай ул. Әлеге лә шул Баймаҡта балаларҙы ҡотлап йөрөгәндә өлкәнерәк бер инәй үҙҙәренә мине көсләп тигәндәй алып инеп китте. Ейәнсәремде генә ҡотлап сыҡ инде, тип бәйләнде. Аптырағандан индем. Ә унда 3 йәштәрҙәге бала эргәмә килеп: "Ҡыш бабай, ә ҡайҙа минең әсәйем? Ниңә һаман ҡайтмай? Һағындым, тиҙерәк ҡайтһын", - тип иламһырай. Аптырап ҡалдым. Нимә әйтергә лә белмәнем. Уларҙың ғаилә хәлен белмәйем бит инде. Шунлыҡтан: "Күҙенде йом да, әсәйем, тиҙерәк ҡайт, тип ныҡ итеп телә", - тинем. Ул күҙен йомоп: "Әсәй, тиҙерәк ҡайт!" - тип ҡысҡырып ебәреүенә фатирҙың ишеге асылып китте лә, бәләкәс кенә бер төргәкте ҡәҙерләп тоткан ир менән ҡатын килеп инде. Баҡтиһәң, әсәһе бала табыу йортонда булған икән. Улдары тыуған булған. Үҙем дә аңғармаҫтан, бәләкәй генә бер ҡыҙыҡайҙың хыялын тормошҡа ашырҙым.

**Яңы йылды ғаиләгеҙҙә нисек ҡаршылайһығыҙ?**

- Йыл да ғаилә менән генә булабыҙ, ҡунаҡ саҡырмайбыҙ. Байрам табынына итле-һурпалы бишбармаҡ әҙерләйбеҙ. Үҙем йыл да махсус һауыттарҙа ит быҡтырам һәм балыҡ әҙерләйем. Улар минең "фирменный" аш-һыуым. Йыл һайын алдан крәҫтиән-фермер хужалығы башлығы Рәил Кәримов менән Һаҡмар йылғаһына барып, махсус рәүештә балыҡ ҡармаҡлайбыҙ. Быйыл өс балыҡ әҙерләп ҡуйҙым инде. Ҡалған ризыҡтарҙы ҡатыным әҙерләй, бешерә, етештерә.

**Лилиә ТАКАЕВА әңгәмәләште.**
**Баймаҡ районы.**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ҒАИЛӘ ЙОЛАҺЫ БУЛҺЫН!



**Кемдер шыршыны ноябрь аҙағында уҡ ҡуйған, кемдер йортоноң тәҙрәләрен дә, ишеген дә биҙәгән. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә бергәләп баҙарға сығып, ысын шыршы һатып алыу бер йолаға әүерелгән. Нисек кенә булмаһын, һәр өлкән кеше йылдың ахырғы айын һәм ҡышҡы каникулдарҙы балаһы өсөн мөғжизәгә әүерелдерергә тырыша. Быны ыңғай яғы нимәлә? Ни өсөн Яңы йылды бала тик күңел асып, уйнап-көлөп үткәрергә тейеш тип уйлайбыҙ һәм мотлаҡ ошоға ынтылабыҙ? Психолог Гүзәл ТӨХВӘТУЛЛИНА менән ошо хаҡта әңгәмәләшәбеҙ.**

**Яңы йыл иртәлектәре, театрҙағы тамашалар, концерттар - бала өсөн йыл аҙағы, яңы йыл башы төрлө сараларға бай булып китә, быларҙың барыһы ла уға кәрәкме?**

- Үҙегеҙҙең бала сағығыҙҙы иҫләһәгеҙ, унда балалар баҡсаһында йәки мәктәптәге яңы йыл иртәлегенән башҡа күңел асыу саралары булманы. Яңы йыл ҡаршылыу тигәнде лә белмәнек, Ҡыш бабайҙан бүләк тә көтмәнек, бер-ике мандарин, бер ус кәнфит тә ҙур ҡыуаныс ине. Уның ҡарауы, каникулдар буйына тауҙан шыуҙыҡ, саңғыла йөрөнөк, бейәләйҙәр һыуланып туңып китһә лә, бер кем дә ауырыманы ла. Бына бала өсөн иң дөрөҫ ял ошолай булырға тейеш. Төрлө күңел асыу сараһы - эмоциональ яктан балаға кире тәьҫир итә. Кеше күп, тауыш көслө, ниндәйҙер ығы-зығы, барыһы ла ҡысҡыра, сәпәкәйләй - ул аптырап ҡала, нервыһы ҡуҙғый. Уның урынына парктағы шыршы янына барығыҙ, уның тирәләй йүгерегеҙ, тауҙан шыуығыҙ. Бәләкәстәр Ҡыш бабайҙан ҡурҡа, ғөмүмән, улар барлыҡ сит кешеләргә ятһынып ҡарай, ҙур көүҙәле, һаҡаллы, сағыу кейемле бабайҙың уларға кәрәге лә юҡ. Өйгә Ҡыш бабай саҡырыу ҙа модала, бында мотлаҡ баланың йәшен иҫәпкә алырға кәрәк.

Шулай уҡ байрам табыны ла улар өсөн айырым булһын. Яңы йылды ҡаршылағанда майлы, ҡыҙҙырылған, татлы ризыҡтар күп була. Торт ашап, аҙағынан газлы эсемлек эсеп ҡуя икән, бала сәләмәтлеге өсөн был бик зыянлы. Емешләк, йәшелсә киҫәктәре, сыр, крекер, пакетлы һут тотоп ашау өсөн уңайлы, түгелеп, баланың кәйефен дә боҙмаясаҡ.

**Ә мәктәп уҡыусыһы өсөн каникулдарҙың һәр көнөн мажараларға бай итергә тырышыуға нисек ҡарайһығыҙ?**

- Бәләкәйҙән бала үҙенең күңелен үҙе асып, үҙаллы уйнап өйрәнһен. "Миңә күңелһеҙ", тигәндәрен йыш ишеткәнем бар, быны был һеҙҙең ғәйеп, атай-әсәйҙәр. Ни өсөн балаға гел ҡыҙыҡ, күңелле булырға тейеш әле, мәңгелек бала саҡ илендә ҡалып, барыһын да ситтән көтөп ятыусы өлкәндәрҙе шулай үҙебеҙ үҫтереп алабыҙ. Уҡыусыны ла көн һайын спектаклдәр, шоуҙарға йөрөтмәгеҙ. Әгәр хәүефһеҙ икән, тышта үҙе уйнаһын. Шулай уҡ өлкән балағыҙға гел генә бәләкәйен тағып ҡуймағыҙ, уларҙың ҡыҙыҡһыныуҙары бер үк түгел.

Унан һуң, бергәләп билмән бөрөү һәм аҙағынан бешереп ашау кеүек ғаилә йолалары булдырығыҙ, былар һеҙҙең мөнәсәбәттәрҙе нығытасаҡ. Кистәрен спектакль ҡуя алаһығыҙ, баланың талантын, үҙенә ышанысын арттыраһығыҙ. Бик булмаһа, бергәләп башватҡыстар сисегеҙ, һүрәт төшөрөгөҙ, шаулы тамашаларға ҡарағанда, былар баланың күңеленә ныҡыраҡ хуш киләсәк.

Ауылда, икенсе ҡалала олатай-өләсәйҙәр бар икән, был да бәхет. Уларҙың янына ҡайтығыҙ, быуындар араһында бәйләнеш булһын, әсәй менән атай әйткәнгә, өйрәткәнгә ҡарағанда, олатай-өләсәй өлгөһөн бала яҡшыраҡ үҙләштерә. Башынан һыйпатып, арҡаларынан һөйҙөрөп, күңелдәрен үҫтереп ҡайтһындар. Һәм театрға ла, циркка ла һ.б. алып бара алманым, тип, көйөнмәгеҙ, был, бәлки, бик үк мөһим дә түгелдер.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Яңы йыл алдынан һәр кеше үҙенең бала сағындағы ғаилә йолаларын иҫенә төшөрөп, улар менән үҙенең балаһын да таныштыра икән, был иң дөрөҫө, ти психолог. Тормошонда ғаилә йолаларына урын бар икән, тимәк, был ғаилә сикһеҙ бәхетле. Бала өсөн дә уны аңлауҙары, уның менән бергә нимәләр эшләүҙәре, уны яҡлауҙары мөһимерәк.**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА әңгәмәләште.**

✔ Ул замандарҙа күренекле ҡағандарҙы һәм төркиҙәрҙең юлбашсыларын ҡорамдарҙа ерләгәндәр, уларҙан тура мөйөшлө ҡоймалар тороп ҡалған, ә үҙәктән сыҡҡан дуға рәүешле һыҙыҡтар ҡорам ситен билдәләп торған.



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа

### Селенташ мәҙәниәте ҡәбиләләре

"Мыйыҡлы" ҡурғандар хаҡындағы материалдар авторҙары, уларҙың этномәҙәни булмышын һәм тәғәйенләнешен тулыраҡ асыҡлау маҡсатында, ҙур күләмдәге сағыштырмаса анализ эшләне. Улар ошо мәҙәниәткә ҡараған ҡәбиләләр йәшәгән территорияларҙың Урал һәм Ҡаҙағстан далалары менән генә сикләнгән түгеллеген, уларҙың аналогтары Волганың уң яры буйында (Ҡалмыҡстан), ә көнсығышта Монгол Алтайында һәм Көнбайыш Ҡытайҙа ла (Көньяҡ Синьцзян) булыуын ышаныслы рәүештә иҫбатланы. Уларҙың хеҙмәттәрендә "мыйыҡлы" ҡурғандарҙы төҙөү традицияһының төрки ҡағанаттары эпохаһында барлыҡҡа килеүе һәм таралыуы хаҡында ышаныслы аргументтар килтерелә.

Ул замандарҙа күренекле ҡағандарҙы һәм төркиҙәрҙең юлбашсыларын ҡорамдарҙа ерләгәндәр, уларҙан тура мөйөшлө ҡоймалар тороп ҡалған, ә үҙәктән сыҡҡан дуға рәүешле һыҙыҡтар (линиялар - "мыйыҡтар") ҡорам арауығының контурын билдәләп торған.

Был положение Күл Тегинды (731 йылда үлгән) изге ҡорамда ерләү йолаһы менән тулыһынса тап килә, ул кирбестән төҙөлгән һәм яҙма сығанаҡтарҙа сағылыш тапҡан. Мәйет алдына ҡорбан ителгән хайуандарҙы - ат һәм һарыҡты һалып яндырғандар, ә көлдө һәм утта янып бөтмәгән әйберҙәрҙе ергә күмгәндәр. Шунан һуң ҡәбер өҫтөнә таштар һалынған. Ҡәбер янынан - ҡорамға инеү урынынан көнсығышҡа табан - балбалдар аллеяһы төҙөлгән, улар үлтерелгән дошмандарҙы һынландырған.

С.Г. Боталов фекеренсә, "мыйыҡлы" ҡурғандар, Монголияның, Саян-Алтайҙың төрки ҡәбиләләрендәге кеүек үк, иҫкә алыу культы ҡомартҡылары иҫәбенә инә.

"Мыйыҡлы" ҡурғандар хаҡында икенсе төрлө фекерҙе тикшеренеүсе И.Э. Любчанский белдерҙе. Ул "мыйыҡлы" ҡурғандарҙы һәм өҫтәренә таш һалынған ҡурғандарҙы (селенташ тибындағы) үҙаллы тарихи-мәҙәни ҡомартҡы итеп ҡарап, уларҙың датаһын б.э.V - VII быуат башы менән билдәләне.

Ул формаһы буйынса Көньяҡ Урал төбәгенә хас булмаған ҡурғандарҙың барлыҡҡа килеүен б.э. IV - V быуаттарында, Иран-Бактрия һуғыштары барышында Төньяҡ Бактриянан алыҫ төньяҡҡа күсеп китергә мәжбүр ителгән хиониттарҙың ҙур бер төркөмөнөң был яҡтарға килеүе менән бәйләй. Килмешәк көньяҡ кешеләре, урындағы ҡәбиләләр - был яҡтарҙа төп роль уйнаған һундар, кангюйлылар менән ҡатышып, И. Э. Любчанский эфталит империяһы тип атарға тәҡдим иткән сәйәси берләшмәне етәкләй. Ошо ғалимдың фекерҙәре етди иғтибарға лайыҡ. Ул, беренселәрҙән булып, III-V быуаттарҙа Көньяҡ Уралға, Үҙәк һәм Көнбайыш Ҡаҙағстан райондарына Урта Азияның көньяғынан күп һанлы ҡәбиләләрҙең күсеп килеүе мөмкинлеге хаҡындағы фекерен әйтте, һәм Көньяҡ Уралға был ваҡиға менән бәйле бик күп көньяҡ сығышлы әйберҙәрҙең үтеп инеүе хаҡында фараз итергә мөмкин икәнлеген белдерҙе. Ғалимдың селенташ мәҙәниәте ҡомартҡыларының ваҡытын билдәләү йәһәтенән килтергән иҫкәрмәләре хаҡында һүҙ алып барғанда ошо ҡомартҡы материалдарын да һис шикһеҙ VII-VIII, хатта IX быуаттарға ҡараған әйберҙәр булыуына иғтибар итергә кәрәк, был юҫыҡта С.Г. Боталов дәлилдәре ышаныслыраҡ булып күренә.



Беҙҙең ҡарамаҡҡа, Көньяҡ Уралда һәм Көньяҡ Себерҙең, Ҡаҙағстандың һәм Волга буйының йәнәш ятҡан далаларында "мыйыҡлы" ҡурғандарҙың барлыҡҡа килеүе һәм ғәмәлдә булыуы төркиҙәрҙең - Көнбайыш Төрки ҡағанатының әйҙәүсе этник төркөмдәренең - был яҡтарҙа ла йәшәүен раҫлауҙы мөһим дәлил булып тора.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**



*VI-VII быуаттарындағы ирҙәр ҡәберҙәре материалдарынан:*
*1,2 - балталар;*
*3 - уймыр;*
*4 - ҡасау;*
*5 -ҡалаҡ ҡырғыс;*
*6 - ҡырғыс;*
*7,8 - ҡылыстар;*
*9 - бысаҡ;*
*10 - шөшлө.*

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



## Боронғо төрки теле... тәү телгә илтә

**Ҡашғари: "эр - ир кеше. Күплектә "эрэн" була тиҙәр, әммә был дөрөҫ түгел, сөнки күплек күрһәткесе -лар-ләр була"**

Боронғо төркисә "эр" рәүешендә әйтелеп йөрөгән был үтә боронғо тамыр һүҙ төрки ҡәбиләләре телдәрендә, фонетик яҡтан бер ни тиклем үҙгәрә биргән: мәҫәлән, башҡорттар һәм татарҙар "ир" тип әйтә. Беҙ бында "э" өнөнән "и" өнөнә фонетик күсәгилешлекте ап-асыҡ күрәбеҙ. Ә был һүҙҙең иң боронғо төркисә әйтелеш формаһы "эр" йә иһә "әр" һәм "ер" рәүешендә (башҡа бер варианттар менән бер рәттән) байтаҡ ҡына хәҙерге төрки халыҡтары телдәрендә һаҡланып ҡалған: әзербайжандарҙа - әр (киши варианты ла бар), ҡаҙаҡтарҙа - ер, ер адам, еркек, төркмәндәрҙә - әр, еркек, адам, үзбәктәрҙә - ер, еркак, киши, ҡырғыҙҙарҙа - эр, еркек, киши, ҡырым татарҙарында - эр, адам, төрөктәрҙә - ер, еркек, адам.

Ҡырғыҙҙарҙың бер боронғо мәҡәлендә ошолай тип әйтелә: "Эсен болсо, эр жетер, эр жеткенче эс кетер". Был мәҡәл башҡортса лә берҙәй яңғырай: "Иҫән булһа, ир етер, ир еткәнсе эш китер". Төрөк телендә иһә "ер" варианты һирәк ҡулланыла, ә "еркек" формаһы киң таралған. Әйткәндәй, башҡорт телендәге "иркәк" һүҙе ата енесле малдарға ҡарата ҡулланыла.

Уйлауымса, шәхсән үҙем ошо боронғо "эр" төрки һүҙе нигеҙендә тәү тел эпохаһынан бирле ҡулланылып килгән "ар" тәү тамыр һүҙе яталыр, тип фараз итәм. Ошо үтә боронғо "ар" һүҙенең төп тәү мәғәнәһе - ер. Ошо һүҙ һәм уның фонетик варианттары күп кенә хәҙерге донъя телдәрендә осрай, мәҫәлән, "ар" һәм "гектар" һүҙҙәре әлегә тиклем ер майҙанын билдәреүсе үлсәм берәмектәре итеп ҡулланыла. Немец телендәге "Erde" һүҙе ер тигәнде аңлата, бында ла беҙ бер үк боронғо "ер(д)" тамырын шәйләйбеҙ. Немецтар ир кешегә ҡарата хөрмәтләп әйтелә торған "Herr" (әфәнде) һүҙен ҡулланһа, "герой" һүҙе тәү мәғәнәһендә "батыр ир" тигәнде аңлатҡанын күреп торабыҙ. Әлеге боронғо "ар" һүҙе, үҫешә барған төрки телдәренә үтеп инеп, "жир", "ер" фонетик варианттары формаһын алған.

Архаик эпохаларҙа йәшәгән боронғо кешеләр үҙҙәрен арҙар (арийҙар, арыйҙар) тип атай башлаған, уның мәғәнәһе бик ябай - "ер кешеләре" тигәнгә тура килә, тора-бара ошо уҡ тамыр һүҙҙең яңы варианттары - "эр-ер-еркәк-ир" - ир енесле кешеләрҙе атау өсөн ҡулланыла башлаған, тип фараз итергә ерлек бар. Донъя кимәлендә таралыу тапҡан боронғо дини инаныстарҙа Илаһтың тәү кеше - Әҙәмде ер туҙанынан яралтыуы хаҡында легенда-риүәйәттәр һаҡланып ҡалған. Тәү яралтмыш кешенең ир затынан булыуы ла һыҙыҡ өҫтөнә алынған. Ислам диненең нигеҙ ташы булған, төп тәғлимәтен бәйән иткән изге Ҡөрьән-Кәримдә лә Аллаһы Тәғәләбеҙҙең тәү ирҙе - Әҙәмде балсыҡҡа еҫле һыу ҡушып әүмәләп яралтҡаны хаҡында мәғлүмәт бирелә. Тимәк ар-ерҙән яһалмыш әҙәм балаларының үҙҙәрен "ер-эр-ир" тип атай башлауҙарында әле асыҡланған ғилләә булыуы хаҡтыр.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 42-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

### Люблин-Брест һөжүм итеү операцияһында

Люблин-Брест йүнәлешендәге алыштар, дөйөм Белорус стратегик операцияһының бер өлөшө булараҡ, 18 июлдән 4 августҡа тиклем бара. 17 июлгә ошо операцияны бойомға ашырыу бурысы ҡуйылған фронт частары, шул иҫәптән составында беҙҙең 7-се гв. атлы корпусы булған 69-сы армия Свислочинан көнбайыштараҡ - Кобриндан көнсығыштараҡ - Ковелдән көнбайыштараҡ урынлашҡан рубежда туплана. Операцияның төп маҡсаты - дошмандың Брест һәм Люблин төркөмдәрен тар-мар итеү, Варшава йүнәлешендә һөжүмде дауам итеп, киң фронтта Висла йылғаһына сығырға. Операцияның төп йүнәлешендә 8-се гвардия, 47-се, 69-сы, 70-се армиялар, 26-сы танк армияһы һәм Поляк Ғәскәренең (Войско Польское) 1-се армияһы, тағы ла бер танк һәм ике кавалерия корпустары һөжүм итә, уларҙы һауанан 6-сы һауа армияһы ҡурсалай. Төп йүнәлеш - Люблин һәм Варшава ҡалаһының Прага тип аталған ҡала яны биҫтәһе.

28 июлдә 61-се армияның частары 70-се һәм 28-се армиялар булышлығында Брест ҡалаһын азат итә. 31 июлдә 2-се танк армияһы Варшаваның ҡала яны биҫтәһе булған Прагаға тиклем барып етә. 8-се гвардия һәм 69-сы армиялар 28 июлдән 2 августҡа тиклем Висла йылғаһы аша сығып, уның көнбайыш ярында Магнушевский һәм Пулавский плацдармдарын ала. Әле бәйән ителгән ваҡиғалар Белоруссияла һәм Польшаның көнсығыш райондарында ғәмәлгә ашырылған операцияның дөйөм картинаһын хасил итә.

Хәҙер Люблин-Брест һөжүм итеү операцияһында 7-се гв. атлы корпусының (һәм 16-сы гв. атлы дивизияһының) ҡатнашыуы хаҡындағы мәғлүмәттәргә туҡталайыҡ.

"Багратион" операцияһы башланған саҡта 1-се Беларусь фронтының һул ҡанаты Ковель һәм Люблин (Польша) йүнәлешендә һөжүм итергә әҙерләнә. 7-се гв. атлы корпусына ошондай хәрби бурыс йөкмәтелә: 17 июлгә Радовичи, Обениже, Боблы ауылдары районында тупланырға һәм операцияның 2-се көнөндә дошман оборонаһы аша үтеп, Польшаның Хелм, артабан Люблин ҡалаларына табан һөжүмде йәйелдерергә. 18 июль иртәһендә, дошман позицияларын артиллерия утына тотҡандан һуң, 69-сы армияның 25-се һәм 91-се уҡсы корпустары Парыдубы, Торговище, Дольск, Турычаны рубежында һөжүм башлай һәм уны уңышлы дауам итә. Фронт командующийының бойороғона ярашлы, 7-се гвардия атлы корпусы Көнбайыш Буг йылғаһына табан хәрәкәт итә, уға йылғаның көнбайыш ярҙары буйында плацдарм алыу бурысы ҡуйыла.

21 июлдә төнгә ҡаршы корпус авангардында барған 14-се гв. атлы дивизияһы юҫығында 69-сы армияның айырым танк бригадаһы һәм ҡайһы бер уҡсы частары йылға аша сыға башлай.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

# ЭШҠЫУАР

## йәки Нимәнән

**Рубриканың сираттағы ҡунаҡтары - ысын мәғәнәһендә заман башҡорттары. Уларға ҡарап башҡорт булғы килә. Уларға ҡарап, милләтең өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уяна. Сая рухлы булыуҙары менән бергә, донъяға йәштәрсә прагматик ҡарашлы улар, үҙҙәренең кем һәм ни өсөн йәшәгәнлектәрен яҡшы аңлайҙар. Иманлы, намыҫлылар. Йәшәү рәүештәре - айыҡ, маҡсаттары - асыҡ. Бер юлы бер нисә һөнәр үҙләштерә, бер нисә йүнәлештә эшләй алалар. Уңыш ғәли йәнәптәре улар менән Һеҙ тип һөйләшәләр ҙә, ниндәйҙер дәғүәләр белдерергә лә тартыналыр кеүек. Рухлы, заманса фекерләй белеүсе эшҡыуарҙар, алдынғы ҡарашлы милләттәштәребеҙ - Ислам ТӨХВӘТУЛЛИН һәм Илнур НИҒМӘТУЛЛИН менән әңгәмә - эшҡыуарлыҡ һәм уның нигеҙҙәре хаҡында.**

**Ислам, тәүге һорауым - һиңә. Бөтә Башҡортостандың күҙ алдында үҫтең. Ниндәй йүнәлеш менән китһә лә - фәнме, етәкселекме, сәйәсәтме - Ислам ҙур үрҙәр яулар, тип, беҙ һинән күп нәмә өмөт итә инек. Ә һин, 22 йәшеңдә өлгәшкән ярайһы ҙур карьераңды, Мәскәүҙе, Өфөнө ташлап, Ишембайға ҡайттып киттең дә, эшҡыуарлыҡҡа тотондоң...**

**Ислам:** Тормошта, ҡыҙғанысҡа күрә, бөтә нәмә лә логикаға бойһонмай. Кадет корпусына уҡырға ла мин хәрби кеше булырға теләп барғайным. Әҙме-күпме уҡығас та аңланым: хәрбиҙәрҙең азатлығы юҡ. Унда бөтә нәмә хәрби Устав буйынса: кейемең дә, атлауың да, һөйләшеүең дә, аралашыуың да. Иң мөһиме - унда фекер азатлығы юҡ, хәрби структуралағы һәр кем иерархия буйынса кемгәләр буйһона. Өләсәйемдең әкиәттәрен тыңлап формалашҡан рухымдың ғүмер буйы кемгәләр буйһоноп йәшәгеһе килмәне һәм мин бала саҡ хыялымдан баш тарттым. Кадет корпусында уҡығаныма үкенмәйем. Унда мин үҙемә ышанырға өйрәндем - егет кеше өсөн ул иң мөһим сифаттарҙың береһе. Уҡырға ҡайҙа барырға, ниндәй һөнәр һайларға белмәй, Берҙәм дәүләт имтихандарын ете фәндән тапшырҙым, унда физика ла, тарих та, рус әҙәбиәте менән башҡорт теле лә бар ине. Байтаҡ уйланғандан һуң, Башҡорт дәүләт педагогия университетының филология факультетын һайланым. Унда уҡыуым да, магистратуралар ҙа күп нәмә бирҙе - киң йәмәғәтселек, кешеләр менән эшләргә өйрәндем. Был сифатым - әлеге эшемдең нигеҙе. Ишембайға ҡайтыуым нимәнәләр ташлап ҡайтып китеү йә осраҡлылыҡ түгел - уйланылған аҙым. Бөгөнгө замандың мөмкинлектәре ҙур: Ишембайҙа йәшәйһеңме һин, берәй утрауҙамы - бизнесыңды бөтә Рәсәй буйлап йәйелдерә алаһың. Ҡабул итәһегеҙме-юҡмы, уныһы һеҙҙең эш, беҙ, йәштәр, шулайыраҡбыҙ: кәрәк икән, 180 градусҡа икеләнеүһеҙ борола алабыҙ. Тормош йәштәрҙән шуны талап та итә хатта. Үрҙә әйткәнемсә, логикаға бойһонмаған нәмәләр күп тормошта.

**Илнур:** Эйе, бөтә нәмә лә логикаға бойһонһа, мәктәптә уҡыған йылдарҙағы отличниктарҙың барыһы ла ҙур кешеләр булып бөтөрҙәр, ғалимдарҙың, уҡытыусыларҙың, врачтарҙың эш хаҡтары ҙур булыр ине, күп эшләгән кеше күп аҡса алыр ине...

**Ишембайға ҡайтыуыңды экономик йәһәттән дә үҙаллылыҡҡа ынтылыу, тип аңларға кәрәкме?**

**Ислам:** Йәш егеттең ниңә иҡтисади үҙаллылыҡҡа ынтылыуы аңлашылалыр: кеҫәңдәге аҡсаңдан тыш, "һаҡлыҡ финанс меңдәрең" булыуы һинең күп проблемаларыңды хәл итә. Мин бит студент йылдарында аҡсаны вайндар төшөрөп тә эшләп ҡараным. Ул да - иҡтисади үҙаллылыҡҡа ынтылыуҙың бер алымы ине. Эшҡыуар булып китеүем ситтән ҡарағанда ғына яңылыҡ кеүек күренәләр, минең өсөн ул яңылыҡ түгел - эҙләнеүҙәремдең, үҙ-үҙемде табырға тырышыуымдың һөҙөмтәһе.

**Үҙеңде эшҡыуарлыҡта таптың инде, тимәк?**

**Ислам:** Эйе. Бында мин азат: күңелем нимә теләй, күпме теләй, шуны эшләй алам. Ғаиләм мохтажлыҡ кисермәй, туғандарыма ярҙам итәм, үҙем теләгән проекттарҙың бағыусыһы булыу мөмкинлегем бар. Бала саҡтағы хыялым да бизнесмен булыу ине, әммә "нәҫелдә булмағанды", "бизнесмендарҙың барыһы ла урлаша" тигәнерәк һүҙҙәр менән был теләгемдән һүрелдергәйнеләр.

**Илнур, ә һинең эшҡыуарлыҡҡа китеүең менән Ишембай биатлоны тағы ла бер чемпионын юғалтманымы?**

**Илнур:** Эйе, спортта миңә ниндәйҙер өмөт бағларлыҡ мөмкинлектәрем, әҙерлегем бар ине. Һәр хәлдә, үҙемде профессиональ спортта күрә инем. Маҡсаттарым да, һөҙөмтәләрем дә бар ине. Әммә спорттағы Илнур - күберәк атайымдың өмөтө. Тәүге тренерым да атайым булды. Мәктәптә уҡыған йылдарҙа уҡ ике ҡала араһында өҙгөләндем, хатта армияла хеҙмәт иткәндә лә ярыштарҙа ҡатнаштырыу өсөн бер частан икенсе частҡа йөрөттөләр. Бер генә базаға беркетелеп, ярыштарға бер ҡала өсөн генә йөрөрлөк спонсорым булманы. Ә профессиональ спорт, һиңә аҡса килтерә башлағанға тиклем, әҙерлек осоронда ҙур сығымдар талап итә. Үҙемде тулыһынса спортҡа бағышларға, бәлки, ана шул финанс яғынан үҙ аллы булмауым, шул арҡала өҙгөләнеүҙәрем ҡамасаулағандыр. Тәжрибәм дә етмәгәндер. Эшҡыуарлыҡҡа китһәм дә, спорттан айырылманым.

Спорт - иң ышанысла партнерым, спорт залы - ял итеп, энергия алып ҡайта торған утрауым. Эшҡыуарлыҡта ла тәүге аҙымымды тап спортсылар өсөн фитнес-клуб асып башланым.

**Ә күңелегеҙгә ниндәй юл яҡынраҡ: яратҡан эшегеҙ һәм шуның өсөн көндәлек теләктәрегеҙҙе ҡәнәғәтләндерерлек эш хаҡымы, әллә күп аҡсалы, әммә күңелегеҙгә ятмаған эшме?**

**Ислам:** Яратҡан эш - ярты бәхет, тиҙәр. Яратҡан эш - йән рәхәте, тигәне лә бар мәҡәлдең. Психологтар ҙа: "Яратҡан һөнәреңде һайлаһаң, эшкә байрамға йөрөгән һымаҡ йөрөйәсәкһең", - тип кәңәш бирә. Әммә тормошта эштәрен яратмағандар күберәктер, моғайын. Йәнең теләгән эшең һиңә матур итеп ғаиләңде ҡарарлыҡ, балаларыңа лайыҡлы киләсәк төҙөрлөк табыш килтермәй икән, "был эш миңә оҡшай" тип, йән аҫрар өсөн генә ул эштә ҡалып булмай бөгөн. Һәр кем матур йәшәргә, өй төҙөргә, фатир алырға, ғаиләһе менән диңгеҙгәме, сит илгәме барып ял итеп ҡайтырға хыяллана. Уларҙың күбеһе хыялдарын тормошҡа ашырыр өсөн, аҡсалыраҡ эш эҙләй. Рәссамдарҙы ғына алайыҡ әле. Уларҙың күңеленә ятҡан эш - һүрәт төшөрөү, ләкин рәссамдарҙың күпселеге ошо эш менән үҙ тамаҡтарын да туйҙыра алмай. Үҙ оҫтаханаһын асыу, шәхси күргәҙмәһен ойоштороу өсөн генә лә уға күпме аҡса кәрәк! Уларға ла йәш ваҡытында күп аҡсалы эштә эшләп, бол тупларға тырышыу отошло, сөнки аҡсаңды яратҡан эшеңә инвестициялап була.

**Илнур:** Кеше яратҡан эше менән шөғөлләнергә тейеш, тип уйлайым мин шулай ҙа. Йә осраҡлы ғына һайлаған һөнәрен дә яратырға тырышырға тейеш. Мин, мәҫәлән, спорт менән бәйле сығымдарҙы ҡаплар өсөн генә өйҙән - өйгә, офистан офисҡа компьютерҙар йүнәтеп йөрөнөм, сайттар төҙөнөм. Төҙөләштә лә эшләнем. Эшләй-эшләй төҙөләш эше миңә шул тиклем оҡшап китте, тора-бара эшемдән өҫтәмә килем алыу, ҙур төҙөләш компанияһы тураһында хыяллана башланым. Хыялымды тормошҡа ашырыу мөмкинлеге үҙеңән-үҙе килеп тыуҙы: ҙур ғына төҙөләш компанияһы етәксеһе иғлан буйынса сайт эшләтеү һорауы менән мөрәжәғәт итте. Мин эшләнем, ул эшемде оҡшатты һәм үҙенә эшкә саҡырҙы. Техник-программист булып башлағайным, компания етәксеһенең ярҙамсыһы булып киттем. Бөгөнгө бизнесым төҙөләш менән бәйләнгән, ул эштең бөтә нескәлектәрен белеү, төҙөләшкә булған бөтә талаптарҙы өйрәнеү миңә ныҡ ярҙам итә - эшем хәҙер миңә эшләй, табыш килтерә. Кеше үҙен эшләргә һәм үҙен яратҡан эшендә табырға тейеш. Ятмағаны ғына түгел, хатта яратҡан эшең дә арыта. Яратҡанының ауырлыҡтарын еңеүе еңелерәк, сөнки беләһең: ямғырҙан һуң барыбер ҡояш сыға.

**Бизнесмен булып киткәндән һуң үҙгәрҙегеҙме? Үҙгәрһәгеҙ, ниндәй яҡҡа?**

**Илнур:** Үҙгәрҙек, әлбиттә. Яҡшы яҡҡа үҙгәрҙек. Үҙебеҙ ҙә, йәшәү рәүешебеҙ ҙә үҙгәрҙе. Һәм ул шулай булырға тейеш тә. Эш режимына, аралашҡан мөхитеңә ярашлы һәр кем үҙгәрә: һин спортта икән, йәшәү рәүешең - бер төрлө, уҡытыусы йә артист икәнһең, бөтөнләй башҡа режимда йәшәйһең. Бында мин эшләгән эш шарттарына ярашлы үҙгәреүҙе генә күҙ уңында тотмайым, кеше маҡсаттарына ярашлы үҙгәрергә тейеш.

**Ислам:** Эшҡыуарҙың иң тәүҙә фекерләү кимәле үҙгәрә, сөнки һин бында үҙеңә үҙең хужа. Ваҡытың тар, әммә һин күп ҡыҫымдарҙан азатһың. Ә азатлыҡ һәр кемде үҙгәртә. Арҡа һабағың ныҡ булһа, үҙгәреш тик ыңғай яҡҡа буласаҡ. Донъяны аңлап белеүең, ҡуйған маҡсаттарың дөрөҫ түгел икән, түбән тәгәрәүең дә ихтимал. Был йәһәттән беҙҙең иманыбыҙ ныҡ, шуға күрә йәшәү рәүешебеҙ, йәшәү кимәлебеҙ, аралашыу даирәбеҙ үҙгәргән осраҡта ла ҡиблаларыбыҙ үҙгәрешһеҙ ҡалды, тип әйтә алам.

**Ә мәктәп йылдарында ниндәй инегеҙ, кем булырға хыяллана инегеҙ? Хыялдарығыҙ тормошҡа аштымы?**

**Илнур:** Бәләкәй генә сағымда, бөтә малайҙар кеүек үк, летчик булырға хыялланғайным, ҙурая төшкәс, ул уйыма әллә ни әһәмиәт бирмәнем. Мин йәшәгән мөхит менән уртаҡлығы булмаған уй тиҙ башымдан сыҡҡандыр. Бизнесмен булыу теләген тормош үҙе уятты, шуға ул теләк үҫеп, хыялға әйләнгәндер. Атайым автомеханик ине, гаражда мең төрлө асҡыс, гайкалар, шайбалар. Бергә уйнап үҫкән малайҙарҙың велосипедтары боҙолдомо, йүнәтергә тип беҙгә киләләр. Тора-бара мин велосипед йүнәтергә оҫтарып киттем һәм күрһәткән хеҙмәтем өсөн аҡса ала башланым. Үҫкәс, үҙемдең эшем буласаҡ, тигән уй шул саҡта нығынды. Бизнесмен булғым килде - булдым, утрауҙа йәшәп ҡарағым килде - йәшәнем, океан күргем килде - барып күрҙем.

**Ислам:** Бәләкәйҙән тарих, сәйәсәт, ғилем, дин, ниңә тап башҡорт булыуым менән ҡыҙыҡһынып үҫтем һәм ошо ҡыҙыҡһыныуҙарым өләсәйем менән бәйле. Һөнәре менән ул башланғыс класс уҡытыусыһы ла булғас, минең ҡыҙыҡһыныуҙарымды, ниндәйҙер түңәрәктәргә йөрөмәһәм дә, күрә, аса, үҫтерә белде. 3-сө класта "Урал батыр" эпосын ятлай башланым. Кадет



*Уҡырға ҡайҙа барырға, ниндәй һөнәр һайларға белмәй, Берҙәм дәүләт имтихандарын ете фәндән тапшырҙым, унда физика ла, тарих та, рус әҙәбиәте менән башҡорт теле лә бар ине. Байтаҡ уйланғандан һуң, Башҡорт дәүләт педагогия университетының филология факультетын һайланым. Унда уҡыуым да, магистратуралар ҙа күп нәмә бирҙе - киң йәмәғәтселек, кешеләр менән эшләргә өйрәндем. Был сифатым - әлеге эшемдең нигеҙе. Ишембайға ҡайтыуым нимәнәләр ташлап ҡайтып китеү йә осраҡлылыҡ түгел - уйланылған аҙым. Бөгөнгө замандың мөмкинлектәре ҙур: Ишембайҙа йәшәйһеңме һин, берәй утрауҙамы - бизнесыңды бөтә Рәсәй буйлап йәйелдерә алаһың. Ҡабул итәһегеҙме-юҡмы, уныһы һеҙҙең эш, беҙ, йәштәр, шулайыраҡбыҙ: кәрәк икән, 180 градусҡа икеләнеүһеҙ борола алабыҙ. Тормош йәштәрҙән шуны талап та итә хатта.*

***✓ Оҡшаған һөнәреңдә үҙеңде мотлаҡ һынап ҡарарға кәрәк. Ресторан хужаһы булғың килә, әммә уны асырлыҡ мөмкинлегең юҡ икән - официант булып урынлаш та, ул эштең бөтә нескәлектәрен күр, өйрән.***



# ЯҘМАЛАРЫ,

## ҡурҡырға ярамай?

корпусында артабанғы тормошомда ҙур роль уйнаған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әмирханова Фаяғөл Тимербай ҡыҙы етәкселегендә башҡорт донъяһына инеп киттем: "Урал батыр" эпосын тулыһынса ятлап, республика йәш сәсәндәр бәйгеһендә Гран-при яуланым, төрлө фәнни-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнаштым. Әүҙемлегем оло класс уҡыусыларына оҡшамағандыр инде, күрәһең, улар мине "осрашыу"ҙарға саҡыра башланылар. Ниндәйҙер ғәҙелһеҙлек күрһәм, ололарҙы (армия теле менән әйткәндә, "дед"тарҙы) икәүҙән-икәү һөйләшеүҙәргә үҙем дә саҡыра торғайным. Ундай ерҙәрҙә, билдәле, көсөңдө йоҙроҡ менән иҫбат итәһең, шуға мин дә ҡул һуғышы секцияһына йөрөнөм. Бер аҙҙан тренер мине ярыштарға ала башланы. Тәүге ярышта уҡ үҙемдән өлкәнерәк, тәжрибәле спортсыларҙы еңеп ҡайттым һәм шунда бер нәмәне аңланым: еңеү өсөн көслө булыу ғына етмәй, мотивация һәм үҙ-үҙеңә ышаныс кәрәк. Артабанғы бөтә уңыштарым ошоно аңлауҙан килгәндер, тип уйлайым хәҙер.

**Кеше үҙ ғүмерендә, исмаһам, бер тапҡыр нимә эшләп ҡарарға тейеш?**

**Ислам:** Оҡшаған һөнәренә табан бер аҙым эшләп ҡарарға тейеш. Ул эш һиңә ысынлап та оҡшай икән, артабан үҫергә, камиллаширға. Оҡшамай икән, үҙеңде икенсе өлкәлә һынап ҡарарға мөмкинлектәр күп, тик үҙеңә ҡул һелтәп ҡуйырға ғына ярамай. "Үҙ бизнесымды асырға теләгәйнем, йәш саҡта тотонорға ҡурҡтым бит", тип үкенеп ултырғансы, 1, 10, 99 тапҡыр тотоноп ҡарап, үҙен эҙләп ҡарарға тейеш кеше.

**Илнур:** Эйе, оҡшаған һөнәреңдә үҙеңде мотлаҡ һынап ҡарарға кәрәк. Ресторан хужаһы булғың килә, әммә бөгөн ресторан асырлыҡ мөмкинлегең юҡ икән - официант булып урынлаш та, ресторанда эшләп ҡара, ул эштең бөтә нескәлектәрен күр, өйрән. Берәү ҙә һинең ҡулыңа ресторан асҡысын килтереп тоттормаясаҡ, ул бер айҙа, бер йылда ғына юлға һалына торған бизнес та түгел. Үҙеңде һынап ҡара, кәртәләрҙән ҡурҡма, аҙаҡ үкенерлек булмаһын.

**Финанс көрсөгөндә ҡалғанығыҙ бармы? Ул хәлдән нисек сыҡтығыҙ? Аҡса эшләргә тотонғансы, буласаҡ бизнесмен, ашарлыҡ та аҡсаһы булмай, бер килке асығып йөрөргә тейешме?**

**Илнур:** Йәш саҡта, ул ваҡытта миңә 21 генә йәш ине әле, Төмән ҡалаһына барып эшләп ҡайтҡан ҙур ғына сумма аҡсамды, муттарға ышанып, юғалттым. Юғалтыу ғына аҙ әле, байтаҡ бурысҡа баттым. Етмәһә, Салауаттағы бизнесымды ла офисы менән бергә һатып ебәргәйнем - аҡса килер ер юҡ. Шул ваҡытта һынмағаныма әле үҙем аптырайым. "Аҡса ҡағыҙ ғына бит ул, иң мөһиме - үҙем, атай-әсәйем, туғандарым иҫән, һаулығым бар", - тип үҙемде йыуатып, шул хәлдән ҡотолоу планын төҙөнөм һәм Сахалинға сығып киттем. Унда башынан алып аҙағына тиклем төҙөлөш эшен өйрәндем. Бер аҙ аҡса туплап ҡайтып, Вологда ҡалаһына тағы ла аҡсалыраҡ эшкә юлландым. Вологдаға барып, миңә тәғәйен бурысты эш урынында өйрәнәм дә, Өфөгә ҡайтып эшләйем. Эшемде интернет аша Вологдаға оҙатҡас, бында үҙемдең эшемде асыу мәшәҡәттәре менән йөрөп алам. Миңә яңы объект бирһәләр, тағы Вологдаға барып киләм. Шулайтып йөрөп, бурысымды түләп бөтөүгә, команда йыйып, үҙемдең эшемде асып ебәрҙем.

**Ислам:** Аҡса еткерә алмай йөрөгән саҡтар булды инде. 10-сы класты тамамлаған йәйҙе әсәйем мине Себергә аҡса эшләргә ебәрҙе. Унда мин Урта Азиянан килгән егеттәр менән бер бригадала эшләп, бер йәй эсендә тормош әсеһен байтаҡ татып өлгөрҙөм. Кире ҡайтҡанда, минең үҙемә, үҙемдең мөмкинлектәремә ҡарашым үҙгәргәйне. Үҙ-үҙемә, йә уҡып кеше булаһың, йә ғүмер буйы ҡара эштә бил бөгәһең, тип әйтерлек булғайным. Миңә көслө мотивация биргән тағы бер хәлде иҫләйем. 1-2 курстарҙа уҡыған саҡта мәсеткә ифтарҙар үткәргән бай мосолмандарға өҫтәл әҙерләшергә йөрөнөм. Улар беҙгә мул итеп күстәнәсен һәм 500 һум аҡса бирә ине. Шул ваҡытта мин үҙемә: "Берәй заман мин ошо хәлдән сығасаҡмын һәм ошондай ифтарҙарҙы үҙем үткәрәсәкмен", - тинем. Аллаға шөкөр, ул ниәтем дә бойомға ашты.

**Илнур:** Эйе, көрсөктә күптәрҙең ҡалғаны бар һәм ул көрсөк, көрсөктән сығыу өсөн үҙе үк һәйбәт мотивация. Ҡайһы саҡта, юғарыраҡ үрләү өсөн, иң аҫҡа төшөп, көслөрәк этенергә кәрәк, тиҙәр бит. Был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк бар. Байҙарҙың ғүмер буйы комфорт зонаһында йәшәгән балалары эшҡыуар булып киткән осраҡтары бик һирәк. Улар уҙа барһа алыпһатар булалар. Көрсөктән сығыу өсөн атайыңдың малы булыу ғына аҙ - тырышлыҡ кәрәк.

**Үҙегеҙгә ҡуйған иң ауыр маҡсат? Ул маҡсатҡа ирешер өсөн ниндәй юл үтергә, нимәләр эшләргә тура килде?**

**Илнур:** Атайым ике йәшемдә саңғыға баҫтырҙы, дүрт йәшемдә 5 километрға марафон йүгерҙем. Физик йәһәттән иң ауыры, моғайын, ошо марафон булғандыр. Уға тиклемге күнекмәләрҙе иҫләмәйем, марофонда стартҡа барып етеүе ауыр булды. Ләкин ул минең тәүге еңеүем булараҡ хәтерҙә ҡалған. 8-се класта уҡығанда спорт мастерлығына кандидат инем. 7-8 кластарҙа уҡығанда ҡыҙыҡ күреп, кәрәк күреп тә ҡул һуғышы секцияһына йөрөп алдым, әммә биатлон буйынса тренерым мине ҙур спортҡа әҙерләргә теләне һәм бер йүнәлештән икенсеһенә йүгереп йөрөп, ҙур һөҙөмтәләргә ирешеп булмауын аңлатты, һәм мин саңғы спортында ҡалдым. Атайымдың мине профессиональ саңғысы итеп күреү теләге көслө булғандыр инде, һәр көн иртән, һауа торошоноң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, мәктәпкә барғанға тиклем йүгереп килеүем уның төп талабы ине. Саңғыларҙа йүгереү оҡшай, ә бына йәйге күнекмәләр оҡшамай. Шулай ҙа, йәйге күнекмәләрһеҙ уңышҡа өлгәшеп булмағанлығын аңлағанға, йәй ҙә йүгерҙем. Мине атайым шундай тормошҡа күнектерҙе һәм мин спортсмендарға тейеш булған көндәлек талаптарҙы бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ, ҙур теләк менән башҡарҙым. Ошоноң өсөн атайыма рәхмәтлемен. Берәй эш боҙһам, ул: "Саңғыларыңды һатам да ебәрәм!" - тип ҡурҡыта торғайны. Саңғыларһыҙ ҡалыуҙан ҡурҡып, йә көндөҙ ниндәйҙер сәбәп менән күнекмәләргә сыҡмаған булһам, төндә булһа ла йүгереп килә инем. Атайым миндә характер тәрбиәләгән. Хәҙер миңә Айҙа өй төҙөү ҙә ҡыйынлыҡ тыуҙырмаҫын беләм, тырышлыҡ булғанда, уны ла эшләп була. Бары тик ваҡыт ҡына кәрәк.

**Ислам:** Канада яҙыусыһы Джон Кэхонның "Подсознание может все" китабында ошондай миҫал бар: әгәр ҙә һин ҡыҙыл машина тураһында уйлайһың икән, юлыңа ҡыҙыл машиналар йышыраҡ осраясаҡ. Маҡсатыңа ирешеү өсөн психологтар ҙа ошондайыраҡ алымдар ҡулланырға тәҡдим итә. Һәм улар, ысынлап та, ниндәйҙер көскә эйә. Эшкә бер ҡасан да "минең ҡулымдан килмәҫ инде ул" тигәнерәк негатив уйҙар, негатив энергия менән тотонорға ярамай - "минең ҡулымдан килә", "мин уны эшләй алам", "биш йылдан минең үҙемдең эшем, офисым, командам буласаҡ" һ.б. ыңғай энергияға көйләргә кәрәк. 5-се курсты тамамларға йөрөгәндә, минән бер көн: "Эшкә ҡайҙа бараһың?" - тип һоранылар. Мин ҡайҙа барыуым тураһында уйламағанмын да, ә үҙем: "Хөкүмәткә",- тип яуап бирҙем. Бөтәһе лә көлөп ебәрҙе, ә мин үҙемдең эш урынымды күҙ алдына килтереп, уйнап күрһәттем: мин унда - кәмендә бер бүлек етәксеһе. Ысынлап та, оҙаҡламай мине Республика Йәштәр Хөкүмәте рәйесе итеп һайлап ҡуйҙылар. Әкиәт һымаҡ тойолһа ла, был хәл булды һәм ул эш миңә ҙур тәжрибә бирҙе.

**Уңышлы булыу өсөн кешегә ниндәй сифаттар кәрәк? Һеҙҙә ул сифаттар бармы? Үҙегеҙгә ҡамасаулаған ниндәй ғәҙәттәрҙән арыныр инегеҙ? Үҙеңдең хаталарыңда өйрәнеү мотлаҡмы, әллә башҡаларҙыҡындамы? Хаталар өҫтөндә эш эшләйһегеҙме?**

**Ислам:** Уңышлы булыр өсөн, иң тәүге сиратта тырыш булырға кәрәк. Ижад кешеһе нисек кенә талантлы булмаһын, тырышмайынса, уңышҡа өлгәшә алмай, ул хатта талант булараҡ юғалып ҡала. Һәр өлкәлә лә шулай ул. Һәр уңыштың нигеҙендә - тырышлыҡ һәм тырышлыҡ ята. Бизнеста уңышлы булыу өсөн креатив фекерләй белеү ҙә кәрәк - кеше уйларға ла ҡыймаған әйбер тураһында хыялланырға тейеш эшҡыуар һәм шул уйын тормошҡа ашырырға тотонор өсөн унан тәүәккәллек талап ителә. Ошо сифаттар миндә бар, әммә мин, бөтә башҡорттар һымаҡ уҡ, кешеләргә тиҙ ышанып барам. Бер ҡатлы уҡ булмаһам да, ихласмын, һәр башҡортҡа ярҙам ҡулы һуҙырға әҙермен. Ярҙамға мохтаждарҙың күбеһе, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғүмер буйы кем дәндер ярҙам көтөп ултырырға ризалар. Бындай осраҡта мине Илнур тиҙ генә ергә төшөрә һәм ундай партнерҙар, клиенттар менән мөнәсәбәттәрҙе тиҙ генә рәсмиләштереп ҡуйыу кәрәклеген иҫкәртеп тора. Хаталарыбыҙҙы күрәбеҙ икән, һинең хатаңмы ул, партнерыңдыҡымы - уныһы мөһим түгел - ултырып һөйләшәбеҙ, анализлайбыҙ, хаталар өҫтөндә эш эшләйбеҙ. Хаталар беҙҙе артабан хаталанмай эшләргә өйрәтә бит.

**Илнур:** Эйе, кешеләргә артыҡ ныҡ ышанып, минең бер ауыҙым беште бит инде, шуға өрөп ҡабырға өйрәндем. Үҙ хатаңда алған һабаҡ нығыраҡ әсеттерә бит, шуға онотолмай, һәр саҡ шул хатаны ҡабатламаҫҡа иҫкәртеп тора. Минең тағы үҙемә ҡамасаулаған бер яғым бар - ул ваҡытты дөрөҫ бүлмәү. Ҡайһы саҡта ул мине генә түгел, дөйөм эште тотҡарлай, шуға көнөмдө һәр ваҡыт планлаштырырға тырышам. Уңышлы булыу өсөн тағы ла позитив фекерләй белергә кәрәк, тип уйлайым. Бизнес спорт һымаҡ уҡ ярыш ул. Ярышта үҙеңде позитивҡа көйләмәһәң, тырышлыҡ менән генә булмай. Бизнесмендар бер аҙ хыялыйҙар, сөнки бизнестың нигеҙендә хыял ята, ә хыяллана белеү үҙе үк һәр нәмәгә позитив ҡараш менән бәйле. Бизнесмендар күңелдәре менән бала һымаҡ булырға тейеш: бала берәй нәмәне үрелеп алырға теләй - буйы етмәй, әммә ул осоп төшөүҙән дә ҡурҡмай - һаман үрелә, ынтыла, барыбер теләгән нәмәһен алып ҡуя. Эләгеп йығыла икән, тороп баҫа ла, илай-илай булһа ла алға атлауын дауам итә. Бара торғас, ауыртыуын да онотоп, көлөп ебәрә. Бизнеста ла шулай: йығыл, осоп төш, яңынан тороп баҫ, илай-көлә атлап кит... Тағы ла... тәртип кәрәк эшҡыуарҙарға. Тәртип, әлбиттә, һәр кемгә, һәр ерҙә кәрәк, бөтә башланғыстың нигеҙендә тәртип ятырға тейеш.

**Тормош девизығыҙ ниндәй?**

**Илнур:** Башлаған эшеңде аҙағына тиклем еткер.

**Ислам:** Тырышҡан - тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан.



***Атайым ике йәшемдә саңғыға баҫтырҙы, дүрт йәшемдә 5 километрға марафон йүгерҙем. Физик йәһәттән иң ауыры, моғайын, ошо марафон булғандыр. Уға тиклемге күнекмәләрҙе иҫләмәйем, марофонда стартҡа барып етеүе ауыр булды. Ләкин ул минең тәүге еңеүем булараҡ хәтерҙә ҡалған. 8-се класта уҡығанда спорт мастерлығына кандидат инем. 7-8 кластарҙа уҡығанда ҡыҙыҡ күреп, кәрәк күреп тә ҡул һуғышы секцияһына йөрөп алдым, әммә биатлон буйынса тренерым мине ҙур спортҡа әҙерләргә теләне һәм бер йүнәлештән икенсеһенә йүгереп йөрөп, ҙур һөҙөмтәләргә ирешеп булмауын аңлатты, һәм мин саңғы спортында ҡалдым. Атайымдың мине профессиональ саңғысы итеп күреү теләге көслө булғандыр инде, һәр көн иртән, һауа торошоноң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, мәктәпкә барғанға тиклем йүгереп килеүем уның төп талабы ине.***

**(Дауамы 10-сы биттә).**

# ЭШҠЫУАР ЯҘМАЛАРЫ,

## йәки Нимәнән ҡурҡырға ярамай?

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Һеҙҙең өсөн нисек килеп сыға - шулай, әммә тиҙ һәм ваҡытында эшләү мөһимме, әллә яйлап, әммә еренә еткереп, киренән эшләмәҫлек яҡшы итепме?**

**Ислам:** Тиҙ, ваҡытында һәм киренән эшләмәҫлек итеп. Ваҡыт шул тиклем тығыҙ һәм ул шул тиклем тиҙ үтә, нимәнелер киренән эшләп ултырырға ваҡыт юҡ. Шуның өсөн тәү эшләүҙән үк ҡабаттан эшләмәҫлек итеп эшләргә кәрәк.

**Илнур:** Конкуренция ҙур, ундай шарттарҙа нисек килеп сыға - шулай эшләргә ярамай. Йәйланыһың, һине конкуренттарың ҡыуып етә. Килеп сыҡмай икән, ялың, йоҡоң иҫәбенә эшләп, ваҡытында еренә еткереп ҡуйырға кәрәк.

**Эшегеҙҙә йә шәхси тормошоғоҙҙа кем менәндер мөнәсәбәттәрегеҙ боҙолоп китһә, араларығыҙҙы нисек көйләйһегеҙ?**

**Илнур:** Беҙ команда булып ойошҡан мәлдә үк һөйләшеп-килешеп ҡуйҙыҡ: әгәр ҙә ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ килеп тыуа икән, уны урынында хәл итәбеҙ. Ниндәйҙер һорау тыуһа, уны өйөнә алып ҡайтып китергә йә булмаһа айҙар буйы йөкмәп йөрөргә ярамай - тураһын әйт, тураһын һора, һәр ваҡыт һөйләшеп аңлашырға була.

**Ислам:** Һөйләшеп килешеп булмаған нәмә юҡ бит ул - теләк кенә кәрәк. Килеп тыуған ябай ғына аңлашылмаусанлыҡты конфликтҡа тиклем үҫтерергә теләгәндәр генә һәүетемсә һөйләшеп аңлаша алмай. Ҡайһы саҡта арып китәһең, эштән арыйһың, бер-береңдән арыйһың, ундай саҡта һөйләшеүҙе кисектереп, команда менән берәй ергә ял итергә барып киләбеҙ. Торатау башына менеп төшһәң дә бөтә негатив энергия юҡҡа сыға. Атта сабып йөрөп киләбеҙ, ҡыш - саңғыла, йәйлекөҙлө велосипедтарҙа йөрөйбөҙ - әүҙем ял итеүҙең формалары күп. Команда йә ғаилә менән ял иткәндә мөнәсәбәттәр үҙенән - үҙе көйләнә.

**Илнур:** Ошондай мөнәсәбәттәребеҙ - беҙҙең өсөн яҙылмаған ҡанун. Эш оҡшамаһа, нимә оҡшамай - әйт, бергәләп хәл итербеҙ, тип эшкә яңы алынған хеҙмәткәрҙәргә тәүге көндө үк иҫкәртеп ҡуябыҙ. Кешеләргә кешесә мөнәсәбәт оҡшай барыбер. Ә шәхси мөнәсәбәттәрҙә - ғәйепләһең икән, ғәфү үтенергә, юҡбар өсөн тауыш сығармаҫҡа, әллә нидәй көс еткеһеҙ дәғүәләр белдермәҫкә. Ғүмер бер генә тапҡыр бирелә икәнлеген аңлар йәшкә еткәнбеҙ бит инде. Тормошто тик позитив тулҡынға көйләргә тырышырға кәрәк, шул ваҡытта ғына ул тулы, яҡты була. Мин тормошта бөтә нәмәне лә спорт менән сағыштырып өйрәнгәнмен. Спортта матур һөҙөмтәгә өлгәшер өсөн көндәлек күнекмәләр кәрәк. Күнекмәләргә ҡул һелтәп ҡарағанһың икән, уңыштарың да юҡ. Көндәлек тормошта ла шулай: матур йәшәргә теләйбеҙ икән, матур мөнәсәбәттәр булдырыр өсөн көн һайын ниндәй ҙә булһа матур эштәр эшләргә кәрәк.

**Бығa тиклем ҡабул иткән ниндәй ҡарарҙарығыҙҙы үҙегеҙ өсөн иң мөһиме тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Ислам:** Иң мөһим ҡарарыбыҙ, моғайын, дингә килеүебеҙҙер. Ҡөрьән ул - йәшәү кодексы. Уны үтәргә беҙҙе берәү ҙә көсләп ант иттермәне, ошо тәғлимәткә аңлы рәүештә үҙебеҙ килгәнбеҙ, уны бер ниндәй икеләнеүһеҙ үтәйбеҙ, шуға беҙгә йәшәүе лә еңелерәк. Дин үҙе үк беҙҙе имanһыҙ, әҙәпһеҙ булыуҙан, насар ғәмәлдәрҙән һаҡлай.

**Илнур:** Ислам менән тулыһынса килешәм. Беҙҙәге күп ыңғай сифаттарыбыҙ - дин тәғлимәттәрен, намаҙлы кешегә фарыз булған ғәмәлдәрҙең барыһын да теүәл үтәүебеҙҙән: тапҡан малыбыҙ хәләл, тулыһынса айыҡ һәм сәләмәт тормош алып барабыҙ, мохтаждарға ярҙам итәбеҙ, динебеҙ тыйғандарҙан тыйылабыҙ.

**Аңлауымса, был өлкәлә лә һеҙҙең тәжрибәгеҙ ҙур. Дингә нисек килдегеҙ?**

***Уңышлы булыу өсөн тағы ла позитив фекерләй белергә кәрәк, тип уйлайым. Бизнес спорт һымаҡ уҡ ярыш ул. Ярышта үҙеңде позитивҡа көйләмәһәң, тырышлыҡменән генә булмай. Бизнесмендар бер аҙ хыялыйҙар, сөнки бизнестың нигеҙендә хыял ята, ә хыяллана белеү үҙе үк һәр нәмәгә позитив ҡараш менән бәйле. Бизнесмендар күңелдәре менән бала һымаҡ булырға тейеш: бала берәй нәмәне үрелеп алырға теләй - буйы етмәй, әммә ул осоп төшеүҙән дә ҡурҡмай - һаман үрелә, ынтыла, барыбер теләгән нәмәһен алып ҡуя. Әләгеп йығыла икән, тороп баҫа ла, илай-илай булһа ла алға атлауын дауам итә. Бара торғас, ауыртыуын да онотоп, көлөп ебәрә. Бизнеста ла шулай: йығыл, осоп төш, яңынан тороп баҫ, илай-көлә атлап кит... Тағы ла... тәртип кәрәк эшҡыуарҙарға. Тәртип, әлбиттә, һәр кемгә, һәр ерҙә кәрәк, бөтә башланғыстың нигеҙендә тәртип ятырға тейеш.***

**Илнур:** Байғужала беҙҙең өй мәсет эргәһендә генә ине. Мәсеткә килгән бабайҙар шунда уйнап йөрөгән бала-сағаны яратып, матур-матур теләктәр әйтеп китәләр. Беҙгә ҡыҙыҡ. Эскә саҡырһалар, беҙ ҙә инәбеҙ, уларҙы тыңлап ултырабыҙ. Икенсеме, өсөнсөмө класта уҡығанда, бер көн үлтереп ҡолағым ауырта башланы, өйҙә бер үҙем генә. Ул ваҡытта атай-әсәйгә шылтыратырға телефон да юҡ. Нимә эшләргә лә белмәй, мин бабайҙар һымаҡ сәждәгә киттем дә, Алла бабайҙан илай-илай ҡолағымдың ауыртыуын бөтөрөүен һораным. Күпмелер үткәндән һуң, ауыртыу бөттө лә ҡуйҙы. Шунан һуң әллә күпме ҡурҡып йөрөнөм: нимә эшләһәм дә Алла бабай мине күреп торалыр һымаҡ тойолдо. Уның барлығына ышаныс шулайтып инде күңелгә. Йәйлап, бабайҙар менән мәсеткә йөрөй башланым, доғалар ятлап алдым, һигеҙенсе класта намаҙға баҫтым. Дин менән бәйле тағы бер нисә осраҡлылыҡ булды тормошомда. Салауатта уҡығанда ла, армияла ла мәсет йәшәгән урыным эргәһендә генә ине. Бер ҡыйынлыҡһыҙ намаҙ уҡырға мәсеткә йөрөнөм. Осраҡлыҡтар осраҡлы булмағанын йылдар үткәс аңлап беләм.

**Ислам:** Ә мин дингә "Урал батыр" эпосы аша килдем. Икенсе класта, эпосты тулыһынса уҡып сыҡҡас, Урал батырҙың үлеме тураһында оҙаҡ уйланып йөрөнөм. Әкиәттәрҙә батырҙар үлмәй бит, ә ниңә Урал батыр үлә, тип уйлайым инде үҙемсә. Шул турала өләсәйемдән һорағас, ул миңә йән, теге донъя, был донъя, тамуҡ, ожмах тураһында һөйләне. Йәйләп доғалар ятлай башланым, намаҙға шулай уҡ һигеҙенсе класта баҫтым.

**Берәйһенә кәңәш һорап мөрәжәғәт иткәнегеҙ бармы? Иң яҡшы кәңәште кем бирҙе? Ул кәңәште тоттоғоҙмо?**

**Ислам:** Иң тәүге кәңәшсем, әлбиттә, әсәйем. Йәшәй-йәшәй уны төрлө һорауҙар менән борсомаҫҡа, уның йән тыныслығын һаҡларға тырышам. Кадет корпусында уҡыған йылдарымда һәр мәсьәлә буйынса кәңәшсем - уҡытыусым Фәйгөл Тимербай ҡыҙы булды. Уҡырға ҡайҙа барыу буйынса ла кәңәште унан һораным. Ул миңә бөркөттәр балаларын нисек осорға өйрәтеүҙәре тураһында кинәйәле хикәйә һөйләне лә: "Хәҙер һин ояһынан һауаға ырғытылға бөркөт. Осоп төшөп имгәнгең килмәһә, осорға үҙең өйрән - ҡанаттарың бар. Һәр кем үҙенең тормошо өсөн үҙе яуаплы", - тине. Уҡытыусымдан алған мәңге онотолмаҫлыҡ һабаҡ булды ул. Мәскәүгә уҡырға барырғамы-юҡмы тип уйланып йөрөгәндә иң кәрәк кәңәште Зәки Арыҫлан улы Әлибаев бирҙе. "Баш ҡала университеты диплом ғына бирмәй, ул - Мәскәү мәктәбе", - тигәйне. Мәскәү мәктәбе - ул бөтөнләй яңы мөмкинлектәр, үҙеңә лә, тормошҡа ла яңыса ҡараш. Ошо мәктәпһеҙ мин әлеге Ислам була алмаҫ инем.

**Илнур:** Иң яҡшы кәңәште атайымдың дуҫтары бирҙе, тип иҫәпләйем. Эшҡыуарҙар ине улар. Йыл һайын күмәкләп Еҙем буйлап һалда йөҙөргә сығалар. Атайым мине лә үҙе менән ала ине. Уларҙың үҙ-ара дуҫлығын, бер-береһенә терәк, таяныс булғандарын күреп үҫтем. Шуға микән, ғүмер буйы шундай йылы, ышаныслы мөнәсәбәттәрҙе ҡәҙерләп, үҙемдең тирә-яғымда шундай мохит булдырырға ынтылып йәшәйем. "Һинең өсөн һинең менән бергә ҡайғырған дуҫыңа ышанма, һин өй һалғанда, һинең өсөн һинең үҙеңдән дә артыҡ шатланған дуҫыңа ышан", - тип өйрәттеләр улар мине. Элегерәк уларҙың әйткәндәрен аңлап та етмәгәнмен, шуға минең өсөн минең менән бергә ҡайғырған дуҫтарға таянып янған саҡтарым да булды, хәҙер дуҫтарымды ошо принциптан сығып баһалайым.

**Бөгөн йәштәр араһында һәр төрлө вебинарҙар, тренингтар модала. Һеҙ улар аша үттегеҙме? Юғары белем мотлаҡмы?**

**Ислам:** Вебинарҙарға, тренингтарға Өфөлә лә, Мәскәүҙә уҡығанда ла күп йөрөнөм. Уларҙың файҙаһы күп. Ул - аралашыу, үҙеңде яңы идеялар менән байытыу мөмкинлеге, фекер уртаҡлашыу майҙаны. Аҡыллы, белемле, кешеләр менән эшләү тәжрибәһе булған спикерҙарҙан ғына күп нәмәгә өйрәнеп була. Эшлекле, мәғлүмәтле форумдарҙан һин бер башҡа үҫеп ҡайтаһың хатта. Әйе, бөгөн юғары белемһеҙ ҙә аҡса эшләп була, әммә мин юғары белем кәрәк тип иҫәпләйем. Юғары белем - ул диплом ғына түгел, ул һине хеҙмәт баҙарына алып сыға торған ресурс, ул квалификация, үҙеңдең эске мөмкинлектәреңде үҫтереү, камиллаштырыу юлы. Уның бер кемгә лә ҡамасаулағаны юҡ әле.

**Илнур:** Юғары белемгә килгәндә, белем, әлбиттә, кәрәк, нисек кенә уңышлы булһаң да, белемһеҙ бер нәмә лә эшләп булмай. Диплом менән генә сикләнеп ҡалырға ярамай, даими уҡырға кәрәк. Минең өҫтәл китаптарым - киң билдәле Брайан Трейси, Роберт Кийосаки, Стив Джобс кеүек үҙҙәренең эшҡыуарлыҡ тәжрибәләре булған яҙыусыларҙың китаптары. Уларҙың һәр береһе донъяның иллегә яҡын теленә тәржемә ителгән. Уларҙы ҡабат-ҡабат уҡыйым, эшемдә уларҙың кәңәштәрен ҡулланам. Бизнесҡа яңы аяҡ баҫыусы йәштәргә вебинар-тренингтарҙы беҙ хәҙер үҙебеҙ ҙә үткәрәбеҙ. Был йәһәттән Исламдың аудитория менән эшләү тәжрибәһе ҙур. Үҙебеҙҙең психологыбыҙ бар. Партнерҙарыбыҙға, клиенттарыбыҙғамы психологик ярҙам кәрәк икән, ул йәһәт кенә һәр нәмәне үҙ урынына ҡуя һала. Вебинарҙар аша үткәреп, әллә нисә егеткә аяҡҡа баҫырға, үҙ эштәрен асырға ярҙам иттек.

**Ислам:** Тренингтар үткәргәндә шундай ҡыҙыҡ ҡына күҙәтеү яһаным. Тәүҙәрәк беҙ уларҙы бушҡа үткәрергә тырыштыҡ. Инеү бушлай, тип иғлан бирҙекме - аудитория йыя алмайбыҙ, хаҡын яҙҙыңмы - халыҡ килә. Халыҡ буш нәмәне ҡапҡан тип уйлай микән, әллә бушлай йыйҡас, файҙаһы ла булмаҫ, тип ҡурҡамы? Ә беҙ Себерҙә эшләп ҡайтып, аҡсаларын ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөгән егеттәргә ихлас ярҙам итергә теләгәйнек. Эшеңде белеп ойошторғанда Себер аҡсаһын бында ла табып була.

**Ун биш-егерме йылдан үҙегеҙҙе нисек итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

**Илнур:** Бизнес өсөн 15-20 йыл бик күп ваҡыт ул. Хыялдар ҡорорға, әйе, була һәм хыялланырға кәрәк тә, әммә бер эшҡыуар ҙа 15-20 йылдан үҙ бизнесын ни кимәлдә күҙ алдына килтереүе тураһында һөйләп бармай. Сөнки ул арауыҡта ябай эшҡыуарҙан корпорация етәксеһе кимәленә тиклем үҫергә лә йә, йүнәлешеңде алмаштырып, бөтөнләй икенсе эш менән шөғөлләнә башлауың да мөмкин.

**Ислам:** Ун йылға ҡуйған маҡсатыңды бер йылда тормошҡа ашырып, күтәрелеп китеүең дә һәм хатта бөтөнләй аҡсаһыҙ тороп ҡалыуың да ихтимал. Планһыҙ бизнес төҙөп булмай, шул уҡ ваҡытта унда пландарҙы емерә торған ҡаршылыҡтар, көтөлмәгәнлектәр ҙә күп. Бизнестың аныҡ планлаштырылған яҡын киләсәге - 3-5 йыл, 15-20 йыллыҡ арауыҡ - ул хыял. Хыялдарҙан идеялар ярала, идеялар менән алдан уртаҡлашмауың хәйерлерәк.

**Китап яҙһағыҙ, уның исеме нисек буласаҡ?**

**Ислам:** Мин иң тәүҙә мәктәп уҡыусыларына тәғәйенләнгән китап яҙыр инем. Бәлки, уны яҙыр инем, тип әйтеү дөрөҫ тә түгелдер. Мәктәптә, университеттарҙа өйрәнгән предметтарҙың эстәлегенең ҙур өлөшө тормош өсөн ярамһыҙ, шуға күрә мәктәп программаһын иләк аша үткәреп, бөтә предметтарҙың да тормошта һәр кем ҡуллана торған белем-ҡанундарын ғына ҡалдырып, бер китап туплар инем.

**Илнур:** Китап тураһында уйлағаным бар, исеме хаҡында уйлап ҡарағаным булманы. Яҙһам, ул, бәлки, "Эшҡыуар яҙмалары: нимәнән ҡурҡырға ярамай?" тип аталыр ине. Бизнесҡа килергә ниәтләнгән кешеләргә тап шундай китап кәрәк. Ошо китапты уҡып, йәштәр бизнес асыуҙан ҡурҡмаҫҡа, оҙон аҡса эҙләп, Себергә сығып китмәҫкә, ә тыуған ерҙәрендә аҡса эшләргә өйрәнергә тейештәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ә мин мәҡәләмде Илнурҙың уйында йөрөгән китаптың исеме менән атарға булдым. Әйҙә, яҙылһын әле башҡорт эшҡыуарҙарының яҙмалары - өҫтәл китабына әйләнерлек яҙмалар булһын ул, хыял ғына булып ҡалмаһын. Береһе - башлаған эшен мотлаҡ еренә еткерер, икенсеһе - ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр егет. Ҡулығыҙҙан килер ҙә инде, егеттәр?**

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА**
**яҙып алды.**

✓ ***Бер нисә минут ҡына торғандыр, район үҙәге яғынан ҡара йылтыр машина күренде. Ап-аруҡ шәп килгән машина Әсләмгә яҡынайған һайын тиҙлеген кәметкәндән-кәметте, тапҡырына еткәс тә шып туҡтаны.***






Ҡалҡынырға ниәтләнеп Әсләм башын күтәрҙе, тирә-яғына күҙ һирпте. Унан терһәктәренә таянды, күтәрелергә маташты, тик эсе һыҙлауы уны кире ятырға мәжбүр итте. Теге бәндә нык һуҡҡан икән шул, аңғармайыраҡ ҡалды - һин дә мин ҡыҙыҡһынып һорашып торғас һис көтмәгәйне бындай аҫтыртын хәсөттө. Ҡайҙан килеп сыҡты ул бәндә? Артынан күҙәтеп килгәндер инде. Булып үткән ваҡиға тиҙ ҡайтты Әсләмдең иҫенә. Эйе, теге көндө төшөнә кергән әҙәм булды был - шул бит йылым аша һикереп сыҡтым тигәндә, әлеге ише эскә бәреп төшөргәйне. Төшө, ҡабат-ҡабат күргән дауамлы төшө, бөгөн килеп ысынбарлыҡҡа әйләнеп ҡуйҙы. Осраҡлы хәлме, әллә, ысынлап та, уның артынан юллап килгәнме? Тегеләрҙең кешеһе инде. Улай тиһәң, ҡайҙан белеһен ти ул Әсләмдең тап бөгөн район үҙәгенә китеп барыуын? Хәйер, теге эскесе егеттәр, унан килеп көтөүсе ҡарт, һинең ҡайҙа юлланыуыңды беләбеҙ, уны бөтәһе лә белә, тимәнеме ни? Тимәк, уға һуҡҡан бәндә лә уның ҡайҙа һәм ниндәй маҡсат менән китеп барыуын бик яҡшы белгән. Белгән һәм район үҙәгенә барып етмәҫ элек юҡ итергә ниәтләнгән. Сөнки суд була ҡалһа, хөкөм улар файҙаһына булмаясағын бик яҡшы төшөнгән.

Әсләм ыңғыраша-ыңғыраша ҡалҡынды ла ҡурҡыу ҡатыш ғәжәпләнеү менән үҙенә ҡарап торған ҡатындарға текәлде.

- Йә, улым, иҫенә килдеңме? Нишләп былай юл буйында ятаһың әле? - тине оло йәштәрҙәге ҡатын, йәғни өләсәй.

- Машина башынан һирпелеп ҡалдым, - тип яуапланы Әсләм. Баяраҡ ҡолағына салынған һүҙҙе ҡабатланы, меҫкенләнеп, дөрөҫөн һөйләп торғоһо килмәне.

- Ай әттәгенәһе! - тине өләсәй бот сабып. - Шулай иғтибарһыҙ булырға ярамай инде. Йәш тә түгелһең. Имгәнеүең бар ҙа. Машиналар хәҙер шәп йөрөй шул.

Әсләм өндәшмәне. Ризалашып башын ҡаҡты ла тәнен, ҡулбаштарын тотҡоланы, аяҡтарына күҙ һалды. Калуштары юҡ, салбар балаҡтары һыу. Күрәләтә алдашыуынан унайһыҙлыҡ кисерҙе - ҡайҙалыр китеп барған ерҙәренән туҡтаған һәм ярҙам итергә тырышҡан кешеләргә ялғанлап тора. Эш түгел был, әҙәмсә түгел. Хәйер, туҡмап киттеләр тип тә әйтә алмай инде. Хәбәр оҙонға китәсәк, мең һорау бирәсәктәр, әлеге мәлдә уларҙың ҡыҙыҡһыныуы һис кәрәкмәй Әсләмгә. Ваҡыт йәл.

- Ярай, имен-аман булһаң, улым, беҙ ҡуҙғалайыҡ. Юлдағыларҙың юлда булыуы яҡшы. Байтаҡ атлайһы бар әле. Ә һин үҙең атлай алаһыңмы һуң? - Үҙе биргән һорауына яуап та көтмәй хәбәрен дауам итте. - Бына ейәнсәрем килде лә, әсәйем сирләп китте тип үҙҙәренә алып ҡайтып бара.

- Район үҙәгенәме? - Әсләм ҡабаланып һорай һалды.

- Эйе, районда торалар.

- Ошо юл районға барамы?

- Эйе, ошо юл инде, бүтәне юҡ.

- Бынан нисә саҡрым?

- Әллә тағы? Алты-ете генә барҙыр, күберәк булмаһа. Һин дә районға китеп бараһыңмы ни?

- Эйе.

- Атлай алаһыңмы һуң? - өләсәй янынан һораны.

- Алам.

Ябай ғына кейенгән ауыл әбейе менән орсоҡ ейәнсәр ҡуҙғалды. Улар боролмаға инеп юғалғансы Әсләм улар артынан ҡарап торҙо. "Уятыуҙарына" еңел генә ҡалҡынһа ла атлап китеүе ҡыйын ине уға: эсе ауырта, биле һыҙлай. Әллә ҡабырғалары ла һынған? Кире боролорға ла ҡуйырғамы? Улай тиһә, әбей һүҙҙәренә ҡарағанда, ете-һигеҙ саҡрым ара ҡалған. Сәғәт ярым-ике сәғәтлек юл. Нисек тә үтер әле. Ауылына ҡарағанда барыбер ҙә күпкә яҡыныраҡ. Хәйер, нисек атлайһың бит. Әсәһе автобус туҡталышынан ун ике самаһы тигәйне. Әсләм шуның яртыһын ике көн буйы саҡ үтте. Был яғын да ике көн барырға тейеш буламы?

Байтаҡ икеләнеп баҫып торғандан һуң юлын шулай ҙа дауам итергә булды. Урманды үтте, оло юлға төштө. Ауылдар хәҙер, моғайын да, осрамаҫ. Аяҡтары иҫән-һау, зыян килмәгән, атларға була. Һыуһауҙан, асығыуҙан үлмәҫ, тик һаман эсе ебәрмәй.

Һурылып осҡан бер калушын канауҙағы һыу эсенән тапты, икенсеһен, күпме эҙләһә лә, таба алманы һәм аҡһай-туҡһай һыңар аяҡ кейемендә атлап китте.

Китеп бара әкрен генә, уйлап китеп бара. Район үҙәгендәге ул суд бинаһы бер килке Әсләмгә ғүмерҙә лә барып етә алмаҫлыҡ ифрат алыҫ булып тойола башлай. Өсөнсө көн килә, ә һис яҡынаймай, кемдән һораһаң да, шунса-шунса тип яуаплай, тик унан ҡаса ғына һымаҡ. Ул серле, барып тапһаң да керә алмаҫлыҡ төҫлө. Уратып йөрөр ҙә йөрөр, ишеген таба алмай йонсор, тапҡас астыра алмай этләнер. Уның ҡалын ауыр ишектәре тик оло түрәләр, ҙур аҡсалы кешеләр өсөн генә асылыр һымаҡ. Әсләмгә осраған кешеләрҙең юлды белмәүе, ҡарт көтөүсенең, эскесе егеттәрҙең уның ниндәй маҡсат менән китеп барыуын белгәс, эштең уның файҙаһына хәл ителмәйәсәген иҫкәртеүҙәренә ҡарағанда, тап шулай килеп сығыр ҙа. Бына бит бөтөнләй ғәйебе булмаған, һәр хәлдә Әсләм шулай иҫәпләй, арбағыс йылан ауыҙына инеп бара. Юҡҡа сыҡтым, тип икеләнә-икеләнә ниндәйҙер ҡеүәтле көскә ҡаршы тора алмай китеп бара. Ул уны магнит һымаҡ тарта, уйлау һәләтен юғалттыра - әлеге ябырылыуҙа аңды томалау, ҡәҙимге тормоштан айырыу һәләте бар. Ул хәс тә сөңгөл - өйөрөлтөп-өйөрөлтөп һыу төбөнә тартыуын белә.

Ағас тейәгән өс йөк машинаһы, теге көн тап булған телһеҙ урмансылар ташыйҙыр инде, даңғырҙап бер нисә буш машина, бер нисә еңел машина үтте. Әсләм ҡул күтәреп ҡараһа ла, береһе лә туҡтаманы. Өҫтөндәге кейеменә, тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап берәй хәйерсе тип уйлайҙарҙыр. Ә хәйерсенең кеҫәһендә аҡсаһы булмай. Аҡсаһы булмағас нинә алырға? Буштың атаһы үлгән.

Һыуһаны, асыҡты. Берәй шишмә-фәлән осрамаҫмы, тип юл ситенә күҙ һала-һала килһә лә, уныһы ла күренмәне. Ә юл һис ҡыҫҡармаған, киреһенсә алыҫайған, район үҙәге унан хатта ҡаса һымаҡ тойола.

Бына бер мәл артында көләшкән тауыштар ишетелде. Тауыш, Әсләм яй барғанлыҡтан, тиҙ яҡынлашты, йәштәр ни, шәп тә атлайҙыр, һәм бер төркөм ҡыҙ, бер егет уны сираттағы боролмала ҡыуып та етте. Үҙенең ҡиәфәтенән нык уңайһыҙлыҡ кисерҙе Әсләм, үҙен меҫкен байғош итеп тойҙо. Йәштәр, юғары кластарҙа уҡыған балаларҙыр, күп булһа. Һонтор егет ҡыҙҙарҙың бер алдына, бер артына сығып нимәләр һөйләй, ҡыҙҙар тегенең хәбәренән ҡыҙыҡ табып түгелеп көлгән була. Бәхетле саҡтары, бер ниндәй ҙә проблемалары юҡ, суд та кәрәкмәй, кинәнеп көләшәләр, шатлыҡтары эстәренә һыймай. Әсләм урман эсенә кереп ҡалырға уйлағайны ла, өлгөрмәне, егет уны алыҫтан шәйләп:

- Эй, ағай, ҡасма, тартырға бир әле! - тип һөрәнләне.

Әсләм туҡтаны, шунан яй ғына артына боролдо ла:

- Тартмайым, - тине.

- Өләсәйем әйтмешләй, эсең һау булһын, - тип яуапланы егет ишараты дорфа ғына.

Ҡыҙҙар йәнә сырҡылдашты. Нимәнән мәҙәк тапҡандарҙыр, Әсләм аңламаны.

Төркөм Әсләм менән тинләште һәм барыһы ла аҙымдарын әкренәйтеп уға текәлде. Ятһыныу, аңламау, хатта ниндәйҙер ерәнеү саҡтылары бар ине ҡараштарында. Нишләйһең, ҡиәфәте бигүк шәптән түгел шул ҡәҙимге кеше күҙенә.

Төркөм үҙен уҙып, илле-алтмыш аҙым тирәһе китеү менән, буш йөк машинаһы ҡыуып етте лә былар тапҡырына туҡтаны. Барыһы ла кемуҙарҙан шау-гөр килеп машина башына күтәрелде. Әсләм, мин дә эләгәйем әле, тип аҙымдарын ҡыҙыулатып ҡарағайны ла, өлгөрә алманы. Водитель күрмәнеме, күрһә лә күрмәмешкә һалыштымы, әйтеүе ҡыйын, ә йәштәр уны иҫкәртеүҙе ниңәлер кәрәк тапманы.

Төш етте, көн кискә ауышты. Әсләм һаман атлай. Атлауы аҙым һайын әкренәйә бара. Байтаҡ машина үтте, әммә береһе лә туҡтаманы. Уларҙың туҡтамаҫын белгәс, хәҙер артына боролмай ҙа, ҡулын да күтәрмәй, туҡтағандарын да теләмәй Әсләм. Оҙаҡламай етәмдер, етәмдер, тип атлауын белә. Юл барған һайын күтәрелә, текәләнә бара, килә-килә ул яйлап тау рәүешен дә ала башланы. Юлды күтәргәндәр тиһәң, юл ғына түгел, бөтә тирә-яҡ шулай таулы. Таулы һәм ваҡ ылыҫлы урманлы.

Күҙ алдары ҡараңғылана башлаған Әсләм туҡтаны. Саҡ ҡына булһа ла хәл алыу ине ниәте. Бер нисә минут ҡына торғандыр, ҡаршыһында йәғни район үҙәге яғынан, ҡара йылтыр машина күренде. Ап-аруҡ шәп килгән машина Әсләмгә яҡынайған һайын тиҙлеген кәметкәндән-кәметте, тапҡырына еткәс тә шып туҡтаны. Былар кем булыр, ниңә туҡтанылар һуң әле, тип аптырап та, хафаланып та ҡарап көтөп торҙо Әсләм. Әллә берәй таныш-тоношомо? Әммә кабинанан төшөргә ҡабаланманылар, дөм ҡара тәҙрә быялағы аша йөҙҙәре лә күренмәне. Ҡыҙылға ҡаныҡҡан үгеҙ һымаҡ тексәйеп ҡарап ике минут самаһы ғына торғандыр машина. Әсләм дә ни уйларға, ни ҡылырға белмәй ҡаушап тора бирҙе һәм ҡапыл мейеһен ярып башына уй килде: "Был бит теге машина! Тимәк, мине районға ебәрмәҫ өсөн теге йыуан бәндә кире әйләнеп килгән. Тикшереп йөрөй. Ауына барыбер ҙә эләктермәксе. Хәҙер тапата, йәки ата..."

Һәм бына машина ҡуҙғалды ла Әсләм яғына боролдо, боролдо һәм тиҙлеген ҡапыл арттырып бар көсөнә Әсләмде төкөнө. Бер ни аңларға өлгөрмәгән Әсләм юл ситенә осто...

Машина артҡа сигенде, унан шыйылдығы сығып урынында тигәндәй район яғына ҡарап, боролоп ултырҙы, кабинанан ҡурҡаҡ хәрәкәтле, бесәй һымаҡ йомшаҡ баҫып, тоҡос ҡына кәүҙәле кеше сыҡты ла Әсләм янына килде. Ҡурҡа-ҡурҡа ғына уның йәнһеҙ кәүҙәһенә ҡарап торҙо, аяҡ осо менән этеп ҡараны, шунан ҡабаланып машинаһына инеп ултырҙы.

Быуар йыландай йыуан ҡара тәгәрмәстәр аҫтынан ваҡ ҡомташ атылып, туҙан ғына аҫылынып ҡалды...

**(Аҙағы. Башы 46-сы һанда).**

*ХӘТЕРҘӘ...*

# ҠАЙЫН-ШЫРШЫ

**Мин 1941 йылда тыуған бала. Атайым һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡас, Таштуғай ауылында йәшәнек, шунан уны бәләкәй генә Суҡраҡ ауылына колхоз рәйесе итеп ебәрҙеләр. Хәҙер ул ауыл юҡ. Әсәйем - уҡытыусы, атайым - рәйес.**

Бала саҡтағы иң беренсе Яңы йылды ҡаршы алғаным хәтерҙә һаман. Суҡраҡҡа күсеп килгәс, мин беренсе класҡа уҡырға төштөм. Мәктәбебеҙ бер бүлмәле өйҙә урынлашҡан. Ике класс иртәнсәк шөғөлләнһә, ике класс төштән һуң уҡый. Яңы йыл алдынан өлкәндәр урмандан ҡуйы ботаҡлы ҡайын ағасы ҡиҫеп алып килделәр. Аптырарға түгел, беҙҙең ялан яғында шыршы-фәлән үҫмәй. Уны күргәнебеҙ ҙә юҡ. Ҡайын-шыршыбыҙҙың өҫтөнә йондоҙ яһап ҡуйҙыҡ. Уйынсыҡтарҙың бөтәһе лә тик ҡағыҙҙан ғына ине. Һаламды ҡырҡып, энә менән епкә теҙҙек, ҡағыҙҙы дүрткел генә итеп ҡырҡып, шулар менән аралаштырып, ботаҡтарға элдек. Флаг яһаныҡ. Арыу ғына килеп сыҡты. Ул ваҡытта электр уты тигән нәмә юҡ бит инде. Әсәйем картуфтың эсен соҡоп, уға кәрәсин ҡойоп, ут тоҡандырҙы. Ул ут беҙҙең ҡайын-шыршыбыҙҙы яҡтыртты. Инде ҡыуанып уйнаныҡ. Һуғыш йылдарында тыуған балалар ул тылсымлы көндө яҡты хәтирә итеп ғүмерҙәре буйы һаҡлағандар, тием. Һәр хәлдә, үҙем ул байрамды бер ҙә генә онота алмайым. Яңы йыл тип һүҙ башлаһалар, иң тәүҙә Суҡраҡтағы ҡайын- шыршыны һәм шат йылмайған балаларҙы күҙ алдыма килтерәм.

**Рушан ҠӘЙҮПОВА, хеҙмәт ветераны.**

**Хәйбулла районы Сәғит ауылы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ӘҘЕРҺЕГЕҘМЕ БАЙРАМҒА?

■ Психотерапевт Владимир Шкурко Яңы йыл байрамына әҙерләнгәндә нимәгә иғтибар итергә кәрәклеге тураһында кәңәштәр биргән. Әгәр ҙә был төндә күмәкләп ҡаршыларға ниәтләнәһегеҙ икән, әҙерлек эштәрен йорт хужабикәһенә генә ҡалдырырға ярамай, ти ул. Кемдер бүлмәне биҙәһен, кемдер ашарға әҙерләһен. Ресторандан әҙер ризыҡ алыу мөмкинлеген дә инҡар итергә кәрәкмәй, тигән ҡараште белгес. Ошо яҡ мәшәҡәттәрҙән тыш, күптәр барлыҡ йыйылған эштәрен тамамлап, уларҙы иҫке йылда ҡалдырырға теләй. Был иһә яҡшы фекер түгел, сөнки былай ҙа байрам алдынан кеше стресс кисерә. Шуға ла ҡайһы бер эштәрҙең ғинуарға ҡалыуында бер зыян да юҡ.

■ Яраткан күлдәгемде кейәм тип, байрам алдынан диетаға ултырыуҙың сәләмәтлек өсөн зыяны күберәк, ти диетолог, Туҡланыу һәм биотехнологиялар тикшереnеү үҙәге белгесе Татьяна Залетова. Был теләк күптәрҙә тап яңы йыл алдынан барлыҡҡа килә, ти ул. Башта ашауҙан тыйылып, байрам мәлендә майлы ризыҡтар ашауҙан организм стресс кисерәсәк. Быны урынына тоҙҙан һәм тоҙло ризыҡтарҙан баш тартығыҙ. Шулай уҡ һыуҙы күберәк эсергә кәрәк, был осраҡта организм таҙарына, артыҡ шыйыҡлыҡтан ҡотола.

■ Коронавирус барлыҡҡа килгәндән һуң һәр кеше нисек итеп оҙайлы ауырырға мөмкин булыуын үҙ миҫалында күрҙе. Сирҙең билдәре бөтөп, һауыҡҡандан һуң да айҙар буйына быуындар һыҙлауы, башҡа күңелһеҙлектәр күптәрҙе борсой. Баҡтиһәң, ковид ҡына үҙен улай оҙайлы белдермәй. Шул уҡ киҙеү ҙә шулай икән. Быға тиклем беҙ вируслы сирҙәрҙе, шул иҫәптән, киҙеүҙе лә өс көндә үтә торған тип ҡараныҡ. Эпидемиологтар 2020 йылдың мартынан 2022 йылдың июненә тиклем коронавирус һәм 2015 йылдың октябренән 2019 йылдың февраленә тиклем киҙеү менән дауаханаға эләккән 81 мең кешенең ауырыу тарихын өйрәнгән. Һөҙөмтәлә, ике осраҡта ла 18 айҙан һуң ла уларҙың сәләмәтлек торошы бер тигеҙ булып сыҡҡан. Шулай ҙа ковид ҡурҡынысыраҡ сир, тип билдәләй табиптар, сөнки унда үлем осраҡтары күберәк. Шулай уҡ ковид ваҡытында 94 мөмкин булған симптом һәм хәл торошонең 64-е теркәлгән, ә киҙеү 6 ҡатмарлыҡҡа ғына килтерә ала: стенокардия, тахикардия, беренсе типтағы диабет, йүткереү, ҡанда кислород кимәленең түбәнәйеүе, тын ҡыҫылыу. Ике сирҙе лә берләштереүсе уртаҡлыҡ иһә - бар билдәләрҙең дә сирле һауығып, бер ай үткәс башланыуы.

■ Байрамдарҙың кире яғы ла бар. Табиптар уларҙың иң хәүефләренең исемлеген төҙөгән. Тәүге урында петардалар һәм бенгаль уттарынан алынған йәрәхәт һәм яныуҙар тора. Был осраҡта йәрәхәтләнгән урынды һалҡын һыу менән йыуырға, бит зыянланған икән, һыуыҡ компресс ҡуйырға кәңәш итәлә. Аяҡ-ҡул һындырыуҙарҙың ҙур осрағы ла тап байрамдарға тура килә. Шулай уҡ тағы ла бер ауырыу - ныҡ байрам итеп ташлау һөҙөмтәһендә йөрәк эшмәкәрлегендә тайпылыштар күҙәтелергә, уларҙың хатта үлемгә килтереүе ихтимал. Шулай уҡ ҡаты һыуыҡтарҙа ҡулдарын, аяҡтарын туңдырыусылар ҙа байтаҡ икән. Һәм, әлбиттә, күптәр байрамдың бер элементы тип күҙ алдына килтергән спиртлы эсемлектәр менән дә ағыуланыусылар иҫәбе был көндәрҙә бермә-бер арта.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҠУЯН ҺЫМАҠ СОС БУЛАЙЫҠ!

**Тормош шулай ҡоролған, ул бер урында тормай. Үҙ ағышы менән һаман алға бара. Бына әле генә беҙ ҡуян йылына аяҡ баҫҡайныҡ. Йыл башында оҙон һымаҡ ине ул. Әммә ул, баҡтиһәң, үтеп тә бара икән. Уның һыуыҡ ҡышы, йылы яҙы, көтөп алған йылы йәйе, ямғырлы көҙө ней арала үтеп өлгөргәндер инде. Хәҙер беҙ ҡуян йылын оҙатырға тип мәж килеп йөрөйбөҙ. Мәйтәм, шуныһы һәйбәт, ҡуян йылы үтә. Әммә уның ҡуяны барыбер беҙҙең менән бергә ҡала. Шуға, әйҙәгеҙ әле, урман һәм даланың биҙәге булған ошо йомшаҡҡай менән яҡынданыраҡ танышайыҡ.**



Бына ул беҙгә оҙон ҡолаҡтарын тәненә һылаштыра биреп, ҙур түңәрәк күҙҙәрен төбәп, оҙон алғы тәпәйҙәрендә бер аҙ ҡалҡына биреп, йә сүгәләй төшөп, ипле генә үлән көйшәп ултыра. Ҡарамаҡҡа ябай ғына бер йән эйәһе ул ҡуян. Унан ниндәйҙер тыныслыҡ килгән һымаҡ. Әйткәндәй, заманында ҡуян күп ата-әсәне оло бәләнән ҡотҡарҙы ла инде. Мине Яңы йылға кейендерегеҙ, мине кем итеп кейендерәһегеҙ, мине ҡасан кейендерә башлайһығыҙ, тип маҙаға тейгән кескәй балаһын күптәр ҡуян итеп кейендереп ебәреп ҡотолор ине. Ысынлап та, ҡуян итеп кейендереүе еңел шул. Берәй аҡ күлдәкте кейҙерһәң, уныһы аҡ тун була. Ошо аҡ "тунға" бәләкәй генә "койроҡ" тегеп ҡуйһаң, кейем эше тамамланып та ҡуя. Хәҙер төп эшкә, йәғни, ҡолаҡ эшләүгә тотонаһың. Уны эшләүе лә артыҡ ауыр түгел. Берәй ҡатырғаны килешле генә итеп ҡырҡаһың. Бында уның матурлығына артыҡ иғтибар итмәйһен. Ҡыйыш-мыйыш булһа ла, артыҡ зарар юҡ. Сөнки ҡуяндың ҡолағы тап шулай булыуы бик мөмкин. Иң мөһиме, оҙон булһын. Бына ошо ҡолаҡтарҙы баш кейеменә тегеп ҡуйыу бер аҙ ауырлыҡ килтерә былай. Ҡолаҡтар йә алға, йә артҡа ҡолап аптырата. Берәй нисек артҡа ҡоламалы итеп самалайһың инде. Аҙаҡ баланың битенә арҡыс-торҡос бер нисә "мыйыҡ" һыҙып ҡуяһың. Ошоноң менән ҡуян кейеме әҙер ҙә була. Шуныһы шәп, ҡуяндың кейеме генә түгел, уның шиғыры ла әҙер. Ошо ябай, әммә һәр ваҡыт ҡул аҫтында булған, шул уҡ ваҡытта күңелгә ятышлы шиғырҙы әллә нисәмә бала әллә нисәмә Ҡыш бабайға һөйләгәндер инде.

Ҡыш бабай менән ҡуян
Икеһе лә аҡ ҡына.
Ҡыш бабай ҡурҡаҡ
түгел,
Ҡуян ҡурҡаҡ саҡ ҡына.
Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян,
Беҙгә ҡунаҡҡа килгән,
Ҡойроғо ҡыҫҡаҡ ҡына,
Ҡолағы ергә тейгән.

Беҙҙе Яңы йыл кисәһендә ҡыуандырған ҡуяндың тормошо ошолайыраҡ. Әлбиттә, тәбиғәттә көн иткәненең йәшәйеше күпкә ҡатмарлы. Сөнки унда ҡуяндың дошмандары үтә күп. Уны урман-дала буйлап та баҫтыралар, һауанан да һөжүм итәләр. Бына, әйтәйек, һеләүһен ҡуянһыҙ йәшәй алмай. Уның төп аҙығы булып ҡуян ите иҫәпләнә. Шуға ҡуянға һәр ваҡыт сос һәм уяу булырға тура килә. Ерҙәге дошмандарға ҡарағанда һауанан һөжүм итеүселәр күпкә ҡурҡынысыраҡ, бугай. Яланда уны бөркөт аулаһа, урманда өкө аптырата. Уның ҡараууы, ҡуяндың аяҡтары көслө. Ҡасып барған мәлдә өҫтәмә рәүештә күҙҙәр ярҙамға килә. Эш шунда, ҡуян алға ҡарай саба, ә шул уҡ ваҡытта алға ғына түгел, артҡа ла ҡарай ала. Был мәлдә ул башын артҡа бормай. Аллаһы Тәғәлә уға бына ошондай хикмәтле күҙҙәр биргән. Улар баштың сикә

ХӘТЕРҘӘ...

# АЛДЫН АРТҠА...

**Күңелдә ниндәйҙер өмөт, шатлыҡ осҡондары уятып, Яңы йыл яҡынлаша. Күптәр уны ҡайҙа, нисек ҡаршылау тураһында әллә күпме пландар ҙа ҡороп ҡуйғандыр инде. Бигерәк тә ҡатын - ҡыҙ халҡы Яңы йылды ҡаршылағанда ниндәй күлдәк кейерен хәстәрләй башлағандыр, тием. Йәшерәк саҡта беҙ ҙә шулай итә торғайныҡ. Ни тиһәң дә, Яңы йылды ҡаршылағанда ниндәй ҙә булһа яңы кейем кейергә кәрәк - Яңы йылды ниндәй кәйеф менән ҡаршылайһың, йыл буйына шундай кәйефтә буласаҡһың, тигән һымаҡ төрлө уйҙырмаларға ла ҡолаҡ һалған булаһың бит инде.**

Әйткәндәй, 90-сы йылдар башында бергә эшләгән бер коллегамдың, Яңы йылда кейергә күлдәк алырға аҡса булмағас, исмаһам, яңы рейтуз булһа ла кейеп ултырайым, тип, бер нәмәкәй алдым әле, тип көлдөргәне хәтерҙә. Был хәтирә үҙе генә лә Яңы йылға яңы кейем алып кейеү мәсьәләһе бөтә замандарҙа ла актуаль булыуы тураһында һөйләй.

Етмешенсе йылдар башында күрше районға барған саҡта шундай лаҡап (булған хәл) һөйләгәйнеләр. Имеш, ирле-ҡатынлы берәүҙәрҙең икеһе лә ныҡ дәртле, һәләтле була: ире теттереп гармунда уйнаһа, ҡатыны бик оҫта бейей, өҫтәүенә, икәүләшеп тамаҡ әйттерергә лә аптырап тормайҙар икән. Шундай дәртле булғас, төрлө ҡунаҡ-фәләң, туй-муйҙарҙың гел уртаһында икән былар. Улай ҡунаҡ - төшөмгә үтә йыш йөрөү ҡыйшыға алып бармай бит инде ул - былар икәүләшеп һәйбәт кенә итеп "тамаҡ сылатып алырға" өйрәнеп киткәндәр. Шулай йөрөй торғас, донъяларының да ҡото китә башлаған, өҫбаштарына кейгән әйберҙәре лә ҡойолланған. Быларҙы белә, күрә йөрөгән ҡатыны иренә: "Ҡуй, етәр, ҡабат йөрөмәйек әле шул ҡунаҡ - төшөмгә, кешенән оят табаһа ошо иҫке кейемдәр менән кеше араһында йөрөүе", - тиһә лә, гармунсы ире өйрәнгән ғәҙәтен ташлай алмаған. Әгәр уларҙы ҡунаҡ, туй-муйға саҡырмаһалар, гармунын алып, ҡунаҡ барған йортҡа үҙе киткән.

Бер ваҡыт шулай был ир тағы ла бер ҡунаҡ саҡырылған йортҡа киткән, ә ҡатыны "Мин бармайым, күлдәгемдән оялам", тип ултырып ҡалған, ти. Ҡалыуын ҡалған да бит, әммә һәр кемдә лә йөрәк бар бит инде: "Нишләп бабай рәхәтләнеп ҡунаҡ булып йөрөгән саҡта, мин өйҙә ултырам әле? Пастуй, бабай! Күрмәгәнеңде күрһәтәйем әле мин һиңә", - тип уйлаған ул һәм теге ҡунаҡ барған йортҡа киткән, ти. Ә ундаааа! Ундамы? Ире теттереп гармунда уйнай, башҡалар дыу теттереп бейей икән! Сыҙамаған был бисә лә - уртаға бейергә төшөп киткән! Ҡатынын күреп, тәүҙә бер аҙ аптырап ҡалған ире, бисәһенең алдына барып баҫып тороп, көй ыңғайына таҡмаҡ әйтә икән:

- Һин дә килдеңме әле, ҡатын?
- Һин дә килдеңме ни, ҡатын?

Ҡатыны зыр килтереп әйләнөп бейегән арала иренә яуап бирә икән:

- Мин дә килдем әле, ҡартым!
- Килеү юлын таптым, ҡартым!

Ире быға ҡаршы:

- Күлдәгеңде ҡайҙан алдың?
- Яңы күлдәк ҡайҙан алдың? - ти икән.

Һуҙға бөткән ҡатыны бер ҙә аптырап тормай ғына:

- Алдын артҡа кейҙем, ҡартым!
- Алдын артҡа кейҙем ҡартым! - тимәһенме!

Бына шундай бер хәлде һөйләгән инеләр ҡасандыр. Хәҙер ул лаҡапты ишеткәнгә лә ярты быуаттан ашыу ғүмер ваҡыт үтеп китте инде. Яңыраҡ шул лаҡап иҫкә төшөп, әлеге ваҡытта бергә эшләгән ҡыҙҙарға һөйләп алдым да иҫкә төшкәндә һорай ҡуйҙым:

- Әйткәндәй, һеҙ Яңы йылда кейергә күлдәк алдығыҙмы ул, ҡыҙҙар?

Береһе шунда уҡ яуабын да тапты:

- Ә нимәгә ул яңы күлдәк? Элекке күлдәктәребеҙҙең артын алға әйләндереп кейеп барырбыҙ әле...

Мин дә шулай уйлайым. Ә һеҙ?..

**Ғәҙилә БУЛӘКОВА.**

өлөшөндә урынлашҡан һәм бер аҙ алғараҡ сығып тора. Шуға күрә ул тирәяҡты һәйбәт күрә. Әммә уның күҙҙәре ҡылый түгел. Ошо күҙҙәр арҡаһында ҡуян дошмандың хәл иткес һөжүмен ваҡытында күреп өлгөрә. Шул мәлдә ул ҡырҡа ситкә һикерә. Дошман буш ергә барып төшә, ә ҡуян тағы алға табан ынтыла. Ҡуянды күп ваҡыт көслө аяҡтары ҡотҡара. Ҡасып ҡотолорлоҡ булмаған осраҡта ҡуян ҡапыл баштүбән тәкмәсләп китә. Һәм артҡы тәпәйенең урынлашҡан тырнаҡтары менән дошманын һиҙелерлек, хатта үлемесле яралап өлгөрә.

Башҡа ҡыр хайуандары һымаҡ, ҡуян да бик шәп саба. Тиҙлеге сәғәтенә илле, хатта алтмыш км-ға барып етә. Шуға күрә уны күп дошмандары тура юлда ҡыуып етә алмай. Һунар этенең генә ҡыуып етеүе ихтимал. Шуға күп дошмандары ҡуянды боҫоп ултырып аңдып тотоп ала. Әммә тәбиғәт ҡуянға өҫтәмә рәүештә оҙон ҡолаҡтар биргән. Уларҙы ул ҡайсылатып, һәр шикле тауышты тикшереп кенә тора. Шуныһы аптырамалы, берәй ҡурҡыныс килә ҡалһа, ҡуян алғы тәпәйҙәре менән барабан һуҡҡандағы һымаҡ тауыш сығарып, башҡаларҙы иҫкәртә һала. Кемдер, был осраҡта ҡуян ике "ҡулын" бер-береһенә һуға, тип аңлата. Кемдер, йә түмгәккә, йә ағас олононa һуға, тей. Шәхсән мин күргәнем булманы. Ә бына ишетергә насип итте. Күптәр ҡуяндың бындай һәләте бар икәнен белмәй. Шуға күрә, был ваҡытта кем урманда барабан һуғып йөрөй икән, тип аптырап ҡала. Шуныһы үкенесле, башҡаларҙы иҫкәртеп өлгөргән ҡуян күп ваҡыт үҙе һәләк була. Уны дошманы тотоп ала.

Күптәр белә, тәбиғәттә һәр йән эйәһенең үҙ ере, үҙ мөйөшө була. Бында ул йәшәй, йоҡлай, туҡлана, ял итә һәм башҡаһы. Ҡуяндың үҙ ер майҙаны илле гектар самаһы тәшкил итә. Бында ул ял итер өсөн уңайлы ышыҡ урын рәтләп ала. Ул ҡуйы үлән араһында, яр битләүендә, берәй ҡалҡыулыраҡ ерҙә урынлашҡан була. Шуныһы ҡыҙыҡ, ниндәй генә ҡурҡыныс янауға ҡарамаҫтан, ҡуян үҙ мөйөшөн ташламай. Берәй һунарсынан ҡотолоп ҡалған хәлдә лә аҙаҡ барыбер үҙ өйөнә ҡайта. Был осраҡта баш ағы һәр ваҡыт сабып килгән яҡҡа йүнәлгән була. Бына ошо ял иткән мәләндә тир биҙҙәре бик аҙ генә бүленә. Йәғни, ҡуян ятҡан ерҙән әллә ни еҫ-фәлән килмәй. Шуға уны дошмандары ҡапылғара таба алмай. Ә бына сабып йөрөгән мәлдә ошо тир биҙҙәре дошман файҙаһына эшләй башлай. Эш шунда, тир биҙҙәре бармаҡтар араһында урынлашҡан. Ә тир еҫе бик көслө. Тороп ҡалған эҙҙә ул бик оҙаҡ һаҡлана. Ғалимдар әйтеүенсә, һунар эте был еҫте һигеҙ сәғәт ваҡыт үткәндән һуң да тоя ала. Әммә был еттешһеҙлек тураһында ҡуян үҙе лә белә. Шуға күрә ул тегеләй-былай сабып йөрөп, эҙ бутай. Тәүлегенә ике-өс саҡрым тегеләй-былай саба ул. Үҙ эҙен әллә нисәмә тапҡыр тегеләй-былай киҫеп үтеп, дошманын тамам аңышыштыра.

Кеше лә ҡуянға һәр ваҡыт әүҙем һунар итә. Тәү ҡарамаҡҡа, дошмандары күп һанлы булыу сәбәпле, ҡуян һаны кәмеп китер һымаҡ. Әммә тәбиғәт уның һанын кәметмәй. Эш шунда: ҡуян йыл әйләнәһенә өс тапҡыр бала таба. Тәүгеләре март айында тыуа. Улар ҡар ҡуянҡайҙары тип атала. Икенселәре иһә йәй осоронда тыуа. Былары йәшел үлән ҡуяндары тип исемләнә. Көҙгә табан тағы берҙе бәпеслэй ҡуян. Былары иһә һары япраҡлылар исемен алған. Инә ҡуяндың дүрттән алып һигеҙгә тиклем бәпәйе була. Бер бәпәй ҡуяндың ауырлығы ни бары йөҙ грамм самаһы була. Бына ошо ҡуянҡай ҡуҙғалмай ултырып ҡына үҙ ғүмерен һаҡлай ала. Тәүлек әйләнәһенә әсәһен шым ғына көтә ул. Хатта берәй дошманы эргәһенән үтеп киткән мәлдә лә ҡасмай. Әсәһе төнөн бер-ике мәртәбә килеп, уны имеҙеп китә. Күп осраҡта уныһы үҙ әсәһе булмауы ла бар. Сама менән ун көндән һуң йәш ҡуянҡай үлән ашай башлай. Ә шулай ҙа бер айға хәтлем барыбер әсә һөтө төп аҙыҡ булып ҡала. Бер айҙан һуң ошо ҡуянҡайҙың хәүеф-мажараларҙан торған ҡыҙаллы тормошо башланып китә. Ҡышты уңышлы үткәргәндәр оло ҡуяндар сафын тулыландыра. Бер уйлаһаң, ҡуян ғүмере апаруҡ оҙон ғына. Ул ун йыл самаһы тәшкил итә. Шулай ҙа ниндәй өлөшө ҡартайып, был тормоштан тәбиғи китәләр инде, быныһын тәбиғәт үҙе генә беләләр.

Үҙып барған ҡуян йылына ҡарап, ошондай уйҙар тыуҙы минең башта. Ә шулай ҙа ҡуян тормошонан беҙгә һабаҡ алырлыҡ мәлдәр байтаҡ ҡына. Тәү сиратта, уның һымаҡ сос һәм һаҡ булайыҡ, тигән теләкте әйткем килә. Тормош ниндәй генә һынауҙар биреүгә ҡарамаҫтан, уның ағышында юғалып ҡалмайыҡ. Әлбиттә, йылына өс бала табып булмаҫ. Уның ҡарауы, өс йылға бер бәпәй алып торорға, моғайын, хәлдән килер. Һәр балаға матур ғаиләлә үҫергә насип итһен. Ә үҫкәндәре ата-әсәй ҡурсалауынан ваҡытында айырылып, үҙ мөйөшөн, үҙ ғаиләһен булдырһын. Барыбыҙға ла оло тормош һуҡмағында һағалап торған төрлө һынауҙарға бирешмәйсә, матур йәшәргә насип булһын!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ХӘТЕРҘӘ...

# УТЫҘ ЙЫЛ ЭЛЕК...

**Илһам, дәрт ташып торған йәш саҡта һәр Яңы йыл ҡабатланмаҫ үҙенсәлекле бер байрамға әйләнә бит ул. Дөрөҫөрәге, йәшлек үҙе уны тап шундайға әйләндерә. Яңы йыл кәйефе тыуҙырырға фантазия ла, ынтылыш та етерлек. Минең Өфө сәнғәт училищеһында уҡыған дуҫтарым күп булды (хәйер, улар менән әле лә араларҙы өҙгәнебеҙ юҡ). Буласаҡ артистар Яңы йылды шулай уҡ бер сәхнә күренешенә әйләндерә лә ҡуя торғайны. Осрашҡан һайын бөтә белгән йырҙарҙы бер нисә тауышҡа төрләндереп, әллә нисә сәғәт йырлай инек. Ул үҙенән-үҙе шулай килеп сығыр ине. Алдан бер ниндәй әҙерлекһеҙ йырлаһаҡ та, әйтерһең, профессиональ ансамбль!**

Бая әйткәнемсә, фантазияның иге-сиге юҡ. Эргә-тирәләге кешеләргә генә түгел, бөтөнләй таныш булмағандарға ла байрам кәйефе бүләк итә белә ине минең дуҫтарым. Бер мәл Яңы йыл кисендә ике егетебеҙ тиртундың тиҫкәре яғын әйләндереп кейеп алды ла, ҡумаҡлашып тау шыуырға тип сығып киттек. Беҙ, йәнәш барған ҡыҙҙар, үҙебеҙсә ҡупшы итеп кейенгәнбеҙ. Урам тулы халыҡ, һәр кем егеттәребеҙгә иғтибар итә. Ә улар йырсыға уҡып йөрөгән студенттар. Урыҫса ла, башҡортса ла йырлап ебәрәләр. Беҙ ҙә уларға ҡушылабыҙ. Кем генә эргәнән үтеп китмәһен, һәр береһенең йөҙөндә йылмайыу хасил була. Матур теләктәрен әйтеп киткәндәр ҙә бар. Бына шулай, Яңы йыл төнөндә күптәргә күтәренке кәйеф бүләк иттек.

Икенсе бер онотолмаҫ ваҡиға Совет майҙаны менән бәйле. Беҙ, ошо уҡ айырылмаҫ дуҫтар, Яңы йылды ҡаршылап һуҡҡан мәлдә майҙанда бөтә халыҡ менән ҡаршыларға булдыҡ. Шулай булды ла. Майҙан гөрләп тора. Ҡотлауҙар, йыр-моң - бөтәһе лә сихри, тап Яңы йылдағыса. Аҙаҡтан инде майҙандағы кешеләр әкренләп таралыша башланы. Был юлы Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡып йөрөгән студенттар, шулай уҡ, буласаҡ артистар өсөн киң майҙан хәҙер осталыкты камиллаштырыу мәктәбенә әүерелде. Театр факультетында өйрәнгән "Сцена движения" дәресен ойоштороҙоҡ, йәнәһе. Төрлө хәрәкәт күнекмәләре яһайбыҙ. Шул тиклем образдарға инеп уйнайбыҙ. Сәнғәт менән бәйле кешеләр быны яҡшы белә, хәрәкәт - сәхнәлә йәшәү. "Не верю!" тип ҡысҡырышабыҙ. Кемдәрҙер күрәшсе хәрәкәттәре яһап уйнай башланы. Кемдер киҙәнгән була, берәүҙе ҡолағынан, танауынан һөйрәй, йәнәһе... Һәр хәрәкәттең үҙ сере, ҡағиҙәһе бар, шуны ҡулланабыҙ.

Уйын-көлкө ҡыҙҙы ғына. Бер мәл мигалкаларын балҡытып, сиреналар ҡысҡыртып, майҙанға тәртип һаҡсыларының машинаһы килеп туҡтамаһынмы. Беҙ әле бер нәмә лә аңламайбыҙ. Погондары, бик етди абзыйҙарҙың ҡамауында ҡалғас ҡына, аптырап киттек. Ҡағиҙә булараҡ, ҙур байрамдарҙа һәр саҡ милиция һаҡта тора икән. Полиция (ул саҡта милиция) беҙҙе ситтән ҡүҙәтеп ултырған, ә беҙ ул турала бөтөнләй уйламанаҡ та. Улар шыршы майҙанында буласаҡ артистар сәхнә уйнап йөрөгәнен ҡайҙан белһен инде! Бында ысынлап тороп йәштәр һуғыша тип, йәһәтләп беҙҙе уратып алғандар икән. Инде эштең нимәлә икәнен төшөнгәс, йөҙҙәрендәге ҡәтғилек юйылды, үҙҙәре лә йылмая, хатта көлә башланы.

- Ну-у-у, һеҙ, әртистә-ә-әр, - тип байрам менән ҡотлап, изге теләктәр теләп хушлаштыҡ. Совет майҙанында хәрәкәттәр уйынында ҡатнашҡан 80-се йылдар аҙағындағы шул училище-институт студенттары хәҙер, барыһы ла тиерлек, халыҡ артистары. Бәлки, араларында шул мәлде әле лә хәтерләүселәр барҙыр. Эштә лә, ашта ла, байрамда ла улар һәр саҡ иждасы булып ҡалдылар. Ғорурланам шундай дуҫтарым менән. Барығыҙҙы ла Яңы йыл менән!

**Фәнүзә БАҺАУЕТДИНОВА,**

**Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, журналист.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Сексуаль энергияғыҙҙы нисек контролләргә

Секс - Ғаләмдәге иң ҡеүәтле энергия. Һәм уның менән дә, электр генераторҙары менән идара иткән кеүек, идара итергә кәрәк. Мөхәббәт - сексуаль энергияның юғары тирбәлеш кимәлёнә күсеүе һөҙөмтәһе ул. Әммә тәүҙә һеҙгә тәүҙә көслө дәрт тыуырға тейеш. Идеаль дәртләндереү сараһы булып секс тора.

Бер ваҡыт Бурбон Бюссе исемле аҡыл эйәһе: "Яратыу - һәр ваҡыт бер-береңдең күҙенә ҡарап тороу түгел, яратыу - ул бер йүнәлештә ҡарау," - тип юҡҡа әйтмәгән. Әлбиттә, һәр саҡ бер йүнәлештә ҡарау еңел түгел, әммә мөмкин.

## Бишенсе дошман: ғәҙәтилек

Ғәҙәтилек тормошто пыран-заран килтерә. Көн һайын бер үк нәмәнең ҡабатланыуы, хатта ожмах тормошо ла яҡҡыта. Ниндәйҙер үҙгәреш кәрәк. Тормошоғоҙҙо тотороҡло итеү өсөн күп ваҡыт бүләһегеҙ икән, үҙ ҡулығыҙ менән ғәҙәтилек булдыраһығыҙ.

Бер маҡсатығыҙға өлгәшкәс, байлығын һаҡлап ятҡан аждаһаға әйләнмәгеҙ, ә яңы маҡсатығыҙҙы яулай башлағыҙ. Яңы мажаралар тормошоғоҙҙо бәхетле итер. Өйрәнгән урыныгыҙҙы ҡалдырып китергә әҙер булмаһағыҙ, бер ваҡытта ла икенсе тормошто, яңы нәмәләрҙе күрә алмаясаҡһығыҙ. Был тормошта иң мөһиме - маршрут ахыры түгел, ә уға тиклем булған хәрәкәт икәнен аңлаһағыҙ, уңышҡа табан юлда ҙур аҙым яһаясаҡһығыҙ. Бизнесығыҙ лотереяға оҡшамаясаҡ, ә һеҙ тормоштан һәр ваҡыт яңы тәьҫораттар алырһығыҙ, эш-өй маршруты буйлап ҡомаҡ йүгереүендә ҡатнашыуҙан туҡтарһығыҙ. Тормошоғоҙ көн һайын яңы асыштар менән аптыраткан ҙур могжизәләр яланына әйләнер.

## Аллаһҡа ла күңелһеҙ булып китә!

Әгәр бар нәмәгә хәлегеҙҙән килгән, бар нәмәне күргән һәм бар ерҙә лә бер үк ваҡытта була алған көскә эйә булһағыҙ, нимә эшләр инегеҙ? Моғайын, көсөгөҙҙө бушҡа сарыф итмәй уны яңы мажаралар булдырыуға йүнәлтер инегеҙ. Һәр кеше таҙа киндерҙә үҙ эҙен ҡалдырыр өсөн тыуа. Юҡҡа ғына Дипак Чопра : "Аллаһтың тормошон төрләндерегеҙ!" - тимәгән бит.

Әгәр аҙналағы иң яҡшы мәлегеҙ йома кисенә тура килеп, һеҙ диванда ҡырын төшөп телевизор ҡарайһығыҙ икән, тимәк, тормошоғоҙ шул тиклем күңелһеҙ!

Әлбиттә, был фекеремдең хаталы булыуын теләр инем, әммә ваҡытығыҙҙы телесериалдарға әрәм итеп, һеҙ уны ҡыҙыҡлы итә алмайһығыҙ. Телесериалдарҙа насар бер нәмә лә юҡ, ләкин улар һеҙҙең тормошоғоҙҙа берҙән-бер көслө тәьҫорат ҡалдыра ала икән, тимәк, проблема һеҙҙә.

## Ура, минең проблемам тыуҙы!

Ҡасан да булһа шып-шыма, тигеҙ стена буйлап менеп ҡарағаныгыҙ бармы? Бер нисек тә менеп булмай, шулаймы? Шыма стена буйлап менер өсөн ниндәйҙер киртләс йәки уйым булырға тейеш. Стена өсөн "проблема" булһалар ҙа, өҫкә үрләр өсөн улар кәрәк. Һеҙгә, уңышлы үҫеш өсөн, проблемалар менән осрашыу зарур. Ҙурыраҡ проблемаларҙы хәл иткән һайын, тизерәк үрләрһегеҙ.

**Пьер МОРАНСИ.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАЛАЛАР ШАТЛЫҒЫ

**Баш ҡалабыҙҙа ҙур күләмле реконструкциянан һуң тантаналы шарттарҙа Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры асылды. Тантанаға килгәндәрҙе тәүҙә Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу ҡотланы, шунан һуң БР Башлығы Радий Хәбиров театр асҡысын Өфө символы булған әкиәт персонажына - һуңарға тапшырҙы.**



Республика етәксеһе яңыртылған театр бинаһын ҡарап сыҡты. Бина бик зауыҡлы итеп биҙәлгән, театрҙың төп холын аҫылмалы люстра яҡтырта, уға "Курсаҡсы ҡулы" тигән атама бирғәндәр. Тамашаларҙы заманса кимәлдә ойоштороу өсөн бар мөмкинлектәр булдырылған: ҡурсаҡтар хәҙер бер генә сәхнәлә түгел, ә бер юлы төрлө бейеклектә ҡоролған 3 сәхнәлә уйнаясаҡ. Ошо яңылыҡ сәхнә мөхитен күләмлерәк итеп күрһәтеп, бәләкәстәр ҡараған тамашаны ҡыҙыҡлыраҡ итәсәк. Ә "Алтын балыҡ" театр кафеһы Александр Пушкин әкиәттәре стилендә биҙәлгән. Ҡурсаҡтар музейы һәм интерактив уйындар бүлмәһе ололарҙа ла, балаларҙа ла берҙәй ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип көтөлә.

Яңыртылған Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрын асыу тантанаһынан һуң Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров журналистарға ошо хаҡта бына ниҙәр әйтте: "Беҙ бөгөн, Яңы йыл көндәре алдынан - балаларыбыҙға, юбилей йылы алдынан Өфөгә яҡшы бүләк тапшырабыҙ. Шундай серле әкиәттәр донъяһын асабыҙ. Ҡурсаҡ театры - күптән көтөлгән объекттарҙың береһе. Аллаға шөкөр, беҙ цирк өсөн дә аҡса таптыҡ, хәҙер ул бюджетҡа һалынған. Бөгөн балаларыбыҙға шәп бүләк эшләйбеҙ, тип иҫәпләйем..."

# ЮҒАЛҒАН ВАҠЫТ АРТЫНАН

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры балалар өсөн"Юғалған ваҡыт артынан..." тип аталған яңы әкиәт тәҡдим итте. Яңы йыл каникулдары тамамланғансы театр башлыһса йәш тамашасы өсөн эшләйәсәк һәм был спектаклдең кесеһен дә, олоһон да уйландырыр, фәһем бирер яҡтары күп кенә.**



"Рус совет яҙыусыһы Евгений Шварцтың был әҫәре нигеҙендә яңыса, заманса әкиәт яҙырға тотоноуҙың төп сәбәбе - был "Юғалған ваҡыт артынан..." тигән әкиәттең нигеҙендә ятҡан фекерҙең һәр заман өсөн дә актуаль булыуы, - ти спектаклдең режиссеры Айҙар Зарипов. - Һәр замандың бала өсөн кире йоғонто яһаған нәмәләре була, хәҙерге йәш быуынға нимә менән ҡыҙыҡһыныуын, уларҙың тормошон һәм ваҡытын нимәләр "урлауын" күрһәтергә тырыштыҡ. Ә һығымтаны, моғайын, улар үҙҙәре яһар".

Ысынлап та, был әкиәттә уйналған уйындар, уйынсыҡтар атамалары өлкәндәрҙең ҡолағына ят булһа ла, балалар өсөн бик яҡшы таныш. Һис шикһеҙ, улар унда үҙҙәрен дә таныны. Тамаша башланғансы тиҫтерҙәре фойела Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу, төрлө әкиәт геройҙары менән шыршы тирәләй әйлән-бәйлән уйнағансы, бер малай телефонын стенаға терәп ҡуйып, экран алдында ҡыланып бейеп, үҙен видеоға төшөргәнен күптәр йылмайып күҙәткәйне. Сәхнәләге ҡыланыштары тап ошо малайға оҡшаған геройҙы күреп, ирекһеҙҙән тағы бер йылмайып ҡуйғандыр улар барыһы ла. Һәр хәлдә, режиссерҙың һәм ҙур ижади төркөмдөң үҙ маҡсатына ирешеүе тураһында ла һөйләй был.

Мең тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр күр, ти халыҡ. Яңы йыл каникулдарын күңел асып ҡына уҙғармағыҙ, уйландырған, бөгөнгө ҡылыҡтарыбыҙға ситтән ҡарарға мөмкинлек биргән был әкиәтте барып күрегеҙ.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

# ЭТНО-АУЫЛҒА...

**Өфө үҙәгендә этно-ауыл асылды. Был уникаль комплекс Мостай Кәрим һәм Чернышевский урамдары сатында урынлашҡан.**



Этно-ауыл Өфө ҡалаһының 450 йыллыҡ юбилейы айҡанлы төҙөлгән: бында килеүселәр иғтибарына башҡорт тирмәләре, "Башҡорт сәйе"арт-объекты һәм нур композициялары тәҡдим ителә. Тирмәләрҙә Башҡортостан етештереүселәренең һәм һөнәрмәндәренең йыйылма эспозициялары ҡуйылған. Бер тирмәлә башҡорт милли ҡамыр аштары менән сәй эсеп сығырға ла була. Этно-ауыл һөнәрселәр йәрминкәһе сифатында даими эшләйәсәк, бында оҫта һөнәрмәндәр тарафынан мастер-кластар уҙғарылыуы күҙаллана.

# ҠЫШ БАБАЙ ЙОРТО

**Өфөнөң Ленин майҙанында Бөйөк Устюгтан абруйлы ҡунаҡ - Бөтөн Рәсәй Ҡыш бабайы ҡатнашлығында Ҡыш бабай резиденцияһы асылды.**

Байрам ҡаланың үҙәк шыршыһы янында башланды. Ата-әсәләре менән килгән балаларға Шартлаҡыс-Хлопушка һәм Ҡыңғырау-Колокольчик күңелле уйындар ойоштorҙо. Өфөнөң ете районының Ҡыш бабайҙары, үҙҙәренең ейәнсәрҙәре Ҡарһылыу менән ҡунаҡтарҙы ҡаршы алды. Ә илдең төп Ҡыш бабайы һәммәһен дә яҡынлашып килгән Яңы йыл менән ҡотланы.

Сарала Өфө мэры Ратмир Мәүлиев тә ҡатнашты. Ул киләһе йылда Өфөнөң 450 йыллыҡ юбилейы уңайынан Бөйөк Устюгтан килгән ҡунаҡҡа байрамға саҡырыу ҡағыҙы тапшырҙы. Шунан һуң ул ҡышҡы тылсымсының боҙло таяғы менән шыршының уттарын ҡабыҙҙы. Ошо уҡ майҙанда, "Азимут" ҡунаҡханаһы ҡаршыһында, Ҡыш бабайҙың резиденцияһы асылды. "Һәр кем ҡыш бабайға ҡунаҡҡа килә алһын өсөн беҙ шарттар булдырырға тырыштыҡ. Уңайлы урын, интерактив программалар, эргәлә генә яңы йыл ҡаласығы, байрам сауҙаһы, фотозоналар. Тиҙҙән һәйкәл янында һырғалаҡ эшләй башлайбыҙ", - тине Ратмир Мәүлиев.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Белорет районы** Инйәр ауылынан Флүрә Иҫәнова, **Әбйәлил районы** Аҫҡар ауылынан Самат Хәйруллин, **Ишембай ҡалаһынан** Тәнзилә Мөхәмәтова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Йән-тән сәләмәтлеге, рухи һәм матди байлыҡ, барлыҡ эштәрегеҙҙә уңыштар юлдаш булыуын, яҡындарығыҙ менән бәхетле, оҙон ғүмер итеүегеҙҙе теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2 ғинуар Премьера! "Юғалған ваҡыт артынан..."** (Е. Шварц буйынса), әкиәт. 12.00 6+
**"Мин - Марат"** (У. Ғәлиев, А. Абушахманов инсц.). 18.00 16+
**3-7 ғинуар Премьера! "Юғалған ваҡыт артынан..."** (Е. Шварц буйынса), әкиәт. 11.00, 13.00 6+
**3 ғинуар "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 12+
**4 ғинуар "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+
**5 ғинуар "Ҡыҙ урлау" (М. Кәрим),** комедия. 12+
**6 ғинуар "Бәхет хаҡы" (Х. Мөҙәрисова),** музыкаль мелодрама. 16+
**7 ғинуар "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 12+
**8 ғинуар "Килен" (З. Мусина),** драма. 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 ғинуар Премьера! "Играем Пушкина: Царевна Лебедь"** (А. Пушкин), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"Новогодние приключения Длинноуха" (Л. Исҡужина)**. 13.00 6+
**3 ғинуар "Чиполлино" (Дж. Родари),** мажаралар. 12.00, 14.00 0+
**"Новогодний переворот" (О. Пичурин),** әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**4 ғинуар "Айболит и Бармалей" (К. Чуковский),** мюзикл. 10.00, 12.00 0+
**5 ғинуар "Новый год наоборот" (И. Казакова)**. 10.00, 12.00 0+
**6 ғинуар "Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**7 ғинуар "У ковчега в восемь" (У. Хуб)**. 12.00 6+
**"Килә яуа, килә яуа" (З. Хәким),** комедия. 18.00 16+
**8 ғинуар "Холодное сердце" (В. Гауф),** әкиәт. 12.00 6+
**"Новогодние приключения Длинноуха" (Л. Исҡужина),** әкиәт. 11.00, 13.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**2-4 ғинуар "Волшебные приключения игрушек"** (С. Алферова, Н. Нижегородцева). 12.00, 14.00 0+
**2-4 ғинуар "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова). 12.00, 13.00, 18.00 0+
**5-8 ғинуар "Щелкунчик"** (Ю. Ким). 12.00, 15.00, 18.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2 ғинуар "Главный новогодний утренник Уфы"** 12.00, 14.00, 16.00 0+
**3-7 ғинуар "Главный новогодний утренник Уфы"** 12.00, 14.00 0+
**4 ғинуар "Серле маЖара"** Яңы йыл тамашаһы. 18.00 6+
**5 ғинуар "Башҡортса саундтрек"** концерт. 18.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4 ғинуар Премьера! "Һуғышсы Аждаһа тураһында легенда"** (Р. Ғәйнуллин), әкиәт. 13.00 0+
**5 ғинуар Премьера! "Һуғышсы Аждаһа тураһында легенда"** (Р. Ғәйнуллин), әкиәт. 10.00, 13.00, 15.00 0+
**6-7 ғинуар "Золушка"** (Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**3, 7 ғинуар Премьера! "Карамбули-карамбаба!" - так велит Ягуля-баба"** (Д. Нурғәлин), әкиәт. 12.00 0+
**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 18.00 12+
**4 ғинуар "Приключения Лесного эха"** әкиәт. 12.00 0+
**"Һинән - фатир, минән - ир!"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 18.00 16+
**5 ғинуар "День рождения кота Леопольда"**, әкиәт. 12.00 0+
**"Аҡ кистәр - аҡ хистәр!"** концерт. 18.00 12+
**6 ғинуар "Ай да, репка!"** ҡурсаҡ спектакле. 12.00 0+
**6-7 ғинуар "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин). 18.00 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**2-7 ғинуар Премьера! "Как Петух мир спасал"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 12.00 0+
**3 ғинуар "Катын түгел - аждаһа!"** (Д. Салихов), комедия. 18.00 16+
**4 ғинуар Премьера! "Театр ҡунаҡханаһы"** тамаша. 18.00 6+
**5 ғинуар "Килдең, киттең - хуш байгош"** (М. Задорнов). 18.00 12+
**6 ғинуар "Нисек кейәүгә сығырға?!"** (Н. Ғәйетбаев). 18.00 12+
**7 ғинуар "Онотолған әҙәм"** (Н. Хикмәт), драма. 18.00 12+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (19) дүшәмбе | 7:55 | 9:42 | 13:30 | 15:11 | 16:56 | 18:44 |
| 2 (20) шишәмбе | 7:54 | 9:41 | 13:30 | 15:12 | 16:58 | 18:46 |
| 3 (21) шаршамбы | 7:54 | 9:41 | 13:30 | 15:13 | 16:59 | 18:47 |
| 4 (22) кесе йома | 7:54 | 9:41 | 13:30 | 15:15 | 17:00 | 18:48 |
| 5 (23) йома | 7:54 | 9:40 | 13:30 | 15:16 | 17:01 | 18:49 |
| 6 (24) шәмбе | 7:53 | 9:40 | 13:30 | 15:17 | 17:03 | 18:51 |
| 7 (25) йәкшәмбе | 7:53 | 9:39 | 13:30 | 15:18 | 17:04 | 18:52 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Башҡорттарҙа борон Нардуған һәм Науруз - мәжүсиҙәрҙең ҡояш торошона ҡарап билдәләнгән йола байрамдары үткәрелгән. Тәүгеһе ҡышҡы иң ҡыҫҡа көнгә, икенсеһе яҙғы көн менән төн тигеҙләшкән мәлгә тура килгән.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЯҢЫ ЙЫЛ МЕНӘН!

**Бөтә халыҡтарҙа ла иң мөһим байрамдарҙың береһе - Яңы йыл. Уны билдәләү йолаһы беҙҙең эраға тиклем III меңйыллыкта уҡ Месопотамияла барлыҡҡа килгән.**

Яңы йылды 1 ғинуарҙа билдәләү ғәҙәте беҙҙең эраға тиклем 153-сө йылда барлыҡҡа килә, сөнки тап ошо көндә Рим консулдары вазифаларына тәғәйенләнгән. Ә инде Рим полководецы һәм юғары жрец Гай Юлий Цезарь беҙҙең эраға тиклем 46-сы йылда үҙенең календарын ҡулланылышҡа индереп, ошо йоланы мәңгеләштереп ҡуя. Римлеләр был айҙы бөтә башланғыстарҙың аллаһы Янусҡа бағышлай. Әйткәндәй, ғинуар айының атамаһы тап Янус исеменән барлыҡҡа килгән.

Христиандар йылды яҙғы көн менән төндөң тигеҙлегенән иҫәпләгән. Русь суҡындырылғас һәм Юлиан календары ҡабул ителгәс, йыл башын март айынан йәки изге Пасха көнөнән иҫәпләй башлағандар. 1492 йылда Иван III указы менән 1 марттан 1 сентябргә күсергән. Был көндә һәр кем Кремлгә килеп, батшаға ялыу яҙа алған. Яңы йылды ошо көндә билдәләү йолаһы 1700 йылға тиклем һаҡланған. 1699 йылда Петр I Яңы йылды 1 ғинуарҙан билдәләргә ҡуша, 1700 йылдан Рәсәйҙә шулай итәләр ҙә. Юғарынан төшөрөлгән указ буйынса был көндә салют аттыралар, йорттарҙа конфит һәм прәник менән биҙәлгән шыршылар ҡуялар. Петр вафат булғандан һуң шыршы биҙәү ғәҙәте яйлап онотола һәм тик 1852 йылда ғына Санкт-Петербургта яңынан тергеҙелгән йола буйынса Раштыуа шыршыһы биҙәлә. 1917 йылғы революциянан һуң Рәсәйҙә Раштыуа һәм Яңы йыл байрамдарын билдәләү тыйыла. Был йоланы 1935 йылда балалар байрамы булараҡ яңынан ҡайтаралар: Союздар йортонон Колонналар залында беренсе совет шыршыһы ҡуйыла.

Башҡорттарҙа борон Нардуған һәм Науруз - мәжүсиҙәрҙең ҡояш торошона ҡарап билдәләнгән йола байрамдары үткәрелгән. Тәүгеһе ҡышҡы иң ҡыҫҡа көнгә, икенсеһе яҙғы көн менән төн тигеҙләшкән мәлгә тура килгән. Ә инде Ислам динендә яңы йыл Мөхәррәм айының беренсе көнөнән башлап иҫәпләнә, әммә байрам итеп билдәләнмәй. Бөгөн беҙ яратып ҡаршы алған Яңы йыл байрамы бер быуат тирәһе арауыҡ эсендә ғәҙәтебеҙгә ингәндәрҙән. Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу ҙа шул осорҙараҡ барлыҡҡа килгән. Шулай ҙа Ҡыш бабайҙың Селлә бабай, йәки Һыуыҡ бабай тигән боронғораҡ "прототиптары" булған халыҡбыҙҙа. Мөсәлдәргә ярашлы, Аждаһа хакимлыҡ итәсәк килеһе йылды изге ниәттәр менән ҡаршы алырға һәм именлектә үткәрергә яҙһын!




*Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.*

**50-се һандағы сканворд яуаптары.**
**Горизонталь буйынса:** Ҡамҡа. Бикбаев. Дауахана. Сама. Тәүбә. Жанр. Европа. Янут. Детонатор. Ашуғ. Алма. Еҙем. Тоҙ. Ул. Мина. Аббат. Абыз. Ржев. Токио. Азат. Аҡса.
**Вертикаль буйынса:** Туңдырма. Дәүләтшин. Әфәнде. Бура. Байтал. Хужа. Анкара. Мазут. Яра. Оҫта. Айран. Банк. Амеба. Үс. Сәйетбатталов. Айҙар. Алло. Буранғолов.

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

# НИСЕК ҠАРШЫ АЛҒАНДАР?

**Ижад кешеләренең эше уңышы илһамғадәрткә бәйле, ә быны инде яҡшы кәйеф кенә бирә ала. Яңы йылда алынған матур бүләктәр, яҙыусымы, шағирмы, музыкантмы, һәр береһен ниндәйҙер кимәлдә яңы әҫәр тыуҙырырға рухландырған. Мәҫәлән, классик яҙыусыларҙың Яңы йыл байрамын нисек ҡаршылауҙары тураһында ошондай хәтирәләр бар. Күҙ һалайыҡ.**

**Пушкиндың** бәләкәй генә сағында, 1800 йылдың 31 декабрендә, булаcаҡ шағирҙың яҙмышын алдан хәбәр иткән һымаҡ бик ҡыҙыҡ бер хәл була. Инде бүләктәрен ҡулға алған бәләкәй балаларҙың бөтәһе лә тиерлек төнгә ун икеләрҙә, ғәҙәттә, әүен баҙарына китә. Был юлы ла шулай, бәләкәй Саша ҡүптән йоҡоға талған, ләкин төнгө ун ике тула тигәндә ул уянып китә. Һикереп тора ла, ата-әсәһе янына йүгәлә. Тап ошо төндә кешелек яңы йөҙ йыллыҡҡа аяҡ баҫа, шуға, өйҙә ҡунаҡтар, бөтәһе бергәләшеп, яңы быуатты ҡаршы алырға әҙерләнә. Ошо мәлдә байрам бүлмәһенә Пушкин килеп инә, артынса уҡ уны бағыусы инәһе лә йүгереп килеп етә. Ләкин зирәк әсә бағыусыға борсолмаҫҡа ҡуша. Ул балаһын ҡулына ала ла ҡунаҡтарға шулай тип өндәшә:

- Бына ул яңы быуат тупһаһы аша атлап үтеүсе! Бына кем унда йәшәйәсәк!

Фәрештәләрҙең "Амин" тигән сағына тура килгәндер. Ошо яңы йыл төнөндә Саша ҡунаҡ бүлмәһе тупһаһы аша ғына атлап үтмәй, ә ун туғыҙынсы быуатҡа барып ингән беренсе кеше лә була. Йылдар үтеү менән ул Ер шарының иң танылған кешеләренең береһенә әйләнә. Барлыҡ кешелек менән Пушкин ун туғыҙынсы быуаттан егерменсе быуатҡа һәм артабан егерме беренсе быуатҡа килеп инде.

**Михаил Афанасьевич Булгаков** ҡатыны Елена менән һәр Яңы йылда шыршы төбөнә бүләк һалғандар, утты һүндереп май шәм яҡҡандар. Шунан инде марш тауышына балалар йүгерешеп бүлмәгә килеп ингәндәр. Яңы йылдың иң ҙур бүләге - Михаил Булгаков яҙған спектаклдә уйнау. Унда автор һәм ҡатыны Елена төп ролдәрҙә башҡара торған булған. Шундай байрамдарҙың береһендә Булгаков бик-бик әкәмәт кейенеп сыға: "тәрәсиктә генә, өҫтөнә Сергейҙың (Еленаның улы) бәлтәһен кейгән, уныһы биленән генә, башына матроска ураған". Сәхнә уйнағандан һуң, ғаиләлә билмән ашайҙар һәм тәм-том таратыла. Йәнә лә Булгаковтар үтеп барған йылдың һандары яҙылған сынаяҡты махсус һатып алыр булғандар, уны Яңы йыл һуҡҡас, "Бәхетҡә!" тип бәреп ватҡандар.

**Михаил Шолоховтың** ғаиләһе лә Яңы йылды ҡаршыларға ныҡ яратҡан. Һуғыш йылдарында ла, эвакуацияла сағында ла улар был байрамды мотлаҡ билдәләгән. Үҙенең, шулай уҡ күрше-күләндең балалары өсөн яҙыусы Мәскәүҙән алып килгән шыршы һәм уйынсыҡтар ярҙамында ысын әкиәт байрамы яһар булған. Унда бәләкәй ҡунаҡтарға бер шартты үтәү мотлаҡ булған - улар барыһы ла Яңы йылға арналған шиғыр уҡырға тейеш булған. Тағы ла шуныһы ҡыҙыҡ, башлыҡ эсенә төрәлгән ҡағыҙ һалғандар, ә ҡағыҙ эсендә һанды яҙылған. Бала-саға сиратлап башлыҡ эсенән ҡағыҙ сығарған һәм ундағы һанды атаған. Ошо уҡ һан шыршылағы уйынсыҡтарға ла беркетелгән. Шолохов уларҙы шыршынан ысҡындырып, балаларға биргән. Уйын аҙағында шыршыла бер генә тәтәй ҙә тороп ҡалмаған, барыһы ла бүләктәр булып, балалар ҡулына күскән.


ИҒЛАНДАР

*"Ғаилә" башҡорт һәм татар ойошмаһы ғаилә ҡорорға теләгән яңғыҙаҡтарҙы (25-80 йәшлек) саҡыра. Ихлас ярҙам итербеҙ!*
*Тел. 8-9872428008 (Роза).*

❖ ❖ ❖

*"Киске Өфө" гәзите редакцияһына "В" категориялы водитель талап ителә. Иғлан буйынса 8(347) 253-25-44 телефонына мөрәжәғәт итергә.*

ӘЙТӘГҮР!

# НИМӘ БҮЛӘК ИТӘҺЕҢ?

**SuperJob порталының тикшеренеүҙәр үҙәге белдереүенсә, быйыл Рәсәйҙә йәшәүселәр Яңы йыл бүләктәре өсөн яҡынса 14 300 һум тотонған, былтыр яҡындарын ҡыуандырыу уларға 12 500 һумға төшкән. Миллиондан ашыу халыҡ йәшәгән ҡалалар араһында иһә тәүге урында Мәскәү тора, мәскәүҙәр быйыл бүләк өсөн 18 меңен сығарып һалырға әҙер. Ә һеҙ Яңы йылға бүләктәр алаһығыҙмы? Ошо һорау менән беҙ ҙә уҡыусыларыбыҙға мөрәжәғәт иттек.**



**Сәләймән Зекрин, Сибай ҡалаһы:** Яңы йылға бүләк бирешеү ҙә шул сит модаға эйәреү инде. Иртән тороп, машинамды йылытайым әле тип, салонға инеп ултырып, радио ҡабыҙып ебәреүең була, "Юлдаш"тағы рекламалар шул бүләк тураһында иҡсәртә лә башлай. "Ҡәҙерлем, - тей бер ҡатын яғымлы тауыш менән, - Яңы йыл етә, бүләк алдыңмы?" Хәҙерге ҡатын-ҡыҙ күҙлегенән ир кеше йомарт, киң күңелле, бай булырға тейеш бит инде, "Нимә кәрәк һиңә", - тип һораған була унынһы. "Тун, - ти тегеһе күҙен дә йоммай. - Миңә лә, әсәйемә лә..." Элек рекламаларҙа тунды ҡатындар үҙҙәренә генә һорай ине, хәҙер, бактиһән, кейәү ҡәйнәһенә лә мотлаҡ ҡиммәтле тун менән ҡыуандырырға тейеш. Боронғо кейәүҙәрҙең ҡыҙҙы ала килгәндә ҡайнықәйнәһенә тун бүләк итеүен әкиәт итеп уҡый инек, хәҙер шул заманға ҡайттыҡ, ахыры: тун бүләк итерлек хәлең бар икән, һин шәп кейәү, юҡ икән, шундайын әҙләп ҡарарға ла мөмкин, тип уйлай башлауҙары бар бит әле. Йәғни, махсус рәүештә байрам бүләге ҡиммәтле булырға тейеш, тигән уйҙы көсләп һеңдерәләр, шунан ир менән ҡатын араһында аңлашылмаусылыҡ килеп сыҡыуы тыуа: берәһе көтә, икенсеһе бүләк итә алмай. Шуға ла бында үлсәүҙең ҡайһы яғына баҫырға ла белеп булмай. Үҙем улай ҡиммәтле бүләктәр яһағаным юҡ, ғәҙәттә, балаларға Ҡыш бабай бүләге тигән булып, шыршы аҫтына нимәләрҙер ҡуйған булабыҙ инде.

**Гөлйөҙәм ХӘЛИЛОВА, Әбйәлил районы:** Юрғаныңа ҡарап, аяҡ һуҙаһың инде. Мәскәүҙәрҙең эш хаҡы менән беҙҙекен сағыштырырға ла түгел, шуға ла ундай уҡ суммаға булмаһа ла, бүләктәр алырға тырышам. Сит ил киноларында ғына күргән Раштыуа байрамдарына оҡшап китте шул хәҙер Яңы йыл да. Гирляндалар, бүләктәр, тултырылған тауыҡ тигәндәй... Нисектер, байрам бүләк һораған кеүек бит ул. Балаларға ла, ейәндәргә лә, апай-килендәргә лә - таҫтамал, шоколад, кеше көлһә лә, нәскиҙәр. Алдан йыя башлайым, шулай кеҫәгә ныҡ һуҡмай, юғиһә, байрам алдынан хаҡтар ҙа тешләшә башлай. Ә үҙем булмышым менән яңғыҙлыҡ яратҡан кешемен. Шул сит модаға эйәреп, Яңы йылды яңғыҙ ҡаршыларға ярамай, ти ҙә торалар. Шулай уҡ яңы берәй әйбер кейергә кәрәк икән. Ә мин өйҙә үҙем генә рәхәтләнеп совет киноларын ҡарап ятам. Күпме ҡараһаң да ялҡытмай торған фильмдар шулай уҡ байрам символы бит ул.

ӘЙҘӘГЕҘ...

## ҮҘЕБЕҘ ӘҘЕРЛӘЙЕК!



**Һуңғы бер нисә йылда Яңы йыл өҫтәленә тик үҙем әҙерләгән ризыҡтарҙы ғына ҡуя торған ғәҙәткә эйә булдым. Һатып алғанға "мода бөттө" беҙҙең ғаиләлә.**

Иҫләйһегеҙме, беребеҙҙән-беребеҙ уҙҙырып магазиндан алынған консерваланған ананас, борсаҡ, бөшмәк, фасоль, кукуруз, балыҡ, ыҫланған тауыҡ менән ниндәй генә салат эшләмәнек. Уның һәр ҡатына майонез һөртәһең, йомортҡаның ағын, һарыһын ҡырғыстан үткәреп биҙәйһең, йәнә өҫтөнә сыр ҡыраһың... Уларҙан тыш, чипсы, сохарый, сәтләүектәр ҡушылғанын, ҡышҡы, кем әйтмешләй, "Оливье" салатын эшләйһең. Әйткәндәй, декабрь айының эш хаҡының яртыһынан күбеһе генә түгел, ә Яңы йылға әҙерлек ваҡытының да күп өлөшөн ала ине салат әҙерләү.

Хәҙер мин салат әҙерләмәйем. Бик һирәк осраҡта "Гректарса" тип аталғанды ғына эшләйем. Унда майонез юҡ, тик ҡыяр, борос, помидор кеүек йәшелсәләр генә. Лимон һуты һәм зәйтүн майы ҡушып болғатаһың да - ризыҡ әҙер ҙә. Өҫтәлдә лә биҙәй, ашауға еңел дә, ә иң мөһиме - файҙалы ла! Элекке кеүек, ҡаҙҙы духовкаға ла ҡуймайым. Һүрән генә утта иркен һауытта йомшаҡ ҡына итеп бешереп алам да, һурпаһын һөҙөп, етерлек кенә итеп ҡалдырып, ҡалғанын банкаға тултырып, һыуытҡыҫҡа ултыртам. Был һурпаны өс көндән һуң да аш итеп эсергә була. Ә итен табынға бишбармаҡ менән бирәм, һурпаһын ҡоротлап, йәшел тәмләткестәр менән ултыртам. Юғиһә, ҡаҙ-өйрәкте духовкала ҡыҙҙырып, майы ағып, йәмһеҙләп, ҡатырып, киптереп бөтә торғайным. Ашһыҙ булмай бит инде, ит тә бешерәһең тағы. Әҙерләгәнең бер кисә ашалып бөтмәй, ризыҡ ныҡ исрафлана.

Ғөмүмән, Яңы йылда табынын нисек була, ризыҡын йыл буйы шулай була, тигән фекер йәшәне. Шуға күрә, берберееһенән күрмәксе, һуңға аҡсаһына булһа ла өҫтәлен үҙе ашар-ашамаҫ ашамлыҡ менән тултыра торғайны халыҡ. Әле лә бар ундайҙар. Социаль селтәрҙәрҙән күренеүенсә, салаттар, бутербродтар рецептары бер төркөмдән икенсеһенә күсеп йөрөй. Әммә минең өсөн түгел, мин табынға үҙем бешергән милли ризыҡтарҙы ғына ҡуям. Үрҙә әйткәнемсә, мотлаҡ бишбармаҡ, ҡаҙы йәки тултырма, ҙур бәлеш була. Емештәрҙән күп итеп мандарин алам. Еҫе лә тәмле, өҫтәлдә лә йәмләй. Сәк-сәк, бауырһаҡ бешерергә өйрәндем. Уның бер ҡыйынлығы ла юҡ, ваҡыт ҡына кәрәк.

Еңел генә бауырһаҡ рецебым менән уртаҡлашайым әле: 6 йомортҡаны миксерҙа яҡшылап күпертәбеҙ, 5 ҡалаҡ һөт, ярты балғалаҡ ҡабартҡыс (разрыхлитель), бер ҡалаҡ шәкәр, бер семтем тоҙ, он ҡушып ҡамыр баҫабыҙ. Ондо бер нисә тапҡыр иләһәң, яҡшыраҡ. Ҡамыр йомшаҡ булһа ла, ҡулға йәбешмәслек булырға тейеш. Өҫтөн ҡаплап, бер аҙ ял иттерәбеҙ. Ҡамыр ял иткәндә майҙы ҡайнатып, һыуытып алабыҙ. Ҡамырҙы ваҡ киҫәктәргә бүлеп, бау-жгуттар яһайбыҙ, 3-4 см оҙонлоҡта киҫәбеҙ. Майҙа алһыу төҫкә ингәнсе болғата-болғата бешерәбеҙ. Бешерә башлағанда май бик һалҡын да, бик ҡайнар ҙа булмаҫҡа тейеш. Бешкән бауырһаҡты майынан һарҡытабыҙ ҙа, һыуынғас, шәкәр оно (пудра) һибеп, табынға бирәбеҙ. Был тәмлекәсте бер-ике көн алдан бешереп ҡуйһағыҙ ҙа була. Табыныбыҙҙы үҙебеҙ бешергән файҙалы һәм сифатлы ризыҡтар ғына биҙәһен!

**Рәмилә КӘРИМОВА.**

**Мәләүез ҡалаһы.**

ҺЫЙЛАМАҒА...

## ТУРАМАЛАР

♦"Яңы йыл менән!" турамаһына 100 грамм бөшмәк, 2 һыған, 1 ҙур кишер, 2 ҡалаҡ дөгө, 1 "Магги" шаҡмағы, 100 грамм краб таяҡсалары, 3-4 бешкән йомортҡа, майонез кәрәк.

Тураманы һәр ҡатына майонез һөртөп, ҡатлап һаларға: һалам кеүек туралған һәм майҙа ҡыҙҙырылған бөшмәк, ваҡ ҡына итеп туралған һыған, ҡырғыстан үткәрелгән һәм ҡыҙҙырылған кишер, "Магги" шаҡмағы һалынған һыуҙа бешкән дөгө, оҙонса туралған краб таяҡсалары, эре ҡырғыстан үткәрелгән йомортҡа. Турама өҫтөнә майонез һылап, йәшел тәмләткестәр һәм йәшелсәләрҙән яһалған фигуралар менән биҙәргә.

♦"Яңы йыл төнө" турамаһына 200 грамм тауыҡ ите, 200 грамм алма, 200 грамм картуф, 50 грамм әстерхан сәтләүеге, 4 өлөш һарымһаҡ, 100 грамм майонез, 50 грамм ҡаймаҡ, тоҙ, петрушка кәрәк.

Тауыҡ итен, алманы, картуфты, петрушканы ваҡлап турарға, сәтләүек менән һарымһаҡты изергә. Бөтәһен бергә ҡушып болғатырға.

♦Еңел салатҡа 200 грамм груша, 150 грамм персик, 1 лимон, 100 грамм әстерхан сәтләүеге, шәкәр кәрәк.

Йыуылған һәм һөйәге алынған елəкемештәрҙе (лимондың тышы менән) шаҡмаҡлап турарға һәм бөтәһен бергә болғатырға, өҫтөнә сәтләүек, шәкәр һиберге.

♦"Әлиә" турамаһына 200 грамм кишер, 150 грамм алма, 2 ҡалаҡ майҙа ҡыҙҙырылған һоло ярмаһы, 4 ҡалаҡ ҡуйыртылған һөт кәрәк. Алманы, кишерҙе уртаса ҡырғыстан үткәрергә, ҡыҙҙырылған һоло ярмаһы һалып болғатырға һәм өҫтөнә ҡуйыртылған һөт ағыҙырға.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# УЛЫ БАРҘЫҢ - УРЫНЫ,

## ҡыҙы барҙың - ҡәҙере

Яман күҙ хайуанды ҡаҙанға керетер, яман һүҙ әҙәмде ҡәбергә керетер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙе уҡырға һәләтле булмаған башҡаларҙы уҡытыр.

**(Оскар Уайльд).**

Аҡыллы кеше үҙ-үҙенә генә талап ҡуйыр, аҡылһыҙ әҙәм башҡаларҙан талап итеп аптыратыр.

**(Ҡытай халыҡ мәҡәле).**

Шәхси яуаплылыҡ тойғоһо булмағандарҙа яман инстинкттар өҫтөнлөк итер.

**(Сара Бернар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер маҡтанырға яратҡан әҙәм үҙенең дуҫтары алдында, бер ниндәй ауырлыҡһыҙ һәм бер һүҙ әйтмәйенсә лә телһә кем менән уртаҡ тел таба алам, тип ыҫҡындырған. Дуҫтары уның был ғәжәйеп һәләтлеген тикшерергә, үҙ күҙҙәре менән күрергә ҡарар иткән. Бына улар бергәләп юл буйлап атлап киләләр. Ҡаршыларына бер көтөүсе осраған. Дуҫтарының береһе маҡтансыҡҡа: "Һин ошо көтөүсе менән уртаҡ тел табып ҡара әле", - тигән. Бер һүҙ ҙә әйтеп тормайынса, маҡтансыҡ көтөүсе эргәһендә туҡтап, уға уҡталған. Ҡулын күтәреп, көтөүсегә һуҡ бармағын күрһәткән. Көтөүсе уға яуап итеп ике бармағын өҫкә күтәргән. Шунан маҡтансыҡ бер ҡулындағы бармаҡтарын йәҙып ебәреп, көтөүсегә устарын йәйеп күрһәткән. Уға яуап итеп көтөүсе йоҙроҡ төйнәгән.**

**- Әйттем бит мин һеҙгә! - тип ҡысҡырып ебәргән маҡтансыҡ. - Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, мин көтөүсе менән уртаҡ тел таптым! Беҙ бер-беребеҙҙе аңланыҡ. Ҡулымды күтәреп, бер бармаҡ күрһәткәндә, көтөүсенән: "Һин Хоҙайҙың берҙән-бер булыуына ышанаһыңмы?" - тип һораным. Көтөүсе миңә ике бармағын күрһәтте һәм: "Эйе, Хоҙайҙың берҙән-бер булыуын һәм уның бөйгәмбәре Мөхәммәт икәнен таныйым", - тине. Устарымды күрһәтеп, мин уға:"Ә һин көнөнә биш ваҡыт намаҙ уҡырға кәрәк, тигән талапты үтәйһеңме?" - тип һораным. Ул миңә йоҙроҡҡа төйөлгән ҡулын күрһәтеп: "Эйе, Ислам ҡанундарын бына ошолай, йоҙроҡҡа төйнәлгән һымаҡ ныҡлы тотам", - тип әйтте...**

**Маҡтансыҡтың дуҫтары уның был һәләтлегенә һис кенә лә шикләнмәҫтән, көтөүсене тикшерергә була һәм уға һорау бирә.**

**"Эйе, мин был кешене бик яҡшы аңланым, - ти көтөүсе. - Һуҡ бармағын күрһәткәндә ул минең күҙемде соҡорға теләгәнен аңланым. Шуға ла мин, ә мин һинең ике күҙеңде лә соҡояҫаҡмын, тип, ике бармағымды күрһәттем. Ул, моғайын, асыуланғандыр һәм минең яңағыма сабырға теләп, миңә усын күрһәткәндер. Шунан иһә мин, ә мин ошо йоҙроҡтарым менән башыңды төйәсәкмен, тип, уға йоҙроҡ төйнәнем. Эйе, беҙ бер-беребеҙҙе бик яҡшы аңланыҡ..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
27 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3177
Заказ - 1845